Башҡортостандың аҫыл заттары

# Сәғит Исмәғилев



Славные люди Башкортостана

# Сагит Исмагилов

# Сәғит Фәтклисла м улы Исмәғилев

*(туғанлы ептәре)*



Башҡортостандың аҫыл заттары

# Сәғит Исмәғилев

*Документаль повесть*



Славные люди Башкортостана

# Сагит Исмагилов

*Документальная повесть*

Өфө ● 2008 ● Уфа

УДК 82.09 (470.57)
ББК 83.3 (2Рос.Баш)
Х 51

Хисамов Ғәлим
“БАШҠОРТОСТАНДЫҢ АҪЫЛ ЗАТТАРЫ” серияһында **“Сәғит Исмәғилев”**. Документаль повесть, һүрәттәр менән. Өфө: “Профнәшер”. 2008. — 224 бит.

“Башҡортостандың асыл заттары” серияһында баҫылған был китап бөгөнгө Башҡортостанды ни-геҙләүгә һәм уның иҡтисад системаһын ғәмәлдә күтәреүгә өлөш индергән эшҡыуарҙар араһында билдәле шәхес С.Ф.Исмәғилевтың томо-шон, эшмәкәрлеген һүрәтләүгә ҡоролған. Китап илдең уҙғаны, бөгөнгөһөн анализлау һәм киләсәген күҙаллау йәһәтенән күптәрҙә ҡыҙыҡһыныу уя-тыр.

Хисамов Галим
**“Сагит Исмагилов”**
в серии “СЛАВНЫЕ ЛЮДИ БАШКОРТОСТАНА”.
Документальная повесть с иллюстрациями. Уфа: “Профиздат”. 2008. — 224 с.

Книга, издаваемая в серии “Славные люди Башкортостана”, отражает жизнь и деятельносить личности, известной в Башкортостане как человек испытавший на практике новую экономическую систему и сумевший доказать, что действуя на правовых основах, можно устойчиво развивать предпринимательство. Книга вызовет интерес у читателей анализом прошедших дней и сегодняшнего состояния страны, а также прогнозом ее будущего.

ISBN 978-5-85051-442-6

© Хисамов Г.А., 2008
© «Профиздат»(оформление), 2008.

# Сәғит Исмәғилев

документаль повесть

## Хәрбиҙәр

1918 йыл. Йәйге көн тыуып ҡына килгән ваҡыт, һил. Тынлыҡты ел дә боҙорға теләмәй, ә ҡоштарҙың һайрар сағы үткән инде. Әммә тыныслыҡты кеше тауышы боҙҙо.

— Федор! Сдавайся! Ты окружен. Сопротивление бесполезно! Нас 200 сабель, у тебя отряд маленький. Сдавайся! Иначе всех уничтожим!

Ырғып торған Фәхрислам иң алдан наганы менән ҡылысын алды, һаҡлыҡ менән тәҙрәгә күҙ һалды. Ҡойма артында байтаҡ кешене шәйләргә була ине.

Икенсе өйҙә ятҡан ағаһы Сәләхитдин дә һикереп торғайны. Ул да тәҙрәнең ҡорғанын саҡ ҡына ҡуҙғатып тышты шәйләйне. Ҡамағайнылар. Фәхрисламдың янына йүгерҙе. Ул уңайлы урын һайлап атышырға йөрөй ине.

— Беҙҙең бөтәбеҙҙе лә, балаларыңды ла бөтөрөр китәһеңме?— Сәләхитдин бик ҡырыҫ һәм талапсан өндәште. — Бөтөртөр булғас, ул баланы күрә ҡайтмаҫ кәрәк ине.

Фәхрислам ысынлап та кисә кис һуңлатып ҡына ҡайтып төшкәйне. “Бисәң ҡыҙ тапҡан,”— тип хәбәр еткергәйнеләр Ырымбур яғында аҡтар менән һуғышып йөрөгән ҡыҙыл командир Фәхрисламға. Яңы тыуған баланы бик күргеһе килде. Унан өлкән берәүһе бар барлығын. 1913 йылда тыуған Фәтҡлисламы. Ул тыуғас, Фәхрислам Герман һуғышына китеп барҙы. 1917 йылда ғына ҡайтҡайны. Һуғыш ығы-зығыһы инде үҙҙәрендә ҡупты. Граждандар һуғышы көсәйгәс, ҡыҙыл отряд ҡороп, Ырымбур мосолман хәрби комитетының фарманы буйынса йәнә һуғыш артынан һуғышта йөрөй бирҙе. Балаһы тыуыу хәбәре лә уны эйәр өҫтөндә саҡта барып тапты.

Бала һөйгөһө килде, ошо тойғо түҙеп торғоһоҙ була башлағас, өлкән командирға мөрәжәғәт итте.

— Бер генә көн тороп киләм өйҙә. Бер көн ҡайтам, бер көн киләм. Өс кенә көнгә ебәр.

— Һинең Таймаҫың аҡтар ҡулында бит. Унда нисек бараһың?

— Минең ҡайтҡанды берәү ҙә һиҙмәҫ.

— Күп кеше йөрөтмә үҙең менән.

— Берәүҙе лә алмайым, үҙем генә ҡайтам.

Әммә Фәхрисламдың ҡайтҡанын кемдер аҡтарға еткереп өлгөргән. Төп көстәренең береһе бынан йыраҡ түгел Юлдаш ауылында урынлашҡан тиҙәр ине. Шунан килделәрме икән? Уғаса йәнә тауыш яңғыраны.

— Федор! Это говорит полковник Белобородов! Ты меня слышишь?

Фәхрисламды урыҫтар үҙҙәренсә бороп Федор Вахриевич тип йөрөтә ине.

— Слышу!— тине Фәхрислам.

— Бросай оружие и выходи! Выходи пока всех вас не прикончили.

Бирелеүҙән башҡа сара юҡ икәнен төшөндө Фәхрислам. 200 һыбайлыға бер үҙең ҡаршы тораһыңмы ни?

Фәхрислам солан ишеген шар асты ла тәүҙә ҡылысын, шунан наганын тышҡа ырғытты, артынан үҙе сыҡты. Шунда уҡ тегеләр йүгерешеп килеп, ҡулдарын шаҡарып бәйләп тә алдылар.

— Где остальные?— Белобородов килеп етте.

— Кто — остальные?

— Твой отряд?

— Я — один.

— Один? Обыскать!

Фәхрислам менән ағаһы Сәләхитдиндең өйҙәрен аҫтын өҫкә әйләндерҙеләр, тикшермәгән мөйөштө, хатта ултырғыс аҫтарын ҡалдырманылар.

— Ничего нет!— тип фарман үтәлеүен еткерҙеләр.

— Не обманывает значит. Поехали!— Белобородов атҡа ырғып менде. Бүтәндәр ҙә атландылар. Фәхрисламды ат арбаһына ултырттылар, ян-яғына ҡарауыл ҡуйҙылар.

Шул көндө үк Фәхрисламды бикләгән улус төрмәһенә уның менән ҡуша яңы тормош ҡорабыҙ тип йөрөгән урындағы совет власы етәкселәре Заһиҙулла Арaптанов, Николай Петров, Мостафа Мөхәмәтйәновты килтереп яптылар. Туҡмалыуҙан шеш-күге, яраһынан һарҡҡан ҡаны ла ныҡлап ҡатып өлгөрмәне, быларҙы Таймаҫ төрмәһенән сығарып, тейәнеләр ҙә көнъяҡҡа алып киттеләр. Ығыр-шығыр арбала көн буйы тиерлек бәүелгәс, 60-70 саҡрым ара үтеп, Дедово-Исаево ауылына килтереп йәнә яптылар. Иртәгәһенә хәрби — ялан суды ойошторҙолар. Кем Рәсәй — Герман һуғышында ҡатнашҡан — шуларҙы ғына — йәғни хәрбиҙәрҙе хөкөм иттеләр. Иң ҡаты гәйепләү, моғайын, Фәхрисламға эләккәндер.

Судъялар ҡаршыһына килтереп баҫтырҙылар быны. Йәшел буҫтау ябылған өҫтәл артында өсәү ултыра, ситтәрәк айырым өҫтәл янында йәнә берәү — быныһы ҡулына ҡәләм тотҡан, алдында ҡағыҙ. Протокол алып бара икән, тип уйланы Фәхрислам. Хөкөмдарҙар бөтәһе лә энәнән-ептән кейенгән, биттәренә сиртһәң, ҡаны атылып сығырҙай булып ҡыҙарышҡандар. Әйтерһең, һуғышта түгел былар, ә кинәнес тормошта ғүмер һөрә.

— Фамилия, имя, отчество?— тип өндәште урталағыһы.

— Исмагилов Фахрислам Фахритдинович. Офицер штаба. В нынешнее время командир отряда красной гвардии. Потомственный военный. Отец воевал в русско-турецкой войне, Георгиевский кавалер, хорунжий, брат Салахитдин был в русско-японской войне. Прадед Исмагил в составе башкирского полка в Отечественной войне против французов дошел до Парижа. В этой войне из Таймасово участвовал 85 человек, из них 21 — мои родственники.

Ошоларҙы ишетеү менән судъялар китте ҡыҙып. Береһен икенсеһе уҙҙырырға тырышҡандай Фәхрисламды һатылыуҙа гәйепләнеләр. Береһе:

— Аптырайым мин һиңә, — тип сәнсерҙәй булып текләне ғәйепләнеүсегә, — офицер башың, өй тулы байлыҡ, аҙбар тулы малың менән... Әйткәндәй, әфәнделәр,— ул янындағыларға боролдо. — Полковник Белобородов Исмәғилевты ҡулға төшөргән саҡта уның өйөнән ике ҡаҙаҡҡа яҡын алтын тартып алған... Шундай байлыҡҡа эйә була тороп, ни эшләп һин теләһә ниндәй әтрәгәләмгә эйәреп, ҡыҙыл сепрәк күтәреп, үҙеңдең изге антыңа ҡаршы һуғышып йөрөйһөң?

— Мин әтрәгәләмгә эйәрмәйем. Мин эшсе һәм крәҫтиәндәрҙән торған ҡыҙыл гвардия отрядына етәкселек итәм. Командирҙың дәрәжәһен кәмһетмәүегеҙҙе һорайым.— Фәхрислам ни өсөн үҙенең ҡыҙылдар яҡлы булып китеүен дә, һуғышҡа тиклем үк киләсәктә билдәле шәхескә әүереләсәк Бәхтегәрәй Шәфиев Таймаҫта парикашик булып эшләгәндә үк тормош тигеҙһеҙлеген тикшергәндәрен, әлбиттә, әйтеп торманы.

— Ана бит ни һөйләй. Мин уны тәүбәһенә килер, ғүмерен һаҡлап ҡалыу мөмкинлеге булыр тип уйлағайным. Юҡ. Күреп тораһығыҙ, был иманын юғалтҡан. Рәйес әфәнде, хәрби антына хыянат иткән һәм офицер дәрәжәһен бысратҡаны өсөн Исмәғилевты атырға хөкөм итеү тураһында тәҡдим индерәм.

— Мин ҡушылам.— Икенсе судья шулай тине.

Рәйес:

— Атырға!— тип ҡысҡырҙы һәм усы менән шапылдатып өҫтәлгә һуҡты.

Шул көндө үк аттылар Фәхрисламды һәм ауыл ситендә күмеп ҡуйҙылар.

Кем белә, ҡыҙы Һәҙиә тыуыу шатлығынан ашҡынып Таймаҫҡа ҡайтмаған булһа, бәлки, оҙон ғүмер кисерер ине. XX быуат башында өс һуғыш үтеп тә иҫән ҡалып йәшәүселәр булды бит. Шундайҙарҙан Таймаҫтан Мәһәҙиев Йәнтүрә, Байғотлин Ҡорбанғәле, Биҡҡолов Ғәле, Ҡобағошов Хәйбулла һәм башҡалар ине. Фәхрисламдың атаһына ла, һуғыш касафаттарын үтһә лә, тыныс тормошта йәшәү бәхете тейҙе бит.

Һәҙиә, атаһы уны күрергә ҡайтҡанда, яңы ғына тыуған ҡыҙ бала, Фәхрисламды кеше һөйләүенә ҡарап ҡына күҙ ал-

дына баҫтыра ине. 2 метр самаһы оҙон буйлы, өҫтөнә погондарының суҡтары елберләп торған китель кейгән, муйынына тәре taҡҡан ҡап-ҡара сәсле, аҡ йөҙлө 22 йәшлек ир ауыл урамы буйлап үтһә, һәммәһе лә тәҙрәгә ташланыр булған. “Йөрөй шунда тәре тағып, динһеҙ”,— тип орошҡан өлкәндәр. Тик улар тәренең Георгий ордены — хәрбиҙәрҙең иң юғары дан билдәһе икәнен уйламаған, йә белмәгәндер инде. “Күрешеүен ҡара һин уның, күрешеүен,— тип тә ғәжәпләнгәндәр ауылдаштар, — бейәләйен сисмәй күрешә лә баһа”. Фәхрислам батша армияһы офицерҙарына хас булғанса китель менән ҡуша бирсәткәләр кейгән һәм уларҙы һалмайынса күрешкән.

Аталары үлгәндә улы Фәтҡлислам 5 йәшлек, ҡыҙы Һәҙиә аҙналыҡ ҡына булып ҡала. Әсәләре Шәмсиямал иренең үлеү ҡайғыһын күтәрә алмайынса мәрхүмә була. Атаһының ағаһы Сәләхитдин һәм әсәһенең атаһы Шәрәфетдин ҡарай уларҙы. Икеһе лә хәлле генә кеше була. Шәрәфетдиндең 3 көтөү һарығы, әллә күпме йылҡыһы, һыу тирмәне, үҙенең утары була. Ғөмүмән, башҡорттар революцияға тиклем бөлөп йәшәгән халыҡ түгел. 1913 йылда алынған халыҡ һәм уның милек иҫәбенән күренеүенсә, башҡорттарҙың һәр ғаиләһе иң кәмендә 2 ат тотҡан, унан тыш һыйыр малы, кәзә-һарығы булған. Тик мөлкәттең файҙаһы революцияға тиклем генә тейә шул, унан һуң тир түгеп тапҡаның зыянға әүерелә. Сәләхитдин менән Шәрәфетдин дә бүтән ауылдаштары һымаҡ аслы-туҡлы, булыр-булмаҫ кейем менән көн күрә совет осоронда.

Фәхрисламдың атайһыҙ ҡалған балалары ла бөлгөнлөк ҡорбаны булыр ине, бәлки. Тик уларҙы атаһы ҡотҡара.

Әйтте һүҙ, үлгән кеше нисек ҡотҡарһын тиерһегеҙ. Әммә ҡайһы берәүҙәрҙең үлеме лә эҙһеҙ үтмәй.

1918 йылда Дедово-Исаевола (Хәҙер Ырымбур өлкәһенең Октябрьский ҡасабаһы) аҡтар оҙаҡ тора алмай. Уларҙы ҡыҙылдар ҡыуып сығара һәм тегеләрҙең ҡылған вәхшилектәрен үҙҙәренсә төҙәтергә тотона. Ауыл ситендә күмелгән ҡорбандарҙы, шул иҫәптән Фәхрислам Исмәғилевтың мәйетен сығарып, ауылдың уртаһында туғандар зыяраты яһап яңынан

ерләйҙәр, таҡтаташҡа исемдәрен яҙалар. Ҡараусыһыҙ ҡалған ғаиләләр тураһында хәстәрлек итеп, махсус ҡарар сығаралар һәм шул нигеҙҙә ярҙам ойошторалар. Фәхрислам Исмәғилевтың ҡатынын һәм етем ҡалған балаларын һәр төрлө һалымдан ҡотҡаралар, уларға махсус пособие билдәләйҙәр, кәрәге булһа, бүтәнәсә ярҙам күрһәтергә — тип яҙалар. Пособие һәр саҡ килеп тора, тик шуның менән генә аслыҡ йылдарында тере ҡала улар. Әлеге ҡарар ҡыҙыл командир балаларын ғына түгел, бүтән туғандарын да һәр төрлө ҡурҡыныстан, бәләнән ҡурсып тора. Исмәғилевтар нәҫеленә, Фәхрисламдың ҡатыны Шәмсиямалдың туған-тыумасаһына кулактарҙы туҙҙырыу, 1937-1953 йылдарҙағы репрессия елдәре ҡағылмай үтә, ҡыҙыл командир ҡалҡаны һаҡлай уларҙы. Был исемдең ҡөҙрәте ҙур икәнде ауылдаштар яҡшы белә һәм кәрәк саҡта оҫта ғына файҙаланып та ҡуя. Таймаҫ ауылында мәктәп астырыуҙы юллаған сағында Фәхрисламдың ағаһы Сәләхитдин уның исемен байраҡ итеп күтәрә. Ҡыҙыл командир Исмәғилевтың, уның туғандарының, ауылдаштарының балаларын уҡытыр өсөн кәрәк мәктәп. Ҡыҙыл командир шул балаларҙың бәхете хаҡына ҡан ҡойҙо, йәнен бирҙе бит, тип яҙа. Сәләхитдин үҙе лә төшөп ҡалғандарҙан түгел. Ул егерменсе йылдар башынан ВКП(б)-ла тора, Башҡортостан Үҙәк Башҡарма комитеты ағзаһы була. М. Калинин Башҡортостанға килгән сағында бөтә союз старостаһын хөрмәтләү тантаналарында ул да ҡатнаша. Калинин менән фотоға ла төшкән тиҙәр, тик рәсем һаҡланмаған.

Фәхрисламдың отрядында хеҙмәт иткән бүтәндәрҙең дә исеме ерҙә ятып ҡалмай. Моталдан Зәйнетдин Бураҡаев, Ялсыҡайҙан Хөсәйеновтарҙың исеме телдән, гәзит биттәренән төшмәй. Ғөбәйҙулла Хөсәйенов Башҡортостан Үҙәк Башҡарма Комитетының III съезына делегат булып та бара. Был турала уның балаһының балалары ла күкрәк киреп һөйләй.

Ә Фәхрислам Исмәғилевты өсөнсө ҡатҡа ла ерләйҙәр. Быны, бәлки, берәү ҙә белмәгән булыр ине. Әммә 60-сы йылдарҙа башына таҡыя кейгән йәтеш кенә һаҡал-мыйыҡлы берәү

Фәтҡлисламды эҙләп килә. “Мин Ырымбур өлкәһенә ҡараған Татар Ҡарғалыһының элекке муллаһымын. Революция ваҡытында Дедовола атайыңды туғандар ҡәбере тип бер соҡорға күмгәс, кеше күрмәгәндә кире ҡаҙып алып, Ҡарғалыға илтеп ерләнем. Үҙебеҙҙең мосолманыбыҙ кафырҙар араһында ятмаһын тинем. Мөьмин мосолман ине бит ул, белә инем мин Фәхрисламды. Ҡарғалы зыяратында уның ҡәбере. Баш осона таш ҡуйғанмын, исем-шәрифенең баш хәрефтәрен, вафат булған йылын яҙғанмын”,— тип ҙур сер сисеп китә мосафир.

## Уйҙар

Был ваҡиғаларҙан һуң күп йылдар үткәс, Фәхрисламдың улының улы Сәғит олатаһының йәшен байтаҡҡа уҙып киткәс, уның хаҡында ҡайта-ҡайта уйлана. Һорауҙарының береһе: олатайым аҡтарҙың хәрби-ялан судында ни эшләп үҙенең хәрбиҙәр нәҫеленән икәнлеккә айырыуса баҫым яһай һуң?

— Яуап бирергә һүҙ эйәһе үҙе юҡ. Шуға бар белемеңде, ишеткән-күргән мәғлүмәтеңде бер төйөнгә йыйып үҙең яуап эҙләйһең инде, Сәғит ҡустым,— тип үҙенә өндәшә ул.

Сер йомғағының осон атаҡлы Әхмәтзәки Вәлидиҙең беренсе башҡорт ҡоролтайында яһаған сығышынан табырға мөмкин. Башҡорт ғәскәре ойоштороорға кәрәклекте раҫлағанда ул, башҡорт элек-электән ғәскәри кеше булған. Ғәскәр хеҙмәтен яратып һәм намыҫ менән башҡарған, ти. Граждандар һуғышы осоронда Башҡорт ғәскәрҙәре етәкселәренең береһе, совет осоронда армия генералына тиң дәрәжәгә етеп репрессия ҡорбаны булған Муса Мортазин башҡорт гәсәкәрҙәре хаҡында махсус тикшереү яҙа. Шунан күренеүенсә, башҡорттар үҙҙәрен белә-белгәндән бирле хәрби хеҙмәттә ҡатнашҡан һәм һәр ир-егет һуғыш эшенә гел әҙер торорға тейеш булған. Йәғни һәр берәү — ярым хәрби кеше ул. Ошо рәүеш 1863 йылда кантондар системаһын бөтөргәнсе бара һәм 1917 йылда Башҡорт ғәскәрен ҡабаттан төҙөгәс, аяҡҡа баҫтырыла һәм граждандар

һуғышы тамаланыу менән ҡылыс күтәрергә мөмкинлек булмаһын өсөн тағы бөтөрөлә. Башҡорт ғәскәре 1942 йылда 16-сы Башҡорт дивизияһы йөҙөндә ҡайтанан тергеҙелә, Бөйөк Ватан һуғышы бөтөү менән, баяғыса башҡорт ҡылыс күтәрмәһен тип, йәнә тарҡатыла.

Бүтән төрлө әйтһәк, ғәскәри хеҙмәт, һуғыш эше һәр башҡорттоң ҡанына һеңгән. Хәрби кеше булып йөрөү намыҫ эше, ирлек билдәһе, дәрәжә күрһәткесенә тиң була. Ғәскәри хеҙмәт, һис шикһеҙ, иҡтисад яғынан да отошло. Еңеүле һуғыштарҙа ҡатнашҡан өсөн хәрбиҙәр һалымдан, түләүҙәрҙән азат ителгән, үҙе үлеп ҡалһа, өлеге өҫтөнлөк ғаиләһенә, яҡын туғандарына бирелгән. Әйтәйек, тархандар Сыңғыҙ хан дәүеренә тиклем үк шул хоҡуҡҡа эйә була һәм кантон системаһы бөтөрөлгәнгә хәтле уны һаҡлай.

Ғәскәр башҡорттарға, беренсе сиратта, байлығын һаҡлар өсөн кәрәк. Ә уның һаҡлар нәмәһе булған. XVII-XVIII быуаттарҙағы урыҫ тикшеренеүселәренең яҙыуынса, башҡорт тыуымдан аҫаба — ер хужаһы, ҡалған байлыҡты үҙе яһай: мал аҫырай, ҡорт тота, ауылдар һала, иген игә, мәғдән сығара, мәсеттәр-мәҙрәсәләр аса — бөтәһен дә үҙ ерендә башҡара. Урта Россия крәҫтиәндәре, йә рус булмаған бүтән милләт кешеләре менән сағыштырғанда, башҡорттарҙың йәшәү кимәле байтаҡҡа юғары булған.

Шуға күрә лә Фәхрислам Исмәғилев үҙен нәҫелле хәрби тип атай. Мәғәнәһе лә, хаҡы ла булған үҙен шулай тиергә.

## Фәтҡлислам менән Хәтифә

Бабай — олатайҙары ҡулында бешенке, әшсән, атаһы кеүек буйсан булып үҫә Фәхрисламдың етем ҡалған улы Фәтҡлислам. Буйы 2 метрға яҡын, күкрәк тимерлек күреге һымаҡ. Көс-ҡеүәтте уға Аллаһы тәғәлә йәлләмәй биреүе тураһында көләмәс итеп бер хәлде һөйләйҙәр Таймаҫта. Фәтҡлислам ир уртаһы саҡта ниндәйҙер йыйылыш бара икән. Ауылдың бай-

таҡ кешеһе килгән, ирҙәр ҙә, ҡатын-ҡыҙ ҙа күп. Көн тәртибендәге бер мәсьәләне ҡарағанда һүҙҙең осо Фәтҡлисламға барып төртөлә. Шуны ғына көткән һымаҡ ике ир йәнәш баҫып ала ла быны һәр яҡтан тәнҡитләй, кәмһетә башлай. Өҫтәүенә барыһы ла бушалюҡҡа. Һүҙ көрәштереп, тел сарлап өйрәнмәгән Фәтҡлислам, ултырған еренән ырғып тороп, тегеләр янына бара һәм бер юлы икеһенең дә елкәһенән тотоп күтәрә һәм бейеккә ҡағылған сөйҙәргә кейеменән элә лә, сыға ла китә. Ҡабаттан Фәтҡлислам тураһында яманлап һүҙ әйтеүсе ауылда табылмай...

Йәше еткәс, Фәтҡлислам үҙ ауылында мәктәпкә төшә һәм уны яҡшы ғына уҡып бөтөрә. Артабан белемде Йылайырҙағы фабрика-завод училищеһында ала ла кире ауылға ҡайта. Ул саҡта белемле кешеләр аҙ, Фәтҡлисламды ауыл советы башҡарма комитетына рәйес урынбаҫары итеп һайлайҙар, магазин мөдире булып та эшләп ала. Туған-ырыу егетте өйләнедерергә була.

— Йәшең еткән, белемең бар, аҡылың үҙең менән,— тиҙәр уға, — башлы -күҙле булыу borондан ҡалған йола. Кәләш алып балалар үҫтереү — кешенең йәшәү мәғәнәһе. Беҙ һиңә Абделҡадирҙың ҡыҙы Хәтифәне алып бирәбеҙ.

Өндәшмәй Фәтҡлислам, ризалығын белдереп баш ҡына ҡаға. Гөрләтеп туй үткәрәләр һәм ике йәш йөрәк бергә тормош ҡора башлай. Әммә наҙланып йәшәү күпкә бармай. Ауылда Ҡыҙыл армия сафында хеҙмәт итергә егеттәр һайлайҙар. Хеҙмәткә барырға атлығып тороусылар күп, әммә 6 ғына кешене яраҡлы һанайҙар. Араларында, әлбиттә, һәр яҡтан өлгөр, яҡшы белемле һәм һап-һау ҡыҙыл командир улы Фәтҡлисламға йәрәбә төшә. Алыҫ көнсығышта 3 йыл әрме хеҙмәтен тултырып ҡайта ул. Ауылда йәнә ауыл советы башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары итеп ҡуялар. Бар эште лә еренә еткереп башҡарырға өйрәнгән Фәтҡлислам ҡушылғанды матур итеп үтәй, тормошо ыңғай ғына бара.

Әммә бәлә килә. Бер Фәтҡлислам ғаиләһенә генә түгел, ил башына төшә күтәргеһеҙ ауырлыҡ. Гитлер Германияһы

һуғыш аса. Фәтҡлислам һуғышҡа оҙатыуҙарын һорай. Әлбиттә, теләген ҡәнәғәтләндерәләр. Яңыраҡ ҡына армиянан ҡайтҡан йәш ирҙең өлгөһөн нисек хупламаһындар. Уға данлыҡлы Башҡорт кавалерия дивизияһында һуғышыу бәхете эләгә. Һуғыш бәхет түгелдер инде, әммә үҙ кешеләрең менән ҡуша дошманды дөмбәҫләү, һис шикһеҙ, уңайлыраҡ. Үҙ-үҙен аяуҙың ни икәнен дә белмәгән Фәтҡлислам 7 тапҡыр яралана, шуның 4-һе ҡаты яра, әммә бер ниндәй ҡәнәғәтһеҙлек белдермәй, еңелерәк урын эҙләмәй йәнә утҡа инә һәм тағы аяҡтан йығыла. Был юлы хәтәр контузия — бер ни ишетмәҫ булып ҡала. 1944 йылда һуғыш инвалиды тип фронттан сығаралар. Инвалид тип әйтеү генә анһат, Фәтҡлисламдың йәрәхәтһеҙ тән ағзаһы ҡалмай тиерлек. Ике аяҡтың да остары киҫелгән, ҡул — сулаҡ, бер снаряд ярсығы һул ҡалаҡ һөйәге аҫтынан ингән дә, һөйәкте йәрәхәтләмәйенсә, уңы аҫтынан сыҡҡан, өҫтәүенә — контузия. 1947 йылға тиклем Бәҡалылағы яугирҙәр госпиталендә дауалана.

Аллаһы тәғәлә үҙенә сыҙамлыҡ һәм һаулыҡ та биргәндер инде. Ғүмере буйы ашҡаҙанында снаряд ярсығы йөрөтөүенә ҡарамаҫтан, бирешеү, кеше алдында үҙен һынатыу тигәндең ни икәнен дә белмәй. 70 йәшендә атта һыбай йөрөй торғайны әле. Менеүе генә ҡыйыныраҡ ине атҡа. Тупыс аяҡтар менән ырғып булмай бит. Бында ла рәтен таба Фәтҡлислам. Атты болдор янына ғына килтереп туҡтатыр ҙа менер ҙә ултырыр ине. Үҙе ятраҡас, аттары ла һәр тын алышынан хужаһын аңлап тора.

Ир менән ҡатын йәшәй-йәшәй бер-береһенә оҡшай башлай, тиҙәр. Фәтҡлислам менән Хәтифә йәштән үк күп һөйләшмәҫ, уйлағанын бер-ике һүҙ менән ярып әйтер, алдына алғанын бирмәҫ кеше булғанғамылыр, тормошта үҙ-ара бер-береһен күҙ ҡарашынан уҡ аңлап йәшәйҙәр. Һуғыштан һуң Фәтҡлислам йәнә ауыл советы башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары булып юл эштәре, күперҙәр төҙөклөгө, ауыл урамдарының күркәмлеге өсөн яуап бирә. Театр кейем элгестән башлана, тиҙәр бит әле. Шуның һымаҡ, Фәтҡлисламдың эшендәге тәр-

тип үҙенең өйө тирәһенән, ихатаһынан башланыр ине. Кәртә-ҡурала ҡыйыш ҡағылған бер таҡта, ишек алдында бер бөртөк сүп күрмәҫ инең унын донъяһында. Хәтифә менән икәүләп почта ла ташынылар, халыҡтан һөт йыйып май заводына илттеләр. Ҡулдарынан килгән бер генә эштән дә сирҡана белмәне улар. Иң мөһимелер, моғайын, бына тигән балалар үҫтерҙеләр.

Уларҙың алты балаһы тыуа. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, тәүге икеһе тормай, үлеп ҡала. Өсөнсө булып 1949 йылда тыуған Зәлифә һәм бүтәндәре — барыһы ла иҫән. 1951 йылда Рәдифә донъяға килә, шунан Сәғит1953 йылда, 1959 йылда — Элмирә.

— 1992 йылдың 25 ноябрь көнөндә саҡырып алды беҙҙе атай,— тип хәтерләй Сәғит. — Ныҡ ауырып ята ине. "Һуғышта алған яралар мине теге донъяға алып китергә итәләр. Былай ҙа оҙаҡ йәшәргә форсат бирҙеләр. Ҡәнәғәт булып китәм был донъянан. Татыу, тыныс, бер-берегеҙгә генә түгел, күрше-күләнгә, дуҫ-иштәрегеҙгә ярҙамсыл булып йәшәгеҙ, рәнйетешмәгеҙ. Минең һеҙгә васыятым шул",— тип 26 ноябрь көндө мәңгегә күҙен йомдо атай.

Әсәй мәрхүмә атайҙан ҡалып тағы 7 йыл торҙо. 1999 йылда ерләнек,— ти Сәғит.

## Уйҙар — фекерҙәр

Олоғая барған һайын Сәғит атаһын йышыраҡ иҫкә ала. Атаһын ғына түгел, нәҫел ебен барлап сыға. Тәүҙә үҙҙәре араһының шәжәрәһен төҙөргә булды ул. 1812-1814 йылдарҙағы Ватан һуғышында ҡатнашҡан Исмәғил Ҡынбаевҡа тиклем юллап барып еткәйне, бер нәмәгә иғтибар итмәй булдыра алманы. Исмәғилгә тиклем дә беҙҙең нәҫел йәшәгән, унан һуң тармаҡ-тармаҡ булып таралған. Кем икән һуң улары?

70 йылға яҡын хөкөм һөргән совет осоронда тамырҙарҙы онотторoп бөткәйнеләр шул. Коммунистик йәмғиәт өсөн кәрәкле кешеләр Ленин, Маркс, Энгельс. Әйтерһең, 250 милли-

ондан ашыу кешенең атаһы әлеге өсәү. Шуның ҡарауы иртән уянғандан башлап йоҡлап киткәнгә тиклем телевидение, радио, китап, гәзит, журнал, йыйылыш, кәңәшмә — совет кешеләренең берҙәм ғаилә икәнлеген тылҡыны. Әммә саҡ ҡына форсат асылғайны, “быуаттарҙа емерелмәҫ дуҫ ғаилә” күҙ асып йомғансы тарҡалды, ул ғына ла аҙ, ҡорал тотоп бер-береһенә ут асты.

Шул осорҙа онотолоп бөткәйне нәҫел ептәре. Яңынан юллай башланылар хәҙер уларҙы. Һәр кем үҙенең кем икәнлеген белергә тырыша, шәжәрәһен төҙөй, тамырын юллай, ағай-энеһе менән осраша. Сәғит тә туғанлыҡ ебен һуҙа торғас, Бөрйән бейгә барып етте. Хәҙер ҙур шәжәрәне яттан белә ул. Әлбиттә, бөгөн эшкә башкөлләй ингән, тормоштоң бүтән мәшәҡәттәренә сумған Сәғиткә тарих менән шөғөлләнергә форсат етмәй. Бында бүтәндәргә таянаһың инде, ти ул. Ауылдаштары Өлфәт Ҡобағошов, бүтән бик күптәр Таймаҫтың боронғоһон өйрәнеү өсөн унар йылдар буйы көс һалдылар. Өлфәт әллә күпме архив ҡутарҙы, ауылдарҙағы зыярат таштарындағы яҙыуҙарҙы өйрәнде, тиҫтәләгән кешенең иҫтәлектәрен яҙып алды. Шунан улар китап сығарҙы. “Таймаҫ ауылы”. Юҡ, ауыл тарихы ғына түгел, башҡорт халҡының бер тарихы, бер мөһим киҫәге ул.

— Элегерәк атайым, йә бүтән берәү: “Беҙ — бөрйән ырыуы кешеләре”, тиһә, ышанмай торғайным,— ти Сәғит Фәтклисламулы. — Яҡын тирәләге күп ауыл ҡыпсаҡ булһын да, беҙ — бөрйән, имеш. Бөрйән ана ҡайҙа ята ла, Таймаҫ — ҡайҙа.

Бер уйлаһаң ышанырлыҡ та түгел шул. Бөрйәндең төп биләмәләре Урал тауының көнсығыш яғында бит. Бында ҡыпсаҡтар, Ашҡаҙарҙың Ағиҙелгә ҡойған тирәһендәге ерҙәрҙә — юрматылар... Тарих биттәрен аса башлағайнылар, ҡарттарҙың хаҡлы икәнлегенә ышандылар. Һайылмыш, Ҡурғаҙы һәм уларға ҡойған йылға буйҙары Бөрйән ырыуының айырым биләмәһе икән. Уның үҙәге бер заман Яҡут ауылы булған, шунан Таймаҫҡа күскән. Юлдаш, Ялсыҡай, бүтән ауылдарҙа йәшәгән икән дә баһа бөрйәндәр. Уларҙың бында килеп төпләнеүенә кәмендә 500 йыл...

Уғаса буш яттымы икән ни был ер, тип уйлай Сәғит. Ай-һай буш булмаҫ, ер бер ваҡытта ла буш ятмай. Моғайын ҡыпсаҡтар Башҡортостанға күсенгәнгә ҡәҙәр (Абулғазиҙың “Төрөкмән шәжәрәһе” китабында яҙылыуынса, XIII быуатта Дәшти Ҡыпсаҡ дәүләте ҡыйратыла һәм ҡыпсаҡ дүрт тарафҡа ҡаса. Береһе китә башҡортҡа) Һайылмыш, Ҡурғаҙы буйҙарында бөрйәндәр йәшәгән. Ҡыпсаҡтар башҡорт ырыуҙары араһына шына булып ярып кереп ултыра. Ошонда бер иҫкәрмә кәрәктер. Ҡыпсаҡтар, әлбиттә, көслө һәм күп була. Ләкин әлеге ерҙәрҙе тулыһынса ҡорал менән яулап алғандыр тип уйлау хаталыр. Сөнки ҡыпсаҡтар урынлашҡандан һуң күп тә үтмәй Татар-монгол һуғышы сыға һәм башҡорттар 14 йыл буйы баҫҡынысыларҙы үҙ еренә үткәрмәй тора ала. Азияның һәм Европаның яртыһын алған ғәскәргә ҡаршы торған башҡорт тегенән күпкә ҡайтыш ҡыпсаҡтан еңелер инеме ни? Күрәһең, ҡыпсаҡтарҙың урынлашыуы килешеү буйынса булған. Ҡыпсаҡтарға ер, ә башҡорттарға ерҙе һаҡларлыҡ кеше кәрәккән. Башҡорттар биләгән ерҙең бер өлөшөн дошмандан (татар-монгол яуы килә ята бит инде) һаҡлауҙы үҙ өҫтөнә алыу шарты менән ҡыпсаҡтарҙы индергәндәрҙер, моғайын. Шул килешеүҙә Һайылмыш, Ҡурғаҙы буйҙарының артабан да Бөрйән ере булып һаҡланасағы ла әйтелгәндер. Сөнки бөрйәндәр Яҡут, Таймаҫ, Ялсыҡай ауылдарын ойошторғанда ҡыпсаҡтар ҙа, юрматылар ҙа, табындар ҙа һүҙ ҡуптармай бит. Юҡһа, һүҙ генә түгел, оло ғауға булыр ине: ер ул! Моғайын, шулайҙыр. Сөнки ҡасандыр яһалған килешеүҙә билдәләнгән ергә аҫаба хоҡуғы, кеше ҡайҙа ғына йөрөһә лә, юғалмай, һаҡлана. Башҡорт тарихынан былдай миҫалдар бик күп. Әйтергә кәрәк, ер хужаһы үҙ ерен һатҡан хәлдә аҫабалыҡҡа кире дәғүә итә алмаған. Ерен ситтәргә биргәндән һуң үҙ аулында ла ул ерһеҙ килмешәк һаналған, ерле кешеләргә хеҙмәткә ялланған. Аҫабалыҡ хоҡуғының бер ваҡытта ла (һатыуҙан тыш) юғалмауын Рәсәй хөкүмәте лә һәр саҡ таныған һәм ул ергә теймәгән.

1917 йылдан һуң Башҡортотсан төҙөлгәс, аҫабалыҡ дауам итһә лә, ҡыҙылдар яғына сыҡҡас, йөҙәр йылдар буйы килгән хоҡуҡ та юҡҡа сығарыла, ер ҙә таратыла. Хәҙер ана бер кемгә лә кәрәге юҡ уның. Кем етте шул ағасын киҫә, һыуын бысрата, вәхшиҙәрсә байлығын талай. Хужа булмаһа, сусҡа өй башын һөрә, тиҙәр. Шуның һымаҡ әле ергә мөнәсәбәт. Башҡорттар элекке аҫабалығын дауламай, бүтәндәргә бөгөнгө ер уңышы ғына кәрәк, башҡаһын уйламай.

## Бәләкәй Сәғит

Илленсе йылдарҙа тыуғандар, һис шикһеҙ, һуғыш осоро балаларынан бәхетлерәк була. Сөнки быларға аслыҡ бәләкмәй, кейем юҡлыҡтан ҡыш көнө тышҡа сыға алмай ултырмайҙар. Ил халҡы икмәккә туйына, бүтән ризыҡ та күбәйә.

Кәүҙәгә һонтор булып күтәрелеп килгән Сәғит беренсе класҡа уҡырға барырға сыға. Ишек алдында торған атаһы башынан һыйпап:

— Яҡшы уҡы,— тип фатихаһын бирә. Шундағы эскәмйәгә терәлгән Сәләхитдин бабаһы:

— Бик яҡшы уҡырға, һынатмаҫҡа тейешһең һин, Сәғит. Олатайың Фәхрислам һеҙ уҡыһын, яҡшы йәшәһен тип ғүмерен бирҙе. Исмәғилевтәргә тап төшөрмә,— тип оҙатып ҡала.

Бабаһы әйткәндәрҙең мәғәнәһен шунда уҡ төшөнөп тә бөтмәй әле ул. Үҫә килә шул һүҙҙе иҫенә төшөрөп уйлаған һайын тәрән мәғәнәһен нығыраҡ аңлай. Исмәғилев булыу шул нәҫел-арала тыуыу ғына түгел, быныӊ өсөн бөтмәҫ-төкәнмәҫ көс менән эш арбаһын алһыҙ-ялһыҙ тартырға кәрәк икән.

Сәғит мәктәптә яҡшы уҡый, бигерәк тә арифметиканы, тора-бара — алгебра менән геометрияны ярата. Таймаҫта алтынсыны тамамлағас, ике туған Мәйсәрә апаһы: "Өфөгә алып китәм. Кеше булырһың",— ти.

Кеше булыу беҙҙең халыҡта, беренсе сиратта, яҡшы белем алыу тип һанала. Ғалимлыҡ көсәйгән заманда беләк көсө ме-

нән генә эш ҡырып булмай. Хәҙер ауылда ла, ҡалала ла һәр кем балаһына юғары белем биреүҙе үҙ бурысы тип һанай. Был дөрөҫ тә. Ә ынтылыштың башы тап илленсе йылдарҙың аҙағына, алтмышынсының башына тура килә. Һуғыш ваҡытында, һуғыштан һуң етем ҡалған балаларҙы йыйып уҡыта башлайҙар. Шуларҙың араһына беҙҙең балалар ҙа эләгә. Икенсе тулҡын интернаттар асыу осоро булды. Һуғыш балалары уҡып бөтөп, үҙҙәре белем биреүҙең башына күтәрелгәйне инде. Интернаттар асыуҙы һәм ҙур ғаиләләрҙең балаларын дәүләт иҫәбенә тәрбиәләү һәм уҡытыуҙы былар үҙҙәре ойоштора ине. Ул заманда күп балалы ғаиләләр ауылдарҙа йәшәгән башҡорттар ине нигеҙҙә. Шуға интернаттарҙа ла улар уҡыны.

Мәйсәрә Исмәғилева ауылдарҙан килгән беренсе быуын вәкиле булды. Ул балалар йортонда йә интернатта булманы, ә урта мәктәпте Таймаҫта бөттө. Артабан Стәрлетамаҡтың уҡытыусылар, һуңғараҡ педагогия институтында белем ала һәм кире Таймаҫҡа ҡайтып мәктәптә математика уҡыта. Тырыш, өлгөр, үткер уҡытыусыны ҙурыраҡ урынға эшкә өндәйҙәр һәм ул Өфөләге беренсе башҡорт интернат-мәктәбенә килә лә 25 йыл балалар тәрбиәләй. Күп, бик күп эшләй ул төрлө ерҙән килгән башҡорт балалары төплө белем алһын, тормош диңгеҙендә батмау ғына түгел, ҙур караптарҙың капитандары булһын өсөн. Мәйсәрә Әхтәмова (Исмәғилева) йәй каникул осоронда Таймаҫҡа ҡайтҡан һайын бер нисә кешене Өфөгә уҡырға алып китә тора. Шуларҙың береһе Сәғит ине.

Мәйсәрә Сәғитте Өфөгә барырға димләй башлағас, Фәтҡлислам ҡаршы төшә.

— Миңә ярҙамсы кәрәк. Малайҙы үҙемә терәк, киләсәктә өйҙә хужа булһын тип үҫтерәм бит.

Ағаһы Сәләхитдин, Мәйсәрәнең атаһы, ҡырҡа ҡаршы төшә:

— Үҙең уҡыманың. ФЗУ-ны бөткәс, Ырымбурға Каруанһарайға уҡырға алалар ине бит һине. Юҡ, ауылдан китмәйем тигән булдың. Хәҙер балаң бәхетенә аяҡ салмаҡ булып ултыраһың,— тип орошоп ала. — Ебәр, Сәғитте. Бир фатихаңды.

Шулайтып Сәғит Исмәғилев Өфөлә республика башҡорт интернат-мәктәбенең VII класс уҡыусыһы булып китә. Төрлө яҡтан килгәйне бындағы уҡыусылар. Бөтәһе лә тиерлек артабан билдәле кеше булып үҫтеләр. Сәғиттең класында буласаҡ матбуғат министры урынбаҫары Фәнил Ҡоҙаҡаев, Көнсығыш университет уҡытыусыһы Зилә Сыртланова, врач Рәсимә Мырҙабаева, уҡытыусы Вәлиә Бәҙретдинова һәм башҡалар белем алды.

Ят ерҙә өйрәнмәгән кешеләр араһында тәүҙә ҡыйыныраҡ ине Сәғиткә, Көйөргәҙе буйын, ауылын һағынып бер булды. Әммә оҙаҡламай өйрәнде. Мәйсәрә апаһы уҡытҡан математика, физика, һуңғараҡ химия уны үҙенә “йотто”. Шул фәндәрҙе ул бик яратты һәм яҡшы уңыштарға өлгәште. Мәктәпте тамамлаған саҡта аттестат менән ҡуша Почет грамотаһы тапшырылды. Тап ана шул фәндәрҙән өлгәшкән бейеклектәрҙе күрһәтә ине был бүләк.

## Хәтирәләр

Таймаҫта һәм Өфөләге интернат-мәктәптә уҙған балалыҡ хәтирәләре әлдән-әле иҫенә төшөп тора. Быға сәбәбе лә сыға. Әле бер, әле икенсе класташ осрай һәм күрешеү, фекерләшеү йыш ҡына шул замандарға бороп ҡайтара. Ул саҡтағы һәм хәҙерге мәктәп уҡытыусылары тураһында уйлана Сәғит Исмәғилев. Бөгөнгөнө хурларға теләмәй ул. Әммә илле йыл самаһы элек булған педагогтар менән бөгөнгөләре араһында айырма байтаҡ. Алтмышынсы йылдар мәктәптәренең уҡытыусылары, үҙҙәре һуғыш касафаттарын баштарынан кискәнгәме икән, һәр баланың тормошо менән ҡыҙыҡһыныр, ни уйлағанын тын алышынан тойор ине. Белем биреү менән ҡуша улар тәрбиә тураһында ныҡ ҡайғыртты. Мәктәпте бөткәс теге-был баланың кем буласағын белеп тора ине улар. Өфөләге интернат-мәктәп директорҙары Аслаев, Яубаҫаров көн дә, төн дә ба-

лалар араһында була торғайны. Өфөнән йөҙәр саҡрымда ятҡан ғаилә хәлдәренә ҡәҙәр ҡыҙыҡһына, белә ине мәктәп уҡытыусылары. Мәйсәрә Әхтәмова мәктәптә күп дәрес биреүенең өҫтөнә математика уҡытыусыларының методик берләшмәһен алып бара, мәктәптә партия ойошмаһы сәркәтибе, өлкә комитет ағзаһы, профсоюз өлкә комитетында ла эшләй, хатта журнал сығарышырға ла ваҡыт таба. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, һәр баланың нисек йәшәгәнен белә, уҡыуын яҡшыртыу юлдарын таба.

Хәҙерге уҡытыусылар ҙы яманларға уйлағандан түгел, аптырағандан әйтә инде Сәғит. Уҡытыусы мәктәпкә килеп дәрес бирә, үҙ фәнен нисек үҙләштергәндәрен һорай ҙа бынан әҙ һыуындырыу яйын ғына самалап тора. Ҡайһы бер уҡытыусы ярты йыл буйы кластағы балаларҙың исемен дә белеп бөтмәй, тиҙәр. Сөнки баланан ярты йылға бер дәресте һорай, бүтәнсәгә уның ваҡыты етмәй. Былдай хәлде уҡытыусыларҙың дәрестәре ифрат күп булыуы, аҡса эшләр өсөн бер нисә мәктәпкә йүгереүе менән аңлаталар. Был аңлатманан балаға ни фәтеүә? Мәктәпте бөтөп кем булып сыға инде ул?

Хәҙерге мәктәптәрҙә дәрес мәнфәғәттәренә тигән булып туҡтауһыҙ аҡса йыйыуҙы бөтөнләй аңламайым, ти Сәғит. Ә аҡса өсөн яҡшыраҡ билдә ҡуйған уҡытыусының шул һумдарҙы алған һайын ҡулын һындырыр инем, ти. Тормоштоң ауырлығы, эш хаҡының түбәнлеге тураһында һөйләйҙәр ошо хаҡта һүҙ сыҡһа. Ниндәй генә шартта ла уҡытыусы намыҫын аҡсаға алмаштырырға тейеш түгел. Ул бит дәрес кенә бирмәй, ә киләсәкте тәрбиәләй. Ришүәт алған уҡытыусы ришүәтселәр үҫтермәй бүтән кемде тәрбиәләй алһын. Намыҫ тураһындағы уның һүҙҙәре балаларҙа мыҫҡыл ғына уята бит. Улар ҡайһы уҡытыусының ришүәт алғанын ғына түгел, күпме алғанын да белә.

Совет дәүерендә лә, һуңғы ваҡытта ла мәғарифта ныҡ үҙгәртеп ҡороу кәрәк, тиҙәр. Кәрәк тип тәкрарлауҙан уҙып берәр нәмә эшләрҙәрме икән һуң?

## Институт һәм әрме

Бер төрөк менән һөйләшергә тура килгәйне Сәғиткә.

— Һеҙҙән осаҡтар ҡайһы тарафтарға бара?— тип һораны был.

— Нимә тинең?

— Осаҡтарҙы һорайым.

— Нимә ул осаҡ?

Төрөк, ҡулдарын йәйеп, вж-ж-ж тип күрһәтте.

— Ә-ә, самолетмы?

Шул саҡта уйлағайны ул шул һүҙ, дөрөҫөрәге, атама тураһында. Төрөктәр уны "осаҡ" тигән дә ҡуйған. Йәғни үҙе оса. Урыҫтар "самолет" ти. Шул осаҡ мәғәнәһендә инде. Инглиздар "аэроплан" тигәндәр. "Аэро" — һауа, "плайн" — һауала ҡанат ҡаҡмай ғына осоу. Ә башҡорттар ниңә "осаҡ" йә "осҡос" тимәне икән. Мәғәнәһе шул уҡ, тик башҡортса. Ул саҡта Сәғит уҡыған институт факультетын "осҡос моторҙары" тип әйтеп булыр ине. Юҡһа баяғы самолет тигән һымаҡ урыҫса ла, башҡортса ла "авиация двигателдәре" тип йөрөгән булдылар.

Ошо һөнәрҙе алыр өсөн Өфө авиация институтына Сәғит мәктәпте бөткән йылды уҡ инде. "Математикаға шәпһең, техник һөнәр ал,— тине уға Мәйсәрә апаһы. — Юҡһа ул өлкәлә башҡорттар юҡ кимәлдә, күбеһе филология, уҙа барһа тарих ти ҙә китә". Институтҡа инеү ҙә, тәүге йыл уҡыу ҙа ауыр булманы уға. Тик интектергәне аҡса етмәү ине. Интернатта яҡшы ине: уҡыталар, кейендерәләр, ашаталар, йоҡлаталар. Бында ни ятаҡта ҡоро карауат бирҙеләр ҙә, аллаһы әкбәр, ҡалғанын үҙең ҡайғырт. Стипендия түләүен түләйҙәр, әммә бик аҙ шул.

Сәғит беренсе курста уҡ бүтән егеттәр менән ҡуша вагон, теплоход бушатырға йөрөнө. Шунан Фанера комбинатында һәйбәт түләйҙәр тигәнде ишетеп, шунда бүрәнә тәгәрләтергә бара башланы. Ысынлап та аҡса яҡшы төшә ине бында. Сәғит өҫ-башын йүнәтте, ашауы яҡшырҙы.

Аҡсаның бер үҙенсәлеге бар. Ул күбәйгән һайын уны тағы ла арттырғы килә. Сәғиткә лә уй килде, аслы-туҡлы булып

көндөҙ уҡып йөрөгәнсе, киске факультетҡа күсеп, эшләп уҡыһам, уңайлыраҡ була түгелме һуң? Уҡыуы ҡыйын түгел, мин уны киске лекцияларҙы тыңлаһам да үҙләштерә алам. Тәүәккәлләгән — таш ярған, тигән һымаҡ, 1972 йылда ул киске факультетҡа күсте һәм Өфө фанера комбинатына сеймал бирҗаһына эшкә төштө, предприятиеның дөйөм ятағында йәшәй башланы. Ауыр ине эш, әммә буйсан, беләктәренда көс етәрлек егеткә ҡыйын тойолманы. Уҡыу менән эш ҡуша барҙы.

1973 йыл тыуҙы. Һәүетемсә генә донъя көткән Сәғиткә уйламаған яҡтан яңылыҡ килде. Уны хәрби комиссариатҡа саҡырҙылар.

— Институттың киске бүлегендә уҡыусылар әрме хеҙмәтенә алынырға тейеш. Был бурысты үтәүҙән тик көндөҙгө бүлектә уҡыусы һәм хәрби кафедрала шөғөлләнеүсе студенттарға ғына кисектереү ҡаралған. Әйҙә, хеҙмәткә.

— Бәлки институтты бөткәнсе көтөп торорһоғоҙ, өсөнсө курстамын бит инде.

— Юҡ инде, егет, илгә һалдаттар кәрәк, һинең тағы ла өс йылыңды көтә алмайбыҙ.

— Булмаһа, ни хәл итәһең, барырмын.

— Эйе дөрөҫ. Ир-егет хәрби бурысын үтәргә тейеш.

Төрөкмәнстанға эләкте ул. Ҡояшта янып-көйрәп ҡатҡан тупраҡ һәм елдә осоп йөрөгән ҡом. Марттан ноябргә тиклем ҡыҙҙыра. Эҫегә өйрәнмәгән Урал кешеһенә тәүҙә бик ауыр булды. Ҡаҙармалағы йортттар йә анда-һанда үҫкән ағас күләгәһендә түҙерлек тә бит, ләкин һине күләгәлә кем ултырта. Тәүге өс ай һалдат бутҡаһын ашарға өйрәнгәндә бигерәк ныҡ йонсоттолар. Төн дә, көн дә тиерлек һәр төрлө күнекмәләр менән хәлде алдылар. Гимнастерка менән салбар тир һеңеүҙән ап-аҡ булды — сепрәккә тоҙ ҡатты. Гимнастеркаларҙы һөйәп ҡуйһаң, йығылмаҫ рәүешкә инде. Эҫегә түҙә алмаған ҡайһы берәү эс ауырыуына һабышты, икенселәре ҡап-ҡара булып көйөп, ябыҡты. Тәүге өс айҙың үткәнен түҙемһеҙлек менән көттөләр, өйрәнсек ваҡыты уҙһа, икенсе частарға ысын хеҙмәткә күскәс, еңелерәк буласаҡ. Өс ай үтте, әммә уларҙы

таратманылар, дүрт, биш ай тулып китте, алтынсыһын башланылар. Көн дә тиерлек Иран менән сиккә снаряд бушатырға йөрөнөләр. Бер көн әйтеп ҡуйҙылар: “Ғәрәптәр менән Израиль йәһүдтәре араһында бик ҡаты бәрелеш көтөлә, был эшкә АҠШ ҡыҫылған. Моғайын, һуғыш булыр. Ҡоралға йәбешһәләр, һеҙ әҙер тороғоҙ, Иранға инәсәкһегеҙ”. Ике ай үтте, өсәү тулды. Ҡуҙғалырға фарман төшмәне. Күрәһең, тегелдәрҙең араһы нисектер көйләнгән, ғәскәр индерелмәй. Өйрәнгес часть батальондары бүтән ергә таратыла башланы.

Кем ҡайҙа ебәреләсәк, комиссия хәл итә. Һәр һалдат комиссия алдына баҫҡас, уны энәһенән-ебенә тиклем тикшереп, шунан ҡарар сығаралар. Сәғиттең сираты етте. Комиссия агзаһы — врач, һаулыҡ мәғлүмәттәрен ҡарағас: “Исмәғилев, буйы оҙон булғанлыҡтан, танк частарында хеҙмәткә яраҡһыҙ”,— тине. Комиссия рәйесе подполковник: “Мин Исмәғилевты танкист итергә вәғәҙә биргәйнем, һүҙҙе тоторға кәрәк. Яҙығыҙ танк училищеһына”,— тип ебәрҙе врачтың һүҙенә ҡаршы сығып. Эйе, подполковник вәғәҙә иткәйне. Эҫегә һылтанып гимнастерка төймәләрен ҡаптырмаған өсөн: “Асыҡ һауала эҫе түгел ул, бына танкта, исмаһам, тамуҡ киҫәүе. Шуны күрһәтәм әле мин һиңә”,— тип янағайны, онотмаған бит.

Подполковник комиссия рәйесе булғас, Исмәғилевты яҡлап кем уның менән айҡашып торһон, ебәрҙеләр танкист итеп. Сәмәрҡандтағы танк училищеһына юлландырҙылар — йөрөтөүсе-инструктор итеп. Хеҙмәт итеп була ине, тик танкка инеп ултырыуы ғына бер бәлә. Ваҡ кәүҙәлеләр ни танк эсенә “йәлп” керә лә китә, ә Сәғиткә ҡырҡҡа бөкләнергә кәрәк. Хеҙмәттең аҙағына тиклем шулай булыр тип уйлағайны, әммә йәнә үҙгәреш сыҡты. Бер көн танкты училище курсантары өсөн дәрескә әҙерләп йөрөйҙәр ине, тауыш яңғыраны:

— Өлкән сержант Исмәғилев.

— Мин.

— Марш штаб начальнигына.

Йүгереп барһа, начальник янында зәңгәр погонлы бер майор ултыра.

— Полковник иптәш, һеҙҙең бойороҡ буйынса өлкән сержант Исмәғилев килеп етте.

— Бына майор...

Майор үҙе өндәште:

— Хеҙмәт нисек бара?

— Яҡшы.

— Исмәғилев, һинең тамамланмаған юғары белемең бармы?

— Эйе.

— Һине хәрби прокуратураға хеҙмәткә алыр китәбеҙ. Нисек ҡарайһың?

— Илгә шулай кәрәк икән, мин риза.

Ошондай пафос менән яуаплағанға күрәлер инде майор күтәрелеп ҡараны ла өндәшмәне. Ә Сәғит төймә арҡаһында бер аҡыл алғайны бит инде, шуға үҙен тик устав ҡушҡанса ғына тоторға булғайны.

Кушка ҡалаһына алып киттеләр. Хәрби прокуратураның махсус тикшереү төркөмө шунда урынлашҡайны. Бында хәрбиҙәр күп ине. V гвардия танк дивизияһы ошонда. Әйткәндәй, бер осор данлыҡлы башҡорт генералы, Советтар Союзы Геройы Таһир Кусимов уның командиры була. Күп кенә йыл үткәс, шул уҡ вазифаны икенсе башҡорт Ейәнсура районынан Хөсәйен Хөсәйенов башҡара.

Училищела ни эшләргә, нисек йәшәргә икәнен белә ине Сәғит. Ә прокуратура ни менән шөғөлләнә, һалдаттар унда ни өсөн кәрәк, Сәғиттең хеҙмәте ни буласаҡ... Һорау өҫтәнә һорау. Әммә бөтәһе лә аҡрынлап төҫмөрләнде, асыҡланды. Яңы кейем алды Сәғит, хәҙер ул зәңгәр погон өҫтөнә өлкән сержант билдәһен таға, вазифаһы — бик эре урлауҙар буйынса тәфтишселәр төркөмөндә тәүтикшереүсе. Икенсе төрлө әйткәндә, тәфтишселәргә ниндәй ярҙам кәрәк, шуны үтәү, ҡағыҙ эштәрен башҡарыу. Бер мәл уны Мары ҡалаһына ебәрҙеләр. Хәрби часҡа барып, урлауҙа ғәйепләнгән Витко тигән офицерҙы прокуратураға килтерергә, тинеләр. Витконың танкысыларға тейеш тире тундарҙы һатҡаны асыҡланған. Ҡушылған ергә барҙы Сәғит, Виткоры эҙләп тапты, тегене ҡулға алыу тураһында

белдерҙе. Ҡарышманы Витко. Киттеләр вокзалға. Әммә поезд тиҙ генә булмаясаҡ икән. Ни хәл итәһең, көтөргә кәрәк. Эҫе.

Витко:

— Әйҙә һыра эсәбеҙ, ҡурып алып бара,— тине.

Сәғит быға һынамсыл ҡарап торҙо, бил ҡайышына тағылған пистолетты һәрмәп ҡуйҙы. Витко быны күрмәмеш булды, керпек тә ҡаҡмай Сәғиткә һораулы ҡарашын төбәне.

— Ярар,— тип ҡул һелтәне Сәғит.

Берәр көрөшкә эстеләр, икешәр. Күләгәлә кинәнеп ултырҙылар, шешлек тә алдылар. Һыра янына араҡы ла ҡушылды, тел сиселде... Бер заман Сәғит һиҫкәнеп уянып китте. Ҡайҙа ятам һуң мин? Поезд тыҡылдай, ә ул купе өҫтәленә башын һалған. Иң алдан өҫтөн ҡапшаны ҡулдары менән. Пистолет ҡайҙа икән, тип. Өҫтөндә гимнастерка юҡ. Ян-яғына ҡаранды. Эргәгә сисеп һалған икән, бил ҡайышы ла шунда, пистолеттың күн һауыты ла бар. Тик унда ҡорал юҡ. Ах! Ҡото ботона китте тигән хәлгә төштө Сәғит. Гимнастерканы йәнә ҡапшаһа, ҡулы ҡаты нәмәгә тейҙе. Пистолет кеүек. Яҡшылабыраҡ ҡараны. Әйе, пистолетты гимнастерканың эске кеҫәһенә һалырға башы еткән икән. Инде икенсе һорау тыуҙы: Витко ҡайҙа? Алан-йолан итһә, күҙе өҫкө һәндрәлә ятҡан берәүгә төштө. Шул икән. Уф-ф. Ярар был юлы Аллаһ үҙе һаҡлаған, бүтәнәсә былайтып эсеп йөрөү бөттө һиңә Сәғит, тип үҙен-үҙе һүкте.

Витконы имен-аман прокуратураға килтереп тапшырҙы. Иртәгәнән ял — ике көн — шәмбе һәм йәкшәмбе прокуратура ял итә. Унда хеҙмәтен башҡарған һалдаттарға ла ял. Улар ҡайҙа теләй — шунда иркен сығып йөрөй ала. Погондары зәңгәр булғас, ҡалалағы хәрби патруль да быларға бәйләнеп бармай. Үтә тәртип боҙоп йөрөмә, ҡалғаны рөхсәт. Шуға Сәғит ике ялға өҫтәп бер көн һораны ла Үзбәкстанда торған Һәҙиә менән Мәрйәм апаларына барып килергә булды. Улар бәхет эҙләп, Үзбәкстанға сығып киткәйне. Ул саҡта ошо рәүешле юлланыусылар күп ине бит. Хәҙер генә киреһенсә, Үзбәкстандағылар ҡайтып бөттө. Ул ғына ла аҙ, табыш эҙләп әллә күпме үзбәк йыл һайын Башҡортостанға килә.

Ялдан һуң әйләнеп килһә, Витко тураһында тағы бер әкәмәт һөйләйҙәр. Дүшәмбе хәрби трибуналдан прокуратураға шылтыратҡандар. “Виткоға ҡағылышлы документтарҙы бында ебәрегеҙ”. “Ярар”. Документ оҙатыусы алан-йолан иткән, әммә ҡағыҙҙарҙы алып барырҙай кеше күренмәй. Үҙе китә алмай, эше күп. Шул саҡ эргәләге изоляторҙа көн үткәрә алмай яфаланып ултырған Виткоға күҙе төшә.

— Витко!

— Әү.

— Бер ярҙам күрһәт әле.

— Кинәнеп.

— Эргәлә генә, күп булһа 500 метрҙа хәрби трибунал бар. Бына ошо тоҡто,— теге кеше документтарҙы йәшел брезент тоҡҡа тултыра, ҡурғашҡа мөһөр ҡуя,— шунда илтеп бир.

— Кемгә?

— Ишек төбөндәге һаҡсынан һорарһың, әйтер.

— Ярар.

Витко сығып китә. Байтаҡтан һуң телефон шылтырай.

— Ебәрҙегеҙме документтарҙы?

— Эйе.

— Ярар.

Тағы бер нисә сәғәт самаһы уҙа, йәнә шылтыраталар.

— Ҡайҙа документтар?

— Алып киттеләр.

— Кем?

— Витко.

— Һеҙ нимә? Башығыҙға тай типкәнме, уғрыға унның тураһындағы документтарҙы биреп ебәрәһегеҙ. Өҫтәүенә төп нөхсәләр. Юҡ итһә, ҡайһылайтып яңынан йүнәтерһегеҙ икән!

Прокуратурала кем бар — бөтәһе лә Витконы эҙләргә ташлана. Ҡаланың һәр мөйөшөн ҡарап бөтәләр, Марыға шылтыраталар, юҡ Витко. Кискә табан телефон йәнә шылтырай:

— Килтерҙеләр документтарҙы.

— Кем?

— Витко!

Оҙаҡламай Витко үҙе лә прокуратураға килеп инә.

— Ҡайҙа йөрөнөң һин?

— Күрше сәйханала һыра эсеп ултырҙым.

Ҡаланың аҫтын-өҫкә әйләндереп эҙләгәндәр быны, тик сәйханаға күҙ һалыу берәүҙең дә башына килмәгән.

## Уйҙар

Ошо ваҡиғаны иҫенә төшөрөп бер көлә, бер әсенә Сәғит. Витко иҫәр, йә бер ҡатлы булған өсөн Сәғиттән ҡасмайынса, документтарҙы яҡмайынса йөрөмәгән бит инде. Юҡ, иҫәр түгел ул. Бик аҡыллы һәм киләсәкте бик теүәл күҙ аллаусы кеше. Ҡасыуҙың файҙаһыҙ икәнен яҡшы белә бит ул. Ҡасып ҡайҙа бараһың, СССР ҙур булһа ла хоҡуҡ органдарының ҡулы барыбер етәсәк, ҡасан да барыбер тоталар. Ул саҡта яза күпкә ҡаты буласаҡ. Документ менән дә шул уҡ хәл. Уларҙы юҡ иттең дә, ти, әммә ҡыйын булһа ла аяҡҡа баҫтырасаҡтар бит уларҙы. Асыуы ҡабарған прокуратура хеҙмәткәрҙәре Витконың башын төрмәлә серетерлек әмәлен күрәсәк инде ул юлы.

Ә хәҙер... Бер ҡатлы, хатта саҡ ҡына һантыйыраҡ күренгән Витконы исем өсөн генә хөкөм иттеләр ҙә ҡотолдорҙолар. Ә уның ғәйебе кәмендә 10 йыл төрмә ине. Нисәмә мең тире тун һатҡан бит!

Шул уҡ ваҡытта каскаларҙы йыйып алмаған өсөн бер офицерҙы 10 йылға хөкөм иттеләр. Күнекмә алдынан хәрби составҡа тимер каскалар бирергә тигән бойороҡ килә. Келәттә 1200 каска була, шуны тараталар. Келәт мөдире баяғы офицерға бер ниндәй документһыҙ каскаларҙы тейәтеп ебәрә. Күнекмәләр уҙа, каскаларҙың кәрәге ҡалмай, әммә уларҙы кире йыйып алыу хәстәрен дә күреүсе булмай. Келәтте тикшерергә ревизия килә, шунда ғына каскаларҙың юҡлығы асыҡлана. Келәт мөдире батальондарға йүгерә: йыяйыҡ каскаларҙы. Ҡайҙан йыяһың ти инде. Хеҙмәтен тултырыусыларҙан кемдер ҡыҙыҡ өсөн өйөнә алып ҡайтҡан, күбеһе күнекмә яла-

нында ташланған, сүплеккә ырғытҡан. Ундағы эҫеләә каска тотоп йөрөһөндәрме ни? Күп тигәндә өс йөҙләп каска табып килтерә келәт мөдире. Трибунал язаға тарттырҙы: дәүләт милкен пыран-заран иткән өсөн 10 йылға иркенән мәхрүм итергә һәм офицер дәрәжәһенән төшөрөргә.

Шулай булыу ихтималын белеп торған шул Витко!

## Вәлиевтың эш урыны

Армиянан ҡайтҡас, тәүҙә атай-әсәһе, туғандары янында булды Сәғит. Һағынышыу баҫылып, көндәлек тормошҡа күскәс, ҡыҙыҡһыныусылар артты:

— Артабан ни эшләргә уйлайһың?

— Әллә әле...— Сәғит асылманы. Сөнки үҙе лә аныҡ ҡына белмәй ине. Ауылда ҡалмаясаҡ, Өфөгә китәсәк,— быныһын үҙе өсөн хәл иткән. Әммә Өфө ҙур бит. Ҡайҙа барырға, кем булып эшләргә? Кире фанера комбинатында ағас тәгәрләткеһе килмәне. Уҡыуҙы дауам итергә кәрәк. Тимәк йәнә Авиация институтына бара. Киске бүлеккә уны ҡабат аласаҡтар. Быныһын закон ҡуша. Уҡыу урыны эштекенә яҡын булһа ине ул. Карл Маркс урамындағы Авиация институтына яҡын ниндәй эш бар? Юҡ та, шикелле. Аһ, институттың киске бүлеге Өфө мотор эшләү заводының үҙендә бар ҙа баһа! Заводҡа урынлашырға ла шунда уҡырға. Ятаҡтары ла шул тирәлә. Заводта эш хаҡы ла яҡшы тип ишеткәйне. Хәл ителде, шунда барам.

Сәғит Өфөгә килеү менән тәүҙә институтҡа барып документтарын тапшырҙы һәм ӨМЗ-ға ғариза яҙҙы. Кадрҙар бүлегендә әллә нәмәләр һорашып бөттөләр. Эшкә һис ҡағылышлы булмаҫ һымаҡ тойолған туған-тыумасаһын теҙеп яҙҙырҙылар, математика менән физиканан белемен дә самалап ҡаранылар. Шунан:

— Көт. Эшкә алыныу алынмауың тураһында хәбәр итербеҙ,— тинеләр.

Ярар, көтөрмөн. Әммә көндәр генә түгел, аҙналар үтте, яуап

юҡ. Бына ниһайәт хәбәр: “Кил, һин эшкә алынаһың”. Баҡһаң, заводтың махсус бүлеге уны әнәнән-ептән тикшергән икән. Ышаныслымы был кеше, юҡмы тиеп. Заводтың күп өлөшө үтә йәшерен режимда эшләй икән, шуға тикшерәләр. Туған-тыумасаны ла ҡалдырмағандар. Әлбиттә, быларҙы Сәғит һуңынан белде.

Ә ул саҡта тәғәйен цехҡа барып еткәнсе әллә нисә тикшереү үткәргәндәренә хайран булып барғайны. Эш ҡоралдары әҙерләү цехы ине был. Уның вазифаһы ла лейкалсы слесарь бит. Эш урынын күрһәттеләр. Уның буласаҡ оҫтаһы:

— Был урын бик ҡотло. Артабан ҙур кеше булып китеүселәр эшләне унда. Өфө ҡалаһының башҡарма комитеты рәйесе Әҙһәм Вәлиев хеҙмәт юлын ошо урында башлаған. Һиңә лә унан ҡалышмаҫҡа яҙһын. Барыһы ла үҙеңә һәм эшеңә бәйле буласаҡ,— тине.

Һуңынан ишеттерҙеләр: ысынлап та Өфөнөң бик билдәле кешеләре ошо заводта слесарь йә токарь булған икән. Ул саҡтағы завод директоры Ферин әлеге цехта слесарь, унан һуңғы директор Паращенко — токарь, ҡала советы башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары Хәсәнов токарь була ошонда.

Сәғит башкөлләй заводҡа бирелде. Сәғәт 7-лә тора, 8-ҙә заводта, 17-лә эш көнө бөтә, әммә айына 4 сәғәт өҫтәмә эш тигәне бар, уныһына ҡалаһың. Ҡоралдарҙы йыйып, тамаҡ туйҙырып алаһың да — институтҡа. Дәрестән төнгө 12-ләрҙә сығаһың. Ҡайтып йоҡлайһың да йәнә кисәгене өр-яңынан башлайһың. Айҙың дүртенсе шәмбеһе — Михаил шәмбеһе тип йөрөтөлә. Михаил завод директоры Фериндың исеме. Ул һуңғы шәмбене эш көнө тип иғлан иткән, шуға Михаил шәмбеһе.

Йыл ярым ваҡыт бер тында үтеп китте. Эш ҡоралдары яһау бик ныҡ теүәллек талап итә. Сәғитте быға заводтың өлкән, тәжрибәле оҫталары ғына түгел, Ленинградтан махсус килгән инженерҙар ҙа өйрәтте. Шул йыл ярым эсендә уны юғары квалификациялы слесарь итеп еткерҙеләр. Зирәк, отҡор, ҡулы килешеп торған, институтта иң яҡшы студенттарҙың береһе булып танылған егетте инженер-технолог итергә булдылар.

Ошо ҡарар тураһында хәҙер уйлай ҙа ул, шундағы кадрҙар менән эшләүселәрҙең күрә белеүсәнлегенә һоҡлана. Сәғит цехта иң ҙур оҫталыҡҡа өлгәшкәйне инде. Артабан да шунда ҡалһа, башҡаса үҫеш булмаҫ ине. Ана шуны күрә, баһалай белгән етәкселәр. Институтты бөтмәгән булһа ла инженер итеп ҡуялар.

Инженер-технолог заводтың төп һөнәр эйәләренең береһе. Самолет йә башҡа ҡорамал өсөн яһалған һәр деталь уларҙың ҡулы һәм аҡылы аша үтә. Конструкторҙан һуң эшкә инженер-технолог тотона. Ҡағыҙға һыҙылған деталде ул металға йә башҡа сеймалға әүерелдерә һәм ысын деталь итеп еткерә. Бының өсөн һыҙманы өйрәнә лә деталде эшләтеү технологияһын билдәләй: ниндәй металдан, нисә градуслы эҫелә иретелгән матдәнән күпме ҡойорға, ни тиклем ваҡыт һыуытырға, шунан эшкәртергә кемгә бирергә, ҡайһы станокта нисек ҡырырға йә шымартырға, ҡайҙа ниндәй тишек яһарға һ.б. һ. б. Тағы шуныһы бар: конструктор әҙерләгән һыҙма тик бер урында һәм бер данала ғына һаҡлана. Уны бирәү ҙә бер ҡайҙа ла алып сыға һәм күсермәһен яһай алмай. Инженер-технолог һыҙманы өйрәнгәндә уны хәтерендә ҡалдырырға һәм цехҡа барғас, үҙенә кәрәк технологияны барыһын да иҫкә төшөрөп эшләргә тейеш. Бер һыҙманы көнөнә 2 тапҡыр ҡарай алаһың, бүтән юҡ. Ә норма: көнөнә кәмендә 2 деталгә технология төҙөү. Шунан сығып инженерҙың хәтере нисек булырға тейешлекте күҙаллап була.

Хәтер тураһында һүҙ сыҡҡас, Сәғит Фәтҡлислам улына бер һорау ҡуйҙыҡ.

— Тик хәтергә генә ышанып хата китеп ҡуймаймы һуң?

— Булғылай. Дүрт аяҡлы ат та һөрөнә тигән һымаҡ, кеше лә хата ебәргеләй. Үҙем менән ундай хәл булманы һымаҡ, һәр хәлдә минең хатаны табып күрһәтмәнеләр. Сөнки саҡ ҡына шикләнһәм, һыҙманы яңынан ҡарай торғайным.

Бер мәл шундай ваҡиға булды. Беҙгә бер деталь эшләргә ҡушылды. Заводта элек сығарылған ул. Әммә технология һаҡланмай бит. Ҡайтанан яһаған һайын технологияһын өр-яңынан ҡораһың. Киттем һыҙманы ҡарарға. Һыҙмалар айырым урында бик ҡаты һаҡта һаҡлана. Ишек төбөнә еткәс,

ҡулдағы танытманы бирҙем. Мең булмаһа ла йөҙәрләгән ҡат ошонан үтәм бит инде, әммә танытмалағы фото менән мине күҙләнеләр, үҙҙәрендәге исемлектән мине таптылар, шунан бүтән төрлө танытма тоттороп, мин биргәнде алып ҡалып, индерҙеләр. Мин һыҙманы ҡарап, ятланым һәм сығып киттем. Цехҡа ҡайттым да технология төҙөргә ултырҙым, алға элек эшләнгән был деталде һалдым. Металды ҡойоусыларға задание яҙайым тиһәм, бер нәмәгә иғтибар иттем. Деталдең самолет двигателенә беркетелә торған тишеге икәү, ә мин яңы ғына ҡараған һыҙмала дүртәү ине. Үҙем яңылыш күргәнмендер тип конструктор бюроһына ҡабат киттем, һыҙманы яңынан ҡараным. Беркетеү тишеге дүртәү. Ошо турала баш технологҡа барып әйттем. Теге үҙе тикшереп ҡараны ла:

— Был деталде егерме йыл сығарабыҙ ике тишекле итеп, насар беркетелә тип бирәүҙең дә зарланғаны юҡ. Тимәк кәрәкле ауырлыҡты күтәрә. Шуға һин дүрт тишек уйма инде. Нисек булған — шулай ҡалһын.

Инженер-технолог яңылышҡан берҙән-бер хәл ошо булды.

— Сәғит Фәтҡлислам улы, һеҙ бик тәрән хәтер тураһында һүҙ алып бараһығыҙ. Үҙгеҙҙең хәтер ниндәй һуң?

— Ҡатмарлы һыҙманы ентекләп бер ҡарап сыҡҡандан һуң иҫтә ҡалдырам. Һандарға килгәндә, 20 урынлы һанды бер күреүҙә хәтергә һеңдерәм.

— Башығыҙҙа әйтәйек, мең телефон номеры һаҡланамы?

— Һанағаным юҡ, шул сама барҙыр. Күреп тораһығыҙ бит өҫтәлдә бер генә бит ҡағыҙ ҙа, мәғлүмәт китабы ла юҡ. Кәрәкһә, кешеләргә шылтыратам, телефон һанын эҙләп тормайым.

— Тимәк, киноларҙа ныҡ хәтерле кешеләр тураһында дөрөҫ күрһәтәләр?

— Эйе, дөрөҫлөк бар.

— Бындай хәтер тыумыштан биреләме, әллә?..

— Тыумыштан түгел, кешенең мейеһе зәғифләнмәгән булһа, күп күнекмәләрҙән һуң хәтере ныгына инде.

— Ә кешеләрҙең исеменә, йөҙөнә һеҙҙең хәтер нисек?

— Һандарҙыҡы кеүек түгел.

— Технология инженерлығына һеҙҙе кем өйрәтте?

— Бер генә кеше түгел, байтаҡ булды улар. Иң беренсе уҡытыусым тип йәһүд Москвинды һанайым. Тәүге күрешкәндә ул: “Токаргә деталь эшләргә заданиены нисек бирер инең?”— тип һораны. Мин: “Әйтәйек ошо валды яһарға тейеш,— тип күрһәттем. — Уның оҙонлоғон, бер осондағы диаметрын, икенсе осондағыһын әйтәм һәм ул эшләй”. “Дөрөҫ түгел,— ти был. — Технолог токаргә ниндәй кейем кейеүҙән башларға, һаҡлыҡ техникаһын ҡайһылай үтәргә, ниндәй эш ҡоралы файҙаланырға, уны ниндәй станокка, нисек ҡуйырға, шунан ниндәй металдан ҡойолған ҡайһы йыуанлыҡтағы ҡаралама алырға (ятҡан урынын күрһәтеп), станоктың ҡайһы урынына беркетергә, ниндәй үлсәү ҡоралы файҙаланырға, станоктың әйләнеше ниндәй тиҙлектә булырға, ҡырғысты ниндәй тиҙлектә һәм тәрәнлектә йөрөтөргә, бая һин әйткәнсә, валдың диаметрын күрһәтергә, күпме ваҡытта валды эшләргә, әҙер деталде нисек тикшерергә һәм һынарға, шунан ҡайҙа илтеп ҡуйырға — ошоларҙың бөтәһен дә яҙырға тейешһең”. “Һәр деталде эшләгәндәме?” “Әйе”. “Ләкин әле һеҙ әйткәндәрҙең күбеһе дөйөм талаптар бит. Уларҙы һәр токарь белә”. “Бәлки беләләр. Әммә технолог һәр заданиены ла эште белмәгән кешегә тапшырғандай аңлатырға бурыслы. Шул саҡта ғына хата китмәй һәм брак яһалмай”. Ошолай өйрәттеләр мине.

Сәғит ӨМЗ-да 4 йыл инженер-технолог булып эшләй. Заводтың аҡыл үҙәге тиҙәр ул хеҙмәт иткән урынды. Бар яңылыҡ та, алған үҫеш тә, йә булмаһа ғәйеп һәм артта ҡалыу ҙа ошонан башлана. Заводтың реактив самолеттар, йә һыу аҫты кәмәләре өсөн двигателдәр эшләү ошонда нигеҙләнә. Өфө моторҙары менән күккә иң шәп осҡан самолеттар күтәрелә икән, бында Сәғиттең дә хеҙмәте бар.

Инженер-технолог конструкторҙан һуң торған кеше. Конструктор самолетты йә уның моторын ҡағыҙҙа эшләһә, технолог уны металға, бүтән сеймалға әүерелдерә һәм осороп ебәрә. Ҡағыҙҙа ҡорамалдың нисек эшләре, ҡайһы ерен эшләберәк еткерергә, икенсе урынын үҙгәртергә икәнлеген ғәмәлдә инженерҙар күрә. Шуларҙы Исмәғилев та байтаҡ шымартты, көйләне.

4 йыл эсендә 350-нән ашыу уйлап табыу һәм рационализатор тәҡдим яһаны. Унан алынған файҙа бихисап ине. Бер генә миҫал. Әйтәйек, диаметры 100 миллиметрлыҡ тешле түңәрәк яһарға кәрәк. Тәүҙә ул махсус металдан ҡойола, шунан сыныҡтырыла, шунан станокта ҡырыла, шымартыла. Әммә кемдеңдер яңылышлығы менән түңәрәк 100 түгел, 99 миллиметр килеп сыҡҡан. Брак. Күпме хеҙмәт, ниндәй металл һәм башҡа сеймал әрәм. Түңәрәкте кире иретергә оҙаталар. Шул саҡта Сәғиттең башына уй килә: ошо тешле түңәрәк күпмелер ваҡыт самолетта эшләгәндән һуң 99 миллиметрға ҡала, сөнки металл ултыра. Түңәрәкте артабан файҙаланыр өсөн уның беркетмәһен ҡыҫалар һәм ул эшләй бирә. Заводтың әлеге брагын, йәғни 99 миллиметр түңәрәкте ана шул мәлдә тотонор өсөн авиаотрядҡа биреп булмаймы ни? Була. Сәғитең тәҡдиме бик күп файҙа килтерә заводҡа: йөҙәр меңләгән һум. Әлеге аҡса түгел бит, ул саҡта 1 доллар 94 тингә тороп ине.

1980-се йылдарҙың аҙағында осоусы өлкән лейтенант Величко иң яҡшы хәрби самолетты Японияға төшөрҙө һәм шунда уҡ уны американдар һырып алды. Бындай ҙур бүләкте Алланан ялбарып та ала алғандары юҡ ине. Американдар шунда уҡ самолеттың йөрәген — моторын өйрәнергә тотондо. Ер йөҙөндә иң шәп осҡан самолет ине бит. Мотор Өфөлә яһалғайны, Сәғит тә ҡатнашҡайны был эштә. Американдар үлсәмдәр һөҙөмтәһендә серҙе асты: ниндәй металдан, ниндәй технология файҙаланып эшләнә моторҙың төп деталдәре. Хәҙер ундайҙы Америка ла, Япония ла сығара ала ине. Өфөлә был моторҙы етештереүҙе туҡтатырға тура килде. Бер һыйыр бар көтөүҙе бысрата тиҙәр бит әле, ана шундай хәл булды был.

## P.S.

ӨМЗ-да (һуңғараҡ ул Өфө моторҙар эшләү берекмәһе тип үҙгәртелде) 4 йыл эшләү дәүерендә күп нәмәгә өйрәндем, тип һығымта яһаны үҙе өсөн Сәғит Исмәғилев. Иң мөһиме, эшкә өй-

рәндем. Үҙеңдең теләгең һәм һәләтең бар икән, иң ҡатмарлы һөнәргә лә күнегеп була. Отҡорлоҡ, зирәклек, әлбиттә, инженер-технолог өсөн кәрәк. Әммә был сифат кешеләрҙең бик күбендә бар һәм ул кешенең ниндәй милләттән булыуына ҡарамай. Был һығымтаға ул оҙаҡ уйланып йөрөгәндән һуң килгәйне. ӨМЗ-дың хәл иткес урындарҙа эшләгән инженер-техник хеҙмәткәрҙәренең һаны мең биш йөҙгә яҡынлай ине. Шуларҙың араһында башҡорттар ике кеше генә булды: Сәғит һәм Фазыл тигән ерәү. Башҡортостанда, уның башҡалаһы Өфөлә ниңә ошолай һуң? Әллә башҡорттар аҡылға зәғиф халыҡмы, тип аптырайым. Ҡайҙа йыр, бейеү, ҡурай тартыу, ер һеперeү — шунда башҡорт. Ҡайҙа ҡыйын һәм фәҡирлек: иген игеү, мал бағыу, урман ҡырҡыу — шунда башҡорт. Машиналар эшләүҙә, элемтә, электрика, юғары технологиялар өлкәһендә — юҡҡа тиң. Ни эшләп шулай һуң? Уйлай торғас, осона сыҡтым, шикелле. Башҡорт балаларын инженер, осоусы, һыу аҫты караптарын төҙөүсе булырға ерәү ҙә өйрәтмәй бит. Бала саҡтан әҙ генә моңло тауыш сығара белһә йә шиғырҙы матур һөйләһә, — артист булырһың; ике-өс һөйләмде бәйләп яҙа алһа, — филолог булырһың; математиканы яҡшыраҡ уҡыһа, — бухгалтер булырһың, әйтелгәндәрҙең береһе лә булмаһа, — көтөүсе булырһың, һыйыр ҡойроғон борорға ла кеше кәрәк тип нарыҡлайҙар. Бала сағынан уҡ түбән маҡсат ҡуйғас, кеше юғарыға ынтылмай, бары менән ҡәнәғәт булып тик йөрөй. Сәғиттәр уҡыған саҡта беренсе интернат-мәктәптә бәләкәй синыфтарҙан уҡ һөнәр йүнәлеше бирә һәм артист менән филолог ҡына түгел, инженер әҙерләү этәргесе яһала башланы. Авиация, нефть институттары менән килешеү төҙөлдө. Һөҙөмтәлә башҡорттар юғары технологиялар ҡулланылған өлкәләрҙә күренә башланы.

Әммә был мәктәп берҙән-бер булды. Ике миллионға яҡын кеше булған башҡорт өсөн бер мәктәп юҡҡа тиң. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, әле лә башҡорттар араһында юғары белемгә ынтылыш түбән көйө ҡала. Беренсе сиратта бында атай-әсәйҙәр ғәйепле. Баланың киләсәген улар билдәләй бит. Атанан күргән

— уҡ юнған, әсәнән күргән — тун бескән, тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр шул. Ә атай-әсәй үҙенең кимәленән сығып фекер йөрөтә. Сөнки ул бүтәнде белмәй. Шуларға ярҙамға килергә тейешле мәктәп, гәзит, журнал, телевидение, радио тәүлек әйләнәһенә бер үк нәмәне туҡылдай: йыр һәм бейеү, уҙа барһа әкиәт, хикәйәт һөйләү. Был рәүешле милләтте үҫтереү ҡыйын ул. Ил башында ултырыусылар әллә быны белмәй, әллә инде башҡорт артта ҡалһын тип юрый эшләй.

Кемдер берәү: йыр йырлап, тыпырлатып бейеп тә йәшәп була, тиер. Була. Ләкин матурмы икән ул тормош? Тормоштоң матурлығы күңелдең туҡтауһыҙ үҫеше — рухи үҫеше һәм матди тәьмин ителеүе менән үлсәнә. Бер үк төрлө йыр һәм бейеү күңел үҫешен ҡәнәғәтләндерә алмай һәм быны өсөн йүнле аҡса түләйәсәктәре юҡ. Яҡшы килем юғары технологиялар эшләнгән урында ул. Сөнки юғары технологиялар өр яңы машиналар, өр яңы ҡорал һәм ҡорамал сығара. Кем шуға эйә — шул бай. Матди етешлеккә ынтылыу үҙе үк рухи үҫеште тәьмин итә. Ярлы кеше тамаҡ туйҙырыу тураһында уйлай, күңел ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү тураһында түгел. Аласыҡ төҙөнөк, һарай һалдыҡ тип шапырынып, шуны әйләнеп уйнап-көлөп йөрөһәк, милләтте артта ҡалыуға дусар итәбеҙ.

## P.S.

Сәғитте хайран иткән тағы бер күренеш бар. ӨМЗ-да улар менән күрше генә майҙанда киң ҡулланыу тауарҙары сығара торғайнылар. Ер йөҙөндә иң һәйбәт самолеттарҙың “йөрәген” яһаған завод көрәк, һәнәк, ит турағыс менән бер рәттән “Москвич” автомашиналары өсөн мотор эшләне.

Күрше булғас, ҡайһы берҙә тегеләрҙең нисек эшләгәнен күргеләй инем. Тәүҙә үк двигателдә ҡуйған саҡта металл нисбәттәрен тотманылар, башҡа деталдәрҙе яһағанда микронлап үлсәп эшләйһе урынға миллиметрлы тайпылыу рөхсәт иттеләр... Шунан китте инде иҫ китерлек етешһеҙлектәр. Ул машиналарҙың һаман йөрөгәнлегенә аптырай торғайным. Ауыр

сүкеш һәм 24-се асҡыс менән яһайҙар бит моторҙы тип иҫ-аҡылыбыҙ китә ине. Үҙемдән оло технологтарҙан: “Ниңә беҙҙең технологияны файҙаланмайҙар икән? Бер үк завод бит,”— тип һорағайным. Тегеләр ни тиһен, яурындарын ғына һикертте.

Юғары технологияның ни икәнен белмәһәк тағы бер хәл, үҙеңдә була тороп үҙең өсөн сығарылған машинаны эшләүгә файҙаланма инде шуны! Үҙеңдән үҙең көләү түгелме ни был?

Әгәр “Москвич” моторын беҙ яһаған кеүек эшләһәләр, бөтә донъяла тиңһеҙ двигатель була ине бит. Ә хәҙер ана “Москвич” үҙе лә юҡ. Сит ил машиналары менән ярышты күтәрә аламы ни ул? Утын арбаһы менән көймәне сағыштырған кеүек була инде.

Ни тиклем этләтергә була инде үҙ халҡыңды, уйлаһаң, уйылып төшәһең тигән һымаҡ. ӨМЗ-дағылай юғары технология аҙ инеме ни беҙҙең илдә? Космик аппараттар яһайбыҙ бит, ә йүнле кер йыуыу машинаһы булманы. “Кеше — дәүләттең иң оло байлығы” тип ғорло йырттыҡ, кешене иң кәрәкмәгән йән эйәһе һымаҡ күрҙек. Кем шулай итте? Үҙебеҙҙе юғары технологияның иң яҡшы белгестәренең береһе тип танығам да, эшкинмәгән “Москвич”ты алыр өсөн күпме йылдар сиратта торорға кәрәк ине. Мин ӨМЗ-да 4 кенә йыл эшләнем. 4 йылда миңә сират етәме ни?

СССР-ҙа ныҡ үҫешкән социализм төҙөнөк, тип яр һалдыҡ. Тик социализмыбыҙ социаль түгел ине шул. Кеше өсөн түгел ине был йәмғиәт. Кешене ҡурҡытыр, бүтән илдәрҙе дер ҡалтыратыр өсөн барыһы ла эшләнде. Ҡытай ҙа тәүҙә шул рәүешле ине. Бахырҙарға өҫтөнә кейергә йылына бер кейем бирелә ине бит. Йыртылһа, йә туҙһа, яланғас йөрө. Дэн Сяопин власҡа килгәс, кешегә ҡарашты үҙгәртә алды. Ил иҡтисадын кеше мәнфәғәттәренә борҙолар. Беҙҙәге кеүек бәрхәтле революция ла кәрәкмәне, яңыса йәшәй башлар өсөн аслыҡ, хәйерселеккә төшөп йәнә күтәрелеп тә торманылар, бер юлы аҡрынлап, һынылыш яһамайынса үҫешәләр.

Таймаҫтан беҙҙең ҡан-ҡәрҙәштәр революциянан һуң, әҙәрлекләүҙән ҡасып, Ҡытайға сығып китә. Әле лә шунда йәшәй

улар — уйғырҙар араһында. Миңә ҡусты тейеш бераү мине эҙләп тапты. Утыҙы ла тулмаған. Өс телдә иркен һөйләшә, ҙур ғына бизнесы бар. Йортоғоҙҙо төҙөргә (илде әйтә инде) үҙегеҙҙең аҡылығыҙ етмәһә, ярҙамға беҙ килербеҙ. Тик ул саҡта байлығығыҙҙы бүлешергә тура киләсәк. Ҡытайҙар бит күп — миллиардтан ашыу кеше. Беҙгә бирһәгеҙ, үҙегеҙгә бирәр нәмә ҡалырмы икән һуң?

Дөрөҫ әйтә, үҙеңде үҙең хөрмәт итмәһәң, кем һинең менән хисаплашһын. Самолет моторы яһаған коллективҡа машина двигателе генә эшләү бер ни тормай ине бит. Шул эшләнһә, илдә үҙ-ара мөнәсәбәт тә, илдең ныҡлығы ла бүтән төрлө була ине. СССР-ҙың тарҡалыуын ошонда ла күрәм мин.

## Ингельзян тәҡдиме

4 йыл инженер-технолог булып эшләү дәүерендә Сәғит үҙе кеүек һөнәрмәндәр араһында иң абруйлы, иң белемле һәм яуаплы хеҙмәткәр булып танылды. Яңы деталдәр, яңы эш сыҡһа, уға ҡушалар ине. Исмәғилев фамилияһы ышаныслы тигән һүҙгә бәрәбәр була башланы. Егеттең бик тиҙ ошо бейеклеккә күтәрелә алыуын күреүселәр, был артабан үҫә алмаһа, төңөлөп ҡуйыр типтер инде: "Беҙҙең заводта һине үрләтерлек буш вазифа юҡ. Әллә Төмәнгә барып ҡарайһыңмы? Уларға баш технолог кәрәк,"— тинеләр. Тәүәкәлләне Сәғит. Еңел һөйәкле икәнен беләбеҙ бит инде. БыҒаса ла йәшәү, эшләү урындарын тиҙ генә алыштырғаны булды.

Төмән мотор эшләү заводының директоры Хуторьянский менән телефондан һөйләште. "Эйе, һеҙҙе бик маҡтайҙар Өфөлә, беҙгә тәҡдим дә итәләр. Килегеҙ. 500 һум эш хаҡы ҡуйырбыҙ, килгәс тә фатир бирербеҙ". Китте Төмәнгә егет. Өфөлә уны эшенән башҡа тағылып тотҡан бер нәмә лә юҡ. Институтты тамаланы, ғаилә ҡормаған, фатир алмаған...

Төмәнгә барғас, "Заря" ҡунаҡханаһына урынлашты ла заводҡа китте. Директорҙы табып күреште. Тегенеһе телефон-

дан әйткәнсә ҡуш ҡуллап ҡаршыланы. Эш хаҡының вәғәҙәләгәнсә буласағын әйтте. Әммә фатирҙың йәһәт кенә булырына ышандырманы. “Бер йыл эсендә,— тип ҡуйҙы. — Уғаса ҡунаҡханала тороп торорһоң. Хаҡының бер өлөшөн завод түләр,”— тип ышандырҙы.

Сәғиттең күңеле бер аҙ төштө. Ятаҡта йәшәп туйғайны инде ул. Ауылдан сығып киткәне бирле ятаҡ бит. Түмәнгә барырға ризалашыуының да бер сәбәбе ошо ине. Үҙаллы иркенләп йәшәгеһе килә ине. Ҡунаҡханаға ҡайтып карауатҡа һуҙылып ятып ошолар тураһында уйға сумғайны берәү килеп инде.

— Танышайыҡ,— тип ҡул һондо, — Ингельзян. Нефть, газ үткәргестәрҙә эшләйем.

— Мин әлегә эшһеҙ,— тип таныштырҙы үҙен Сәғит һәм бында ни эшләп йөрөүен һөйләп бирҙе.

Кеше шулай ҡоролған бит: ул ҡайһы берҙә, бигерәк тә ҡунаҡхана кеүек бер кемдеке лә булмаған урында ете-ят кешегә дуҫына ла һөйләмәҫ серен аса ла ҡуя. Сөнки уға фекере менән уртаҡлашыр, кемгә лә булһа хәлен һөйләр кәрәк. Ете-ят кеше уны тыңлаясаҡ та икенсе мәлендә барыһын да онотасаҡ.

Ингельзян (фамилияһынан күренеп тороуынса, әрмән) Сәғитте бүлдермәй тыңланы ла:

— Эш хаҡың 500 һум тиме? Фатир бер йыл эсендә тиме?— тип ҡабатлап һораны.

— Эйе.

— Ә һинең өс тапҡыр күберәк алғың, бер нисә көндән фатирлы булғың киләме?

— Нисек килмәһен?

— Ә һин үҙәктән ынтылыусы двигателдәрҙе көйләй беләһеңме?

— Уларҙы көйләү бер ни тормай.

— Ул сағында әйҙә беҙгә. Мең ярым һум эш хаҡы һәм фатир һиңә.

— Кем ул һеҙ?

— Сорғотта нефть һәм газ сығарыу идаралығына. Дөрөҫөрәге, идаралыҡ Мәскәүҙә, эше — Сорғотта.

— Мин риза.

— Риза булһаң, иртәгә юлға сығабыҙ.

— Хуторянскийға барып әйтәйем дә.

— Әйт.

Сәғит ТМЗ директорына керҙе, бында урынлашмаясағын әйтте. Сәбәбе — булыр-булмаҫ фатирҙы көткөһө килмәй. Хуторянский сат йәбеште ебәрмәйем тип. Тәүҙә өгөтләне, шунан әллә ниндәй янауҙар уйлап сығарҙы, әммә Сәғитте ыҡҡа килтерә алманы.

## Себер

Бер уйлаһаң, Төмән себер инде ул. Борон беҙҙең төркиҙәр шунда йәшәгән. Күсем хандарының Себер дәүләте ошо яҡты үҙ эсенә алған. Төмән ҡалаһы элек бер мең кешенән торған ғәскәрҙең торған урыны булған. Төмән бер мең тигәнде аңлата.

Сорғот иһә, Себерҙең төньяғындараҡ. Сәғитте махсус идаралыҡтың инженер-механигы итеп алдылар. Шунда уҡ фатир бирҙеләр. Уның ремонтсылар төркөмөндә кеше күп түгел ине, әммә һәр береһе юғары белемле, двигателдәрҙе биш бармағы һымаҡ белгән кешеләр. Сәғиттең төркөмө насос станцияларындағы турбиналарҙы көйләү ине. Станциялар күп ине. Трассала яҡынса йөҙ саҡрым һайын төп станция ултыра. Ул торба буйлап нефть ҡыуа. Торбала баҫым түбәнәйә төшкәс, бәләкәйерәк аралыҡ станцияһы уны тағы ла ҡыҫа һәм йәнә төп станцияға бирә. Шул рәүешле насостар нефтте этеп бара.

Беренсе турбинаны уның төркөмө Конда станцияһында көйләне. Сорғоттан Кондаға вертолет менән остолар. Осаҡ ултыра торған махсус майҙансыҡ бар икән, шунда төшөрҙөләр Сәғитте. Вертолет артабан осто, ул ҡалды әлеге майҙанда бер үҙе. Шул саҡ ҡысҡыра-ҡысҡыра, ҡулдарын болғай-болғай был яҡҡа килеүсегә иғтибар итте. Теге кеше:

— Һаумыһығыҙ, Сәғит Фәтҡлисламович. Бына һеҙгә итек,— тип оҙон ҡуңыслы итек ултыртты.

— Нимәгә ул?

— Кейегеҙ — кей, бында шунһыҙ йөрөп булмай.

Ботинкаларын итеккә алмаштырҙы ла Сәғит теге кеше артынан эйәрҙе. Баҡһаң, ул һаҙлыҡҡа төшкән икән. Вертолет майҙансығын ғына бетонлағандар, ә ҡалған дүрт тарафта һаҙлыҡ. 500-600 метрҙа урынлашҡан станцияға тубыҡтан һаҙ ярып барып еттеләр.

Кондала 4 турбинаны көйләргә кәрәк ине. Сәғит менән эшләүселәр ҙә, уны бында алыусылар ҙа ҡулынан килерме-юҡмы тип һынап баҡҡандарҙыр инде, күрәһең. 4 турбинаны ла билдәләгән ваҡыттан элек эшләтеп ебәргәс, тегеләрҙең түбәһе күккә тейҙе. Ниндәй һөнәр эйәһенең килгәнен яҡшы төшөндөләр. Берәү: “Тәүге ҡабыҙыуҙан беҙҙең бер генә турбина ла тейешенсә эшләп киткәне юҡ ине бығаса”,— тине күҙҙәре йылтырап. Өфө заводынан һуң был эш Сәғиткә уйын һымаҡ ҡына күренде. Ә хаҡы ысынлап та Ингельзян әйткәнсә булды. Беренсе эш хаҡын уға берәр һумлыҡ аҡса менән бирҙеләр. Ун ике ҡап берәр һумлыҡ. Шуларҙы тоттолап хайран булып ултырғайны Сәғит. Шул тиклем дә күп аҡса булыр икән тип. Студент ваҡытта, ауылда йәшәгәндә тинде ҡәҙерләп тота торғайнылар бит. Был тиклем аҡсаны ни эшләтмәк кәрәк? Себерҙә эшләүселәргә күп түләйҙәр ине шул. Төп эш хаҡынан тыш командировка сығымдары тип 120 һум бирәләр. Уныһы ашарға етә. Бүтән нимәгә тотнаһың? Дөрөҫ Сорғот магазиндарында Өфөлә төшөңә лә инмәҫ нәмәләр күп. Һәр төрлө тун, шәшке, ҡама, ҡара төлкө, бүтән төрлө кейек тиреһенән тегелгән бүректәр, унты, башҡа кейем, ризыҡтың ниндәйе генә юҡ! Өҫтәүенә барыһы ла арзан. Сәғит аҙыҡ-түлек магазинына беренсегә ингәндә фил төшөрөлгән һары ҡаплы сәйгә иғтибар итте. Алып ҡараһа, Өфөлә әсмухаланған! Ә Өфөлә табырһың бында сәйҙе. Мәләүеҙҙән килтерелгән һыйыр итен һатып алып ҡайтты ул бер ирмәк өсөн. Ит кеүек тиҙ боҙола торған ризыҡты әллә ни йөрөтмәне, ә һинд сәйен күп ташыны.

Шул саҡта тигеҙһеҙлеккә ғәжәпләнә торғайны Сәғит. Сорғотта йәшәп нефть сығарыуҙа, газ ҡыуыуҙа эшләгән кеше

Башҡортостандан бында йөрөп шул уҡ хеҙмәтте башҡарыусынан 3 тапҡырға кәмерәк ала торғайны. Ә ханттар (Сорғот тирәһе уларҙың тыуған иле бит ) газсылар, нефтселәр араһында бөтөнләй эшләмәне. Шуның ҡарауы һәр участканың 60-70 процент кешеһе башҡорт һәм татар булды. Сорғотто йә Өфөнөң, йә Ҡазандың филиалы тип йөрөтә торғайнылар. Бында йөрөүселәр аҡсаны һыҙырып алды. Тик барыһы ла уны кәрәгенсә файҙалана белмәне. Кемдәрҙер аҡсаны өйөнә алып ҡайта, мебель, машина ала ине, икенселәр эсеп бөттө. Сәғит иһә был яҡтан гонаһыҙ түгел ине. Мәскәү, Өфө ресторандарында байтаҡ аҡса ҡалдырып сыҡҡан саҡтары ла булды. Әммә шайтан ҡотҡоһона ныҡлап бирелмәне, Аллаһ һаҡланы. Эске менән булышһаң, турбиналарҙы төҙәтеп, көйләү артҡа күсер ине инде. Юҡ, быныһына Сәғит юл ҡуйманы. Шуға инженерҙар араһында кимәле юғары булды. Исмәғилев фамилияһын ишетеү бөтә ҡаршылыҡтарҙы юҡҡа сығара ла ҡуя торғайны. Теләһә ҡасан вертолет саҡыртып алыу хоҡуғын юҡҡа ғына бирмәйҙәр бит. Бик һирәк етәкселәр менән бер рәттән Сәғит ошо хеҙмәттән файҙаланды.

Бәлки вертолеттың кәрәге лә ҡалмаҫ ине, әгәр юлдар булһа. Ә Себерҙә йәй көндәре юл юҡ инде. Ҡыш көнө ер туң булғас, бар урында ла юл. Ә йәй туң ирей һәм тирә-яҡ һаҙлыҡҡа әүерелә. Ҡайһы берҙә ул тәрән упҡын хасил итә. Урай ҡалаһына барған юл өҙөгөндә һигеҙ ҡат ағас түшәк һалдылар, уныһы ла тотманы, өҫтөнә өс ҡат тимер-бетон плитә йәймәйенсә тороп, үтерлек булманы.

Ул һаҙлыҡтарҙа батып ҡалған ҡорамал, машина, тракторҙың иҫәбе-һаны юҡ. Ә тәбиғәткә килтерелгән зыянды кем һанаған тиһең. Берәү ҙә. Ханттар, мансылар көткән болан ашар мүкте тракторҙың иҙгеләүе — ҡот осорлоҡ ине. Ә бит бер тапалған мүк ҡабаттан үҫмәй. Шуның менән себер кешеләренең мал утлар ере юҡҡа сығарылды, төп кәсебе бөтөрөлөү сигенә еткерелде. Болан итен исрафлауҙы күрһәгеҙ, сәстәр үрә торолоҡ ине. Йөҙәр тонналап итте һаҫытып яндырҙылар. Шул уҡ ваҡытта Рәсәй ҡалаларының күбеһендә ашарға ит булманы. Ә

Себер халыҡтарын мыҫҡыллау аҡылға һыймаҫлыҡ ине бит. Йәшәр ярангаларын бөтөрөп, ҡалаларҙа фатир биргән булып, болан көтөүҙәрен юҡҡа сығарыу арҡаһында эшһеҙ ҡалған халыҡ эскегә һабышты. Бер ваҡытта ла алкоголде белмәгән организм был ағыуға тиҙ биреште һәм ҡырҡҡа ла етә алмайынса ҡырыла башланы. Ә төрлө анектодтар сығарып мыҫҡыл итеү һуң уларҙы. Меңәрләгән анектодттың геройы икәү генә ине бит: Чапаев һәм чукча.

Һуңғы йылдарҙа ул яҡта донъя үҙгәргән, ти. Техника ла һаҙлыҡта батып ятмай, бына тигән юл һалынған, Себер кешеләре үҙҙәре белгәнсә йәшәй һәм аҡрынлап араҡынан арына бара, тиҙәр. Бирһен хоҙай, шулай була күрһен. Ә теге ваҡытта, Себер нефте менән газын тәүләп сығара башлағанда шулай эшләп булмаймы инеме ни? Була ғына түгел, шулай кәрәк ине. Ә беҙҙең бушбоғаҙҙар: “Партияның фәләнсә съезына газ үткәргесте төҙөп бөтөргә!”— тип лаф орҙо һәм һис кәрәкмәгән шул маҡсатҡа өлгәшеү өсөн һанһыҙ аҡса түгелде, илдең уртаһынан эшенән, йортонан айырып йөҙәр мең кеше ебәрелде, иҫәпһеҙ ҡорамал, машина-трактор ташланды.

Социалистик илдең ҡыйралыу сәбәптәренең береһе хужаһыҙлыҡ булды.

## Үҙгәреү

1982 йылда КПСС-тың Генеральный секретары Брежневтың үлеме менән башланған матәм власҡа Горбачев килмәйенсә бөтмәне. Шул йылдар эсендә партия бюрократияһы сәскә атты. Ил хужаһы тип танылған яңы Генеральный секретарҙар үлем менән көрәшкән арала бүтәндәр донъяға идара итте, күбеһе үҙ мәнфәғәтен ҡайғыртты, контроль юҡлыҡтан файҙаланып, алан-йолан ҡарана-ҡарана ил байлығын үҙләштерә башланылар. Һуңынан, дәүләтте асыҡтан-асыҡ талау мөмкинлеге асылғас, тап ошо партократтар һәм комсомол органдарына яңыраҡ килеп аҡса тәмен татып өлгөргәндәр оли-

гарх булып китте лә инде. КПСС ҡолатылғас, элекке Үҙәк комитет, өлкә, ҡала, район, завод, фабрика, колхоз, совхоз комитеттары хеҙмәткәрҙәре майлы ҡалъя ҡайҙа ята — шунда ташланды. Өфөлә, мәҫәлән, элекке өлкә комитеттың беренсе секретарынан башлап инструкторына тиклем “Восток” банкыһына урынлашып алды. Бүтәндәр икмәккә һыу буйы сират торғанда, тин һанағанда былар миллионлаған һумды ҡул аҡсаһы рәүешендә йөрөттө.

Бүтән төрлө әйткәндә, ҡаҡшамаҫ тип һаналған социалистик системаның сереүе тап партия органдарында Брежнев осороноң аҙағында башланғайны. 1980-се йылдар уртаһында Себергә лә иғтибар кәмей төштө. Элек ай һайын тиерлек КПСС Үҙәк Комитетынан, СССР Министрҙар Советынан иң юғары түрәләр килеп, эш барышын ҡарап, пландарҙы ваҡытынан алда үтәр өсөн өҫтәмә аҡса, техника, бүтәнен биреп китә торһа, аҙаҡтаныраҡ түбән дәрәжәләге бюрократтар ҙа эҙ һыуындырҙы. Себер эше үҙ ағымына ҡуйылды, аҡса түләү кәмене, тәртип бөтөнләй ҡалманы. Шуларҙы күреп йөрөгән Сәғит Исмәғилев торған һайын Себерҙән төңөлә барҙы. Өфөләге Таңһылыу ҙа әлдән-әле үҙсебеҙгә ҡайтыу тураһында һүҙ ҡуҙғата башланы. Таңһылыу Сәғиттең буласаҡ ҡатыны. Йылайыр районының Юлдыбай ауылында тыуып үҫкән ҡыҙ ине. Әммә тамырҙары Юлдыбайға түгел, Баймаҡ районына береккәйне. Атаһы Исмәғил яҡлап бар туғандар ҙа Бөрйән ырыуына ҡарай. Ете быуын бабаһы Ярат Баймаҡ районындағы шул исемле ауылды нигеҙләгән. Сәғит менән Таңһылыу ырыуҙаштар булып сыҡты. Ырыуҙаш, әлбиттә, ҡауышыу тыйылған дәрәжәлә туғанлыҡты аңлатмай. Ир менән ҡатындың араһы кәмендә ете быуын айырылырға тейеш, тиҙәр. Уларҙың араһы ете генә түгел, ун дүрт, бәлки, унан да күберәккә айырымланғайны инде.

1986 йылда Өфөләге технологтар араһында шыпырт ҡына хәбәр таралды: “Исмәғилев ҡайта икән, ҡайһы заводҡа алырҙар?” Горбачевтың үҙгәртеп ҡороуы ил нигеҙен ҡаҡшата башлағайны. Әммә һөнәр эйәһенә ихтирам көслө ине әле.

## Шырлыҡ ярыу

Ҡайҙа эшкә сығырға? Был һорау Сәғиттең алдында байтаҡ ваҡыт тора. Ул саҡтағы Рәсәйҙә үҙҙәрен яҡшы уҡ күрһәтеп өлгөргән, аҙаҡтан илдә матбуғат биттәренән төшмәгән Премьер-министр Черномырдин, "Лукойл"дың Президенты Алекперов, нефть һәм газ промышленносы министры урынбаҫары Ингельзян, "Баштрансгаздың" генераль директоры урынбаҫары Исхаҡов һәм башҡа ошондай эре шәхестәр менән аралашып, эште улар менән ҡуша алып барыу, газ трассаһында күп ҡарарҙарҙы үҙаллы ҡабул итеп өйрәнгән Сәғит үҙенең заводта эшләй алырына тәүҙә шикләнде, унан шиге ҡарар булып нығынды. Саҡырҙылар Сәғитте. Элек эшләгән урынына ла, бүтән предприятиеға ла. Әммә иртәнге һигеҙгә тиклем заводҡа инеп киткән һәм киске биштә кире сыҡҡан кеше ағымын күреү генә лә уны ытырғандырҙы. Бер үк нәмәне көн һайын ҡабатлау, һинең өҫтөңдән кемдеңдер ҡамсылауына сыҙап йәшәү уны роботҡа әйләндерер һымаҡ тойолдо. Шул сәбәптән заводҡа бармаҫҡа ҡарар итте.

1987 йылда производство һәм сауҙа кооперативтары тураһында РСФСР Министрҙар Советының ҡарары сыҡты. Ул саҡта предприниматель йә эшҡыуыр тигән төшөнсә лә юҡ ине әле. Әммә был ҡарар ана шул яңылыҡты тыуҙырыусы тәүге документ булды. Уны уҡыны ла, бына ул мин эшләй торған нәмә, тип уйланы Сәғит. Был турала Таңһылыуына һөйләне. Таңһылыу менән улар "Йәшел сауҡалыҡ" биҫтәһендә йәшәйҙәр ине. Ике бүлмәле фатирҙы Таңһылыу элек ул йәшәгән өйҙө ватыу иҫәбенә алғайны. Ҡыҙҙары Наиләгә 2 йәш тулған саҡ был.

Сәғит район Советы башҡарма комитетына ғариза яҙҙы. Әлеге ҡарар нигеҙендә "Ракета" кооперативы асырға рөхсәт итеүҙәрен һораны. Бындай нәмәгә рөхсәт биреү-бирмәү тәжрибәһе бөтөнләй юҡ саҡ. Аҙаҡтанырaҡ, өйрәнеп алғас, бер нисә көн эсендә рөхсәт яҙа ла бирә торғайнылар. Ә Сәғиттең ҡағыҙын байтаҡ йөрөттөләр. Кәңәшләшкән, һөйләшкәндәрҙер ин-

де. Донъяға КПСС хужа саҡ бит. Тиҙ генә рөхсәт биреҙәр ине, бынан бер-бер алама нәмә килеп сығыр тип шөрләйҙәр инде. Бирмәһәләр, билдәлелек, демократия тигәндәренең сәскә атҡан сағы, хәҙер район Советын бюрократлыҡта, юғары органдарҙың ҡарарын үтәргә теләмәүҙә ғәйепләйәсәктәр. Ай тигәндә "Ракета"ға эшләргә рөхсәт сыҡты.

Ул саҡта тик сауҙа итеү йә арашсы булыу тигән нәмә кешенең башына ла килмәй ине. "Ракета"ның да маҡсаты тауар етештереү булды. Сәғит теннис өҫтәлдәре яһауҙы яйға һалырға булды. Авиация техникумының иҙән аҫтында етештереү цехы ҡорҙо. Өҫтәлдең металл нәмәләрен агрегат заводында эшләргә заказ бирҙе. Өҫтәл таҡтаһын һәм тояҡтарын урман-тәжрибә хужалығында. Йыйыу менән буяу эштәрен — баяғы иҙән аҫтында үҙҙәре башҡарҙы.

## Беренсе өҫтәл

Өҫтәлдәрҙе һатыуҙы үҙаллы ойоштороу баштарына ла инеп сыҡманы. Совет дәүерендә бар халыҡ та сауҙаның тик дәүләт йә ауыл кооперативы ҡулында ғына булыуына шул тиклем күнеккәйне, ә шәхси һатыу эше уйға ла килерлек түгел. Баҙарҙа баҡсаһында үҫтергән ҡыяр менән кишер һатып ултырған әбей-һәбей ҙә спекулянт иҫәбенә индерелә ине. Шуға "Ракета" теннис өҫтәлдәрен һатырға Өфөнөң өс спорт тауарҙары магазины менән килешеү төҙөнө.

Эш көйләнде. Һәр нәмәне лә башлап, ойоштороп ебәреүе ауыр бит. Бер йүнләнеп китһә, бара ул. 80-се йылдар аҙағында бөтә төр тауарға ла ҡытлыҡ саҡ. Шул иҫәптән теннис өҫтәлдәренә лә һорау ҙур. Тәүге өҫтәлдәрҙән килгән табыш эште башлағандағы сығымды ҡапланы, артабанғылары файҙа бирергә тотондо.

Тәүҙә Сәғиткә мыҫҡыллаған һымаҡ ҡараған чиновниктар, бының еңеүгә өлгәшеүен күреп танауҙары төштө, һарыһыуҙары ҡайнаны. Нисек инде ул бер кеше юҡ ерҙә нимәлер етеш-

тергән булып ҡулына йомарлап аҡса йөрөтә. Ғәҙеллек түгел был. Әлеге уй, күрәһең, бер Өфөлә генә тыумаған. Бүтән ерҙә лә шундай уҡ ҡараш ҡуйырған, һөҙөмтәлә яңы ҡарар сыҡты. “Ракета” кеүек кооперативтар саф табышының 95 процентҡа яҡынын һалым итеп түләргә тейеш. 5 проценты кооператив хужаһына ҡала!

Яңы моронлай башлаған шәхси эшҡыуарлыҡты быуыу булды был. Сәғит “Ракета”ны япты, ракета осор-осмаҫ көйө “шартланы”. Әммә тәүге кооперативта эшләп ҡарау бушҡа китмәне. Сәғиттә үҙаллы эшләп һәм йәшәп була икән тигән ышаныс инаныуға әүерелде. Ҡабаттан заводҡа ҡайта алмаҫ дәрәжәгә етте ул. Хатта баш технолог итәбеҙ, кеҫә тултырып аҡса бирәбеҙ тиһәләр ҙә аяғының береһен дә ҡабат баҫмаҫ ине.

Кооперативтарға һалым бөтәһенә лә бер үк кимәлдә булманы. Аҙыҡ-түлек етештереүсе һәм төҙөлөш кооперативтарына тын юлын ҡыҫып бөтмәнеләр. 1989 йылда Сәғит Исмәғилев төҙөлөш кооперативы асты.

Яңы йә иҫке предприятиеларҙың эше тураһында һүҙ алып барғанда, һис шикһеҙ шул саҡтағы дөйөм сәйәси һәм иҡтисади хәлдәрҙе күҙ уңында тоторға кәрәк. Шунһыҙ айырым кооперативтарҙың эшләү-эшләмәү сәбәптәрен аңлау ҡыйын. 80-се йылдар аҙағы дөйөм тұңкәрелеү ваҡыты бит. Предприятиелар эшләгән була, ләкин продукцияны алыусы юҡ. Сөнки уларҙың 80 процентҡа яҡыны хәрби технологияға ҡоролған. Ул саҡта хәрби экспансиянан баш тарта һәм хәрби технология кәрәкмәй тип ҡысҡыра башлаған саҡ бит. Ә төҙөлөштә бар эш ошо предприятиеларҙың заказын үтәүгә ҡоролғайны. 70-75 процент тирәһе төҙөлөш күләме предприятиеларға етештереү объекттары төҙөү менән бәйле, ҡалғаны ғына торлаҡ, мәктәп, больница, клуб, бүтән уҡыу йорттары кеүек объекттар. Уларын эшләргә төҙөлөш ойошмаларының йә көсө етмәй, йә кирбес, бетон кеүек материал аҙ ине. Заказсы предприятиеларҙың хәле мөшкөлләнгәс, төҙөлөштәге ҙур трестар ҙа хөртәйҙе. Улар бит элек эре заказдар ғына алып, эттем-төрттөм һалыуға өйрәнгәйне. Ә төҙөүселәр эшләйме-эшләмәйме аҡсаны барыбер

алды. Төҙөлөш кәмегәс, кирбес тә, бүтәне лә арта, төҙөүселәр эшһеҙ ҡала башланы. Кооперативтар үҙҙәре лә бәләкәй һәм еңел идара ителәләр, бик еңел күсеп йөрөйҙәр ине. Сәғиттең төҙөүселәре Башҡортостандың райондарында 2-шәр фатирлы, Күмертауҙа 3 ҡатлы торлаҡ йорттар, сусҡа һарайҙары, "Башнефть" берекмәһендә төрлө объекттар төҙөү, капиталь йүнәтеү эштәре башҡарҙы. Төҙөлөш материалдары етештереүселәр, техника тотоусылар Сәғиткә һәм уның кеүектәргә рәхмәт уҡый. Әл дә улар бар, улар кирбес, бетон, цемент, битум ала, аҡсаһын бирә, эшселәргә хеҙмәт хаҡы түләй. Ошо рәүешле һаҙлыҡҡа батып барған төҙөлөш индустрияһын ҡотҡарырға бар көсөн һалған кооперативтарҙы дәртләндерәһе урынға дәүләтебеҙ уларҙы йәнә быуа башланы. Һалымды бик нык арттырҙылар һәм төҙөлөш кооперативтарының күбеһе, шул иҫәптән Сәғиттеке лә ябылды.

1991 йылда Сәғит Исмәғилев менән Байрас Айытбаев "Саба" фирмаһын астылар. Ниәт электроникаға ҡоролған ҡайһы бер нәмәләргә запас частәр етештереү. Сәғиттең ойоштороу һәләте генә түгел, элекке технологлығы, техниканы һәйбәт белеүе ошонда кәрәк булды ла инде. Өфө заводтарында төрлө деталдәр эшләтеү һәм йыйыу, шуны электроника менән шөғөлләнгән бүтән предприятиеларға оҙатыу — уларҙың төп шөғөлө ине. Тәүге ике кооператив менән сағыштырғанда быныһы күпкә уңышлы эшләй, тамырын йәйә башланы. Мәскәүҙә "Саба"-ның филиалын астылар һәм башҡалаға уның продукцияһы тарала башланы.

Бизнеста берәү ҙә яҙмаған, әммә тормошта һыналған ҡағиҙә бар, күп эшмәкәр шуны үтәргә тырыша. Бәләкәй эшҡыуарлыҡ тик бер генә шөғөл тоторға тейеш, уртаса һәм эре бизнестың тармағы күп булыу шарт, тиҙәр. "Саба" ҙурая барған һайын яңы тармаҡтар тыуа барҙы. Тәүҙә ауылдарҙан мамыҡ үәл һатып алып, ҡалаларҙа һәм быңдай шәл булмаған төбәктәрҙә һатыу ойошторҙолар. Ул заман, 90-сы йылдар башы, бик болғауыр ваҡыт бит. Аҡса көн һайын осһоҙлана, ә магазиндарҙа кәштәләр буш. Әгәр ошондай мәлде файҙаланып, үтемле

нәмәләр тәкдим итеп ҡала икән кемдер, — был өлгөр һәм етди эшҡыуар һанала. Сәғит менән Байрасты ошо исемлектең беренсе юлдарына индерергә тура киләсәк. Улар Ҡытай менән бәйләнеш булдырып, өҫ кейеме килтерә башланы Башҡортостанға. Тәүҙә үҙебеҙҙә, шунан күршеләрҙә һатыу нөктәләре барлыҡҡа килде. Ул саҡта Ҡытай менән Рәсәй араһында бер төрлө лә рәсми бәйләнеш юҡ саҡ. Ҡытайға сығырға ла, һатырға ла, тауар ташырға ла бирәү ҙә рөхсәт бирмәй. “Саба” быны аҫтыртын эшләй. Ҡытай менән тәүге бәйләнеш ошо рәүешле тыуҙы. Һуңынан бизнестың ифрат ҙур күләмдәргә етеүе һәм рәсми төҫ алыуының тәүге сығанағы “Саба” һымаҡ рөхсәтһеҙ эшләүҙән тыуғайны.

1993 йыл. Бизнестың төмен татырға өлгөргән башҡорт егеттәре берләшеп ҙурыраҡ эшкә ынтылырға ҡарар итәләр. Бығаса айырым-айырым эшләгән “Төньяҡ амурҙары”, “Башпрожфонд” кеүек, шул иҫәптә “Саба” — 5 фирма “Ватан” тигән халыҡ-ара корпорация барлыҡҡа килтереү. Фирғәт, Ринат, Айрат, Рөстәм, Язар, Сәғиттәрҙең уйы ҙур ине. Башҡортостандың ҡаҙылма байлыҡтарын: кварц, нефть, юл түшәү ташын сығарыу, ғилми-тикшеренеү үҙәге төҙөү һәм быларҙы республиканы үҫтереүгә йүнәлтеү. Эште башлап ебәреү өсөн күп кенә аҡса кәрәк ине. 5 фирма үҙҙәренең булған түлен һалырға килеште һәм ҙур кредит алырға булды. Республика етәкселәре менән дә кәңәшләштеләр, улар “Ватан”сыларҙың яҡшы ниәттә икәнлеген күргәс, уңайлы шарттарҙа көтәсәккә аҡса бирергә булды. Шуға ышанып “Ватан” Урал аръяғында кварц ятҡылығын асты, юл төҙөргә тотондо, ғилми үҙәккә нигеҙ һалды, байтаҡ техника һатып алды, офис булдырҙы. Әммә был егеттәрҙең ныҡлап тотоноуы ҡайһы берәүҙәрҙе ҡурҡытты. Ошо рәүешле барһалар, былар оҙаҡламай Башҡортостанға хужа буласаҡ, тип өрктөләр. Кредит бирмәнеләр. Дөрөҫөрәге кредитты алдан һөйләшеп килешелгән шартта алып булмаясағы асылды. Ә бүтән төрлө алыу — бурыс һаҙлығына батыу һәм унан сыға алмайынса тонсоғоу икәнлеге көн кеүек асыҡ.

“Ватан”ды ойоштороған кешеләр берәм-берәм унан сыға

башланы. Ғаиләлә айырылышыу башланһа, ғауға, талаш, берберенде ғәйепләү һәр саҡ тиерлек сыға. Тыныс ҡына айырылыусылар бик һирәк. Бында ла шулай булды. Үҙ-ара ғәйепләшеү китте. Артабан бергә эшләп булмаҫы билдәле ине.

"Ватан"ды ташлаусылар араһында Сәғит Исмәғилев дүртенсе булды. Корпорацияның бурыстарынан башҡа нәмә әләкмәне уға. Ярар, эшләрмен, бурысты ҡаплармын, тик ыҙғыш бөтһөн, башҡорттар үҙ-ара һыйыша алмай тигән һүҙ йөрөмәһен, көлмәһендәр беҙҙән, тип уйланы. Әммә көлкөгә ҡалып өлгөргәйнеләр инде. Бер татар кешеһе: "Ни эшләп бер-берегеҙҙе күрә алмайһығыҙ һуң һеҙ? Башҡорттар былай ҙа аҙ бит. Бер-берегеҙҙе күтәреп, ярҙамлашып йәшәргә кәрәк",— тине әсенеп. Ул хаҡлы ине. Шуға Сәғит тешен ҡыҫты, элекке уҙаҡташтары, бигерәк тә берәүһе (исемен әйтеп тормайыҡ), ни генә һөйләһә лә ишетмәмешкә һалышты. Сәғит ошолай эшләргә ярамағанлығына мәңгелек һабаҡ алып, яңынан үҙ фирмаһын төҙөнө.

1995 йылда "Исмәғил" компанияһын асты һәм әле лә шуны эшләтә. Башҡарған эше нигеҙҙә төҙөлөш. Өфөлә, Ғафури, Учалы, Әбйәлил, Көйөргәҙе райондарында, Күмертау ҡалаһында төрлө маҡсатлы объекттар һалдылар. Өфөләге Александров пассажы үҙе генә ни тора! Башҡортостан башҡалаһының үҙәгендә боронғо архитектура өлгөләрен файҙаланып һалынған йорт үҙе бер мөғжизә. Өфөлә хәҙер төҙөлөш йылдам бара. Уларға ҡуйылған талап та юғары: матур, йылы, уңайлы, халыҡ ихтыяжын ҡәнәғәтләндерерлек итеп милли үҙенсәлектәрҙе сағылдырып һалырға кәрәк. Өҫтәүенә тиҙ һәм мөмкин ҡәҙәр арзан төҙөлөргә тейеш. Юғиһә конкурентты тота алмайһың һәм бөлгөнлөккә төшәһең. Ә уның үҙендекеләрҙән башҡа берәү ҙә белмәгән, күренеп тормаған "серҙәре" ни хәтлем әле! Төҙөлөшкә рөхсәт алыуҙан башлап йортто тапшырғанға ҡәҙәр күпме тапҡыр сират күпере үтергә кәрәк. Шул яҡтарын уйлаһаң, сәстәрең үрә торорлоҡ һәм бизнесҡа тотонорлроҡ түгел бит. 2007 йылда Сәғиттең эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнә башлауына 20 йыл тулды. Шул ваҡытта ба-

шынан кискәндәрҙе һанаһаң, сәс бөртөктәрең етмәҫ. Аҙым һайын кәртә бит. Бөтә нәмә лә эшҡыуарлыҡ алға бармаһын өсөн эшләнә. Алда әйтелгәнсә, 1995 йылға тиклем ике йыл һайын Сәғит яңы фирма ҡорған, яңы йүнәлеш алған. Шулай итмәҫ инең, закон кимәленән башлап район хакимиәтенең бәләкәй генә ҡарарына тиклем яйға һалып ебәрелгән бизнесты быуыу өсөн ни булһа ла сығарылып ҡына тора. 90-сы йылдар башынан бирле иң юғары кимәлдә бизнесҡа юл биреү, эшҡыуарлыҡҡа шарттар тыуҙырыу тураһында арымай-талмай һөйләйҙәр. Ғәмәлдә бөтәһе лә киреһенсә эшләнә. Һалымдар системаһын ғына алайыҡ. Шул тиклем төрлө һәм аңлайышһыҙ һалымдар уйлап сығаралар, уларҙы түләп түгел, белеп бөтөрөп булмай. Аптырағас, Сәғит фирмаһында махсус юридик хеҙмәт асты. Шулай булһа ла ҡыйын әле. Власть эшҡыуарҙарҙы компаниела эшләгән кешегә хаҡты законлаштырып ведомость аша түгел, конвертта бирә тип ғәйепләй. Әммә ғәйепләүселәр бер нәмәне уйламай: ведомосҡа ҡул ҡуйҙырып бирһәң, түләнгәндең 35 проценты күләмендә һалым бирергә кәрәк. Кемгә яҡшы бынан: эшҡыуарғамы, эшсегәме, дәүләткәме? Эшҡыуарға һис ҡыҙығы юҡ. Сөнки ҙур һалым уға эш хаҡын арттырырға мөмкинлек бирмәй. Эш хаҡы күтәрелгән һайын күберәк һалым түләргә кәрәк. Эшсегә ҙур һалымдан бер генә фәтеүә лә юҡ. Сөнки һалым өлөшөн хужа һуңғы сиктә уның хеҙмәт хаҡынан түләй бит. Власть эшсене хаҡты конвертта алмағыҙ, ведомость аша түләүҙе талап итегеҙ тип ҡоторта. Йәнәһе ведомость социаль һалымды түләтергә, ә был эшсенең киләсәктәге пенсияһы тигән һүҙ. Эшсегә был кәрәкме һуң? Юҡ. Сөнки уны барыбер алдаясаҡтар. Пенсия арттырабыҙ тип күпме хәбәр һөйләнелә, ғәмәлдә пенсионер фәҡир хәлендә ҡала. Пенсияға йәше етһә, ҡайҙалыр эшләп өҫтәмә хаҡ алмайынса булдыра алмай. Ошо булдымы пенсияға ышаныс? Етмәһә илдәге уртаса ғүмер оҙонлоғо пенсия йәшенән түбәнерәк. Шуға күбеһе пенсия йәшенә тиклем йәшәренә ышанмай, бөгөн мөмкин ҡәҙәр яҡшыраҡ йәшәп ҡалырға тырыша. Конверт ошо әмәлдең береһе инде. Хужа теге 35 процентты һалымға

түгел, конвертҡа һала бит. Тимәк кешенең йәшәү кимәле ана шул 35 процентҡа күтәрелә.

Дәүләткә кәрәкме был 35 процент? Быны берәү ҙә белмәй. Ҡайҙа була, нимәгә тотола һалым, — уны ҡәҙимге эшсе түгел һалымды бүлеп ултырыусы ла аңламай шикелле. Өҫтәүенә һалымдан йыйылған ил бюджетын урлайҙар, әрәм-шәрәм итәләр, һаҡсыл тотона белмәйҙәр. Тимәк дәүләткә лә кәрәкмәй әлеге 35 процент... Бына ошондай күңелһеҙ һығымта.

Әммә Сәғит Исмәғилев властыһанға һуҡмаҫҡа, законды үтәмәҫкә була тип эшләү түгел, был уйҙы башына килтергәне юҡ. Әлбиттә, ниндәйҙер эш башлар, йә ҡайһылыр ҡарарҙы ҡабул итер алдынан сығымдарҙы кәметеү, килемде арттырыу юлын эҙләй. Аҡса иҫәп ярата, тиҙәр бит. Алдан бизнес-план төҙөмәйенсә эшкә тотоноу, йомшаҡ ҡына әйткәндә, моңһоҙлоҡ булыр ине. Һанай Сәғит. Ғәмәл дәфтәре уның башында. Ниндәй сығым ҡайҙа китә, һуңғы сиктә ул нисек ҡапланасаҡ — барыһын да хәтерҙән иҫәпләй. Әлбиттә, уның бухгалтерияһы бар, унда юғары квалификациялы кешеләр эшләй. Улар документ төҙөй, Сәғит һанағанды ҡағыҙҙа дөрөҫләй.

Законға һыймағанды эшләһә, Сәғиттең башын әллә ҡасан ҡайҙалыр сереткән булырҙар ине. Ә быны теләүселәр етәрлек, киләсәктә лә табылыр улар. Ошо айҡанлы бер ваҡиғаға туҡталмай ярамаҫ.

## Кем ҡурҡа?

Телефон шылтыраны. Ғәҙәтенсә Сәғит ашыҡмай ғына трубканы алды.

— Әйе.

— Һин ундамы әле? Оҙаҡламай булмаҫһың...— өҫтәүенә ҡаты һүгенеү.

Сәғиттең бик иҫе китмәне. Аҙмы ни иҫәрҙәр. Бәлки берәрһе унан ҡәнәғәт булмағандыр, бәлки күрә алмаусыларҙың берешелер. Үҙаллы эшләп, ҡулына аҡса инә башлағаны бирле ҡы-

рын ҡараусылар күбәйҙе бит. Бындайҙар, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, үҙенең тирәһендәге, йышыраҡ милләттәш кешеләр ине. Был турала башҡа саҡта фекерләшербеҙ әле.

Баяғыса телефондан шылтыратыу йәнә-йәнә ҡабатланды. Был юлы Сәғит һағайҙы. Үҙ эшен көйләргә тырышып йөрөүселәр менән төрлө хәл сығып тороуы хаҡында ишетеп йөрөй бит. Шуның кеүек булып ҡуймаһын. Элегерәк Мәскәүҙә бер кеше менән осрашҡайны. Дөрөҫөн әйткәндә, башҡалалағы дуҫы таныштырҙы уны.

— Игорь Сергеевич был,— тигәйне дуҫы, Сәғиттең үҙе кеүек мыҡты кәүҙәле кешенең ҡаршыһына баҫтырып. — КГБ-ның, хәҙерге ФСБ-ның генералы. Минән башҡа был кеше менән бүтән еҙә осрашырға яҙмаһын. Әммә донъя хәлен кем белә.

— Беребеҙ ҙә белмәй иртәгә ни булырын,— тип ҡеүәтләне Игорь Сергеевич. — Илдә тәртип ҡалманы. Беҙҙе бар нәмәнән ситләштерҙеләр ҙә, хәҙер үҙҙәре лә ҡайһылайтырға белмәй.

Сәғит бының кем тураһында һүҙ алып барғанын төшөндө. Был турала ул әйтмәһә лә белмәгән кеше юҡ. Һәр берәү тигәндәй үҙ башынан кисерә. Кемделер урамда талайҙар, кемдеңдер өйөн баҫалар. Ә власть бер ни ҙә эшләй алмай.

Игорь Сергеевич Сәғиткә ҡулын һуҙҙы.

— Дуҫығыҙҙың һеҙҙең турала һөйләгәне бар. Бизнесығыҙ ыңғай ғына бара икән. Шулай булһын. Заманы шул...

Ул көндө Сәғит, Игорь Сергеевич һәм дуҫы киске ашты бергә ейҙеләр. Күп нәмә тураһында һөйләштеләр. Айырылышыр алдынан Игорь Сергеевич телефонын әйтте.

— Һеҙҙең халыҡ: “Бер күргән — таныш, ике күргән — белеш”, — тип тапҡыр әйтә. Бәлки беҙгә лә бер-беребеҙҙе белешеп йәшәргә тура килер.

Телефон шылтырауҙары өҫтөнә эш бүлмәләрендә, коридорҙарҙа ят кешеләр күренә башлағас, Сәғит Игорь Сергеевичты иҫенә төшөрҙө. Шылтыратты Мәскәүгә, хәл-әхүәлде һөйләп бирҙе.

— Юҡтан ғына тыумағанға оҡшай һинең шиктәрең,— тине Игорь Сергеевич. — Ашығыс рәүештә саралар күр. Беренсе си-

ратта офисыңа ҡарауыл ҡуй, йортҡа тик документ буйынса ғына индерһендәр. Әлбиттә, был һине юҡ итеүҙе маҡсат итеп ҡуйһалар, кәртә була алмай. Әммә шәләй-вәләйҙе ҡурҡытырға һәм ҡапыл һөжүм итеүҙән тыйырға ярай. Ошоларҙы эшләй тор. Ошо арала мин һинең ҡалала булам. Әлбиттә, бүтән эш менән. Шунда һиңә лә һуғылырмын. Ҡалғанын осрашҡанда һөйләшербеҙ.

Һүҙендә торҙо Игорь Сергеевич. Ике көндән килеп тә етте. Вәғәҙәһенә тоғро кеше икән, тип һоҡланды шунда уға Сәғит. Мин уға кем инде? Ни бары бер күргән таныш. Ә ул юҡ ваҡытын бар итеп килгән. Бәлки... Бәлки ул минән ҙур аҡса өмөт итәлер? Ярар, күҙ күрер.

Игорь Сергеевич һәммәһен дә төпсөп һорашты. Уйланып ултырҙы ла:

— Өфөләге беҙҙең егеттәрҙән һораштым. Уларҙа һиңә ҡарата тотоп алырлыҡ материал юҡ. Йәғни закон боҙмағанһың, конкуренттарың бик үк күренмәй. Уголовный донъя һиңә бик теш ҡайрамай, улар һинең республикалағы иң юғары кешеләр тирәһендә күренгеләгәнеңде яҡшы беләләр. Шуға бик ынтылмайҙар. Элекке компаньондарың, әлбиттә, һинең үргә йылдам үрләүең менән ҡәнәғәт түгел. Шулар ғына ул-был уйлмаһа...

Игорь Сергеевич Сәғит өсөн бик кәрәкле мәғлүмәттәрҙе бирҙе. Уның менән генә сикләнмәйенсә:

— Әйҙә әле прокуратураға. Иҫкәртеп ҡуяйыҡ уларҙы,— тип алып китте.

Закон һағында тороусы рәсми органда улар Ҡарымбаевҡа инде. Республика прокуроры командировкаға киткән, уның урынына Ҡарымбаев ҡалғайны.

Ул ФСБ генералы менән Сәғитте бүлдермәйенсә тыңланы, шунан көлә-йылмая:

— Исмәғилевҡа ҡарата беҙҙә бер ни ҙә юҡ. Уға дәғүә белдереүсе, йә булмаһа бүтән төрлө сигнал һуғыусы күренмәне. Әгәр ҙә инде ул-был була ҡалһа, беҙ Сәғит Фәтҡлисламовичты һәр ваҡыт яҡларбыҙ. Генерал һынлы генерал үҙе килгән бит. Аңлайбыҙ. Ул, һүҙҙең тамаланғанын белдереп, аяғөҫтө баҫты.

Сәғит тынысланды. Генералды хәл ҡәҙәренсә һыйланы, аҡса бирер киткәйне, тегенеһе алманы.

— Белешлекте боҙғоң килмәһә, аҡса һонма. Элекке КГБ-нан күбеһе һатылмаған әле. Мин намыҫым ҡушҡанға, һинең дуҫың хаҡына ярҙамлашам,— тине.

Сәғит бурҙаттай булды. Асыҡ күңелле кеше тураһында яман уй башына килгән өсөн оялды.

Был ваҡиға ошоноң менән тамаланһа икән дә бит. Әммә юғары вазифа тотҡан кешеләрҙең бөтәһе лә Игорь Сергеевич һымаҡ түгел икән шул. Өҫтәүенә компаньондарыңдан хәүеф булыуы ихтимал тип иҫкәртеүе лә хаҡҡа тура килде.

Генерал килеп киткәндән һуң ике көн үткәс тә беленде был. Эш бүлмәһенә өс кеше инде.

— Исмәғилев Сәғит Фәтҡлисламович һеҙме?— тине алдан кереүсе. Арттағы икәүһе ҡулдарын кеҫәләренә тыҡҡан, пистолет тотоп торалар.

— Эйе.

— Һеҙ ҡулға алынаһығыҙ.

— Ни нигеҙҙә?

— Бына прокурорҙың санкцияһы.

— Кем ҡул ҡуйған?

— Ордерҙа асыҡ яҙылған. Уҡығыҙ.

Сәғиттең күҙҙәре шар булды: Ҡарымбаев.

— Ни өсөн ҡулға алаһығыҙ мине?

— Унда яҙылған. Уголовный кодекстың статьяһы күрһәтелгән.

Кодекс ҙур. Уның менән көн һайын эш иткән кешеләр ҙә статьяларҙы яттан белмәй. Сәғит ҡайҙан иҫендә тотһон инде.

— Нисек аңлатыла был статья?

— Төрмәлә әйтерҙәр.

Әйттеләр: Исмәғилевты ҡорал менән сауҙа иткән өсөн тотҡандар икән. Ул ғына ла аҙ: Таңһылыу ҡорал сауҙаһын ойоштора, Сәғит шул эште башҡара, имеш. Таңһылыуҙы ла ҡулға алғандар. Адвокаттың тырышлығы менән Таңһылыуҙы ҡаланан сыҡмаясағына ҡултамға алып һәм ике бүлмәле фатирҙы аманатҡа һалып, ireккә сығарҙылар. Ә Сәғитте сығарыу ҡур-

ҡыныс тип таптылар һәм ул ултырып ҡалды. Тотондолар ҡорал эҙләргә. Сәғиттең офисын, йәшәгән фатирын, төҙөлөп ятҡан өйөн, тыуған-тыумасаларының йорттарын аҫтын өҫкә әйләндерҙеләр. Булмағас, нимә табаһың инде. Ай ярым буйы көн дә үҙенән таптырҙылар. “Ҡайҙа ҡорал? Әшнәләрең кем? Кемдән алаһың, кемгә һатаһың? Хаҡы күпме, аҡсаң ҡайҙа?” Әммә һорауҙар яуапһыҙ ҡалды.

Тикшереүселәрҙең генә түгел, Сәғиттең үҙ һорауҙарына ла яуап юҡ ине әлегә. Беренсеһе: кемгә кәрәк ине мине ултыртыу? Игорь Сергеевичтың һүҙҙәре һәр саҡ тел осонда торҙо: компаньондар. Тик кем? Бергә эшләгән, йәшәгән кешеләренең һәр береһен барлап сыҡты. Сәғиткә ҡаршы ошондай аҙымға барырға һәләтле тип тапманы береһен дә. Әммә кем дә булһа ҡылған бит инде. Үҙе белгән, эргәһендә йөрөгән кешеләр араһынан булыуына ул ышана алманы. Һәр кем үҙ аршыны менән үлсәй, тиҙәр бит әле. Сәғит тә бүтәндәрҙе үҙе һымаҡ күрҙе. Нисек инде үҙең менән ҡуша йәшәгән, бер ҡалаҡтан тиерлек ашаған кешегә күрәләтә яла яҡмаҡ кәрәк? Үҙе быныдай ҡәбәхәтлеккә бара алмай һәм бүтәндәрҙе лә быға һәләтле һанамай ине ул. Әммә төрмә һәм унан сыҡҡас булған күрешеүҙәр, тикшереүҙәр, һөйләшеүҙәр уның күҙен асты, донъяға башҡаса ҡарарға өйрәтте.

Айҙан ашыу ваҡыт эсендә милиция менән прокуратура хеҙмәткәрҙәре Сәғиттең тормошондағы бер генә көн йә сәғәтте лә тикшермәй, уны белгән, йә ул аралашҡан бер генә кешене лә иғтибарһыҙ ҡалдырманы. Арҡыры ла, буй ҙа һөрөп сыҡтылар. Әммә ҡулға эләктерерлек еп осо табылманы. Быны Исмәғилевтың эшен алып барған эҙсе лә, уның ярҙамсылары ла төшөндө. Бер нәмә лә таба йә раҫлай алмаясаҡтары көн кеүек асыҡланғас, Сәғитте республика прокурорына килтерҙеләр.

— Сәғит Фәтҡлисламович, ғәйепһеҙгә һәм нигеҙһеҙ көйө төрмәгә ултыртҡан, бик күп ауырлыҡтар һалған өсөн прокуратура исеменән ғәфү итеүегеҙҙе һорайым. Яла арҡаһында йонсотҡанбыҙ һеҙҙе,— тине прокурор Титов. — Бына ошо хаҡта мин һеҙгә документ әҙерләнем. Танышығыҙ.

Сәғит ҡағыҙҙы уҡып сыҡты. Титовтың әлеге һүҙе яҙылғайны. Сәғит яҙмаға ҡултамғаһын һалды ла һораны:

— Бының күсермәһен мин ала аламмы?

— Һис шикһеҙ.— Прокурор хеҙмәткәрҙәрҙән берәүҙе саҡырып,— ике дана күсермә яһағыҙ,— тине һәм ҡағыҙҙы индереү менән ҡулын ҡуйҙы, мисәт баҫты. — Алығыҙ ике дана. Кәрәге тейер. Донъя ул.

Сәғит төрмәнән сығыу менән, өйөнә лә ҡайтмай, эшкә барҙы. Берҙән үҙе юҡта эштә ни булған, бар нәмәне ҡыйратмағандармы, тип борослһа. Икенсенән, кешеләргә үҙен күрһәткеһе килде. Шатланмаһын дошмандар, һындыра алманылар мине, тиер китте. Ә дуҫтар әйҙә ҡыуанһын.

Компаниеһында үҙенә урынбаҫар итеп бер йәһүдте ҡуйғайны. Был милләт кешеләре тураһында нимә генә һөйләмәйҙәр. Ит изгелек, көт яуызлыҡ уларҙан мәғәнәлә һүҙ күп йөрөй. Әммә Сәғит быны алғайны. Берҙән, ошо турала теге кешенең туғаны үтенес белдерҙе. Туғаны республикала дәрәжәле кешеләр рәтендә йөрөй. Икенсенән, йәһүдте Сәғит үҙе лә электән үк белә ине. Нисә йыл буйы шик-шөбһә тыуҙырманы, шуға ышанды. Яңылышмаған булып сыҡты.

Компание ла, офис та урынында. Кешеләрҙән дә берәү ҙә эш ташламаған. Хужа юҡ тип тормағандар, үтә нығ эш ҡырмаһалар ҙа, ҡыйратмағандар. Шуны белгәс, Сәғиттең күҙҙәре йәшләнеп китте.

— Бизнес һеҙ булғандағы һымаҡ әүҙем барманы инде, әммә һаҙлыҡҡа батманыҡ. Прокуратура тартып алған компьютер һәм ҡайһы бер документтарҙан тыш милек тә үҙ урынында,— тине урынбаҫары. — Һеҙҙең яҙмыш ауырлығын еңеләштерергә тырышып бер аҙ аҡса тотондоҡ, шунан башҡаға теймәнек, эш хаҡы ла бирмәй торҙоҡ.

— Еңеләштерергә тырышыу тигәнегеҙ ни була?

— Районға барып Ҡарымбаевтың ҡустыһын килтерҙек. Ағаһы менән һөйләшһен, һеҙҙең ғәйепһеҙлекте әйтһен тип. Шунан уны кире илтеп ҡуйҙыҡ.

— Ни тигән һуң Ҡарымбаев?

— Минең эшкә ҡыҫылып йөрөмә, тип өйөнә лә индермәй ҡайтарған бер туған ҡустыһын.

— Башҡа ни көтәһең унан.

— Беҙ бит белмәнек... Шунан әҙселәргә аҙмы-күпме аҡса тотондоҡ.

— Ришүәт бирҙегеҙме ни?

— Юҡ, һеҙҙең эште тикшермәй һуҙа ла һуҙалар бит. Имеш, Мәскәүгә, Питерға, Владивостокка, бүтән ергә барыр, унда кешеләрҙе күрер кәрәк. Ә быларҙың самолетҡа билетлыҡ аҡсалары юҡ. Үҙәктән ҡасан ебәрәләр аҡса, шунан барабыҙ тиҙәр. Тиҙләтер өсөн билетлыҡ, бүтән ваҡ-төйәк сығымға биргеләнек.

— Мине ҡайтмаҫ тип уйлағанһығыҙҙыр, башы төрмәлә серер тип көткәнһегеҙҙер тиһәм әле мин.— Сәғит һүрән генә йылмайҙы.

— Ауыҙығыҙҙан ел алһын. Бер генә секунд та һеҙҙе ғәйеплеләр тип уйламаным. Таныһылыуға ла, балаларығыҙға ла әйтә торҙом шулай тип. Республиканың иң оло кешеһенә лә илсе ебәрҙек.

— Нимә тип?

— Ғәйепһеҙгә ултырттылар. Ҡотҡарығыҙ, тип.

— Ни тигән?

— Ғәйепһеҙ булһа, сығыр, тигән.

Сәғит йәнә йылмайҙы. Был юлы йөҙө баяғынан яҡтыраҡ ине. Ҡәҙимге кеше ҡиәфәте ҡайта башланы.

— Әйҙәгеҙ, бүлмәләр буйлап үтәйек. Хеҙмәткәрҙәр менән һаулашып сығайым.

— Бик хуп, әйҙәгеҙ.

Һәр бүлмәлә Сәғиттең ҡулын оҙаҡ-оҙаҡ ҡыҫып шатлыҡтарын белгертте кешеләр, ҡосаҡлап алырға ла дәрт итеүселәр бар ине лә, тыйылдылар. Әммә ҡатын-ҡыҙҙан бер-икәү барыбер сикәһенән "әп" итеп алды. Был юлы Сәғиттең күҙҙәренән дә нур һибелде.

Урынбаҫар башҡарған эшен ҡупыртмай ғына, ҡәҙимге көн мәшәҡәте һымаҡ ҡына һөйләне. Шуның ҡарауы төрмәләге Сә-

ғитте ҡотҡарыуға ифрат күп көс “һалыусылар” күбәйҙе лә китте. Шуларҙың береһе урамда осраны. Сәғитте килеп ҡосаҡлап алды.

— Сыҡтыңмы? Сығармай ҡараһындар беҙ уларҙы! — тип йоҙроҡ болғаны был. — Әйткәндәй, Сәғит, һин миңә бурыслы. Бер ярты ултыртмайынса ҡотола алмаҫһың.

— Ярты ғына түгел бөтөнөн дә ҡуябыҙ уның, тик нимәгә икәнен әйт.

— Һине тегенән ҡотҡарып алыр өсөн күпме йөрөнөм мин. Әллә кемдәрҙе күреп, әллә кемдәргә шылтыратып бөттөм. Юҡтан башҡаны белмәйҙәр. Саҡ һындырҙым. Бөтөн ҡуйһаң да хаҡың бар.

— Беләһеңме нимә, дуҫ! — Сәғиттең күҙенән ут саткылары бөркөлдө, “дуҫ” һүҙенә айырыуса баҫым яһаны. — Миндә ике төрлө исемлек бар. Береһе — кемдәр мине ҡотҡарырға тырышҡан — шуларҙыҡы. Икенсеһендә — кемдәр хәленән килә тороп та ярҙам итмәгән, шулар. Тәүге исемлектә бер генә кеше. Һинме ул?

Элеге “дуҫ” ниңәлер ҡапыл ғына ҡабаланып, эшенең күплегенә һылтанып, китеп барҙы. Ҡабаттан Сәғиттең юлы киҫешмәне уныҡы менән. Сөнки теге, Сәғит күренһә, урамдың икенсе яғына сыҡты.

Исемлектәге берҙән-бер фамилия эске эштәр министрлығында эшләүсенеке ине. Был тәфтишсегә шылтыратҡан икән.

— Исмәғилевтың эше нисек бара?— тип һораған.

— Ни эшләп ҡыҙыҡһынаһығыҙ? Министрға әйтәбеҙ,— тигән тәфтишсе.

— Юҡ-юҡ, былай ғына,— тип трубканы һала һалған былыһы.

Ошоларҙың һәммәһен дә ваҡ-төйәгенә тиклем Сәғит, бәлки, белмәҫ тә ине, ФСБ егеттәре хәлен белешеп, әйтеп торҙолар. Сөнки ҡорал менән һатыу итеү тураһындағы мәғлүмәт прокуратура менән эске эштәр министрлығында ғына ҡалмай, шул уҡ көнөндә үк ФСБ идаралығына, республика етәкселегенә бирелә һәм Мәскәүгә оҙатыла ине. Мәскәүҙәге ФСБ генералы

Игорь Сергеевич күргән дә мәғлүмәтте, эш барышын махсус контролгә алыуҙы Өфөләге коллегаларына ҡушҡан. Былар Сәғиттең нахаҡҡа ултырыуын шунда уҡ асыҡлаған һәм һәр хәбәрҙе үҙенә үк әйтеп торған. Тик эшкә ҡыҫылмаған. Уны эске эштәр министрлығы асҡас, прокуратура санкция биргәс, үҙҙәре ябырға тейеш. Тәртип шундай. Сәғитте тикшереүсе тәфтишсе лә хәҡиҡәтте тиҙ аңлағайны. Ул да барыһын да асыҡтан асыҡ һөйләп торҙо. Йәшерен-батырын яһарлыҡ бер ниндәй нигеҙ ҙә, шик тә юҡ ине бит.

Был донъялағы бер генә хәл-ваҡиға ла эҙһеҙ үтмәй. Шатылығы ла, ҡайғыһы ла кешегә аҡыл өҫтәй, әгәр ул үҙе алһа. Бәрәү ҙә аҡыл эйәһе булып тыумай, уны тормош үҙе үҫтерә. Төрмәлә ултырып сығыу ҙа Сәғиткә байтаҡ һабаҡ бирҙе. Алда әйткәндәрҙән тыш, йәнә ике ҙур һығымта яһаны ул үҙе өсөн. Беренсеһе — үҙеңдең, кәрәкһә, бүтәндәрҙең хоҡуғын, иркен яҡлай белергә кәрәк. Бының өсөн закондарҙы өйрәнеү һәм уларҙы тормошта файҙалана алыу бик мөһим. Сәғит бер нисә кешенең хоҡуғын суд аша яҡлашты һәм унда улар өҫтөн сыҡты. Икенсеһе — үҙеңдең дөрөҫлөгөңдө, һүҙеңдең хаҡлығын иҫбат иткәндә ҡурҡырға ярамай. Һине еңеп, баҫып алырға теләүсе күп осраҡта һәр төрлөсә өркөтөргә тырыша. Шунда ла бирешмәһәң, йоҙроҡҡа күсеп маташа. Унда ла үҙеңдекен һөйләһәң, төрмә менән янай. Төрмәнән унда булмаған кеше генә ҡурҡа. Ә мин төрмәнең ни икәнен беләм, шуға уның менән шөрләтергә тырышыу — буш мәшәҡәт, тип һанай ул.

## Өйрәнгәнең — үҙеңә

Бала саҡта минең атай эш ҡушҡанда: "Эшләгәнең минең өсөн булһа, өйрәнгәнең — үҙеңә",— ти торғайны. Сәғит Исмәғилев эшҡыуарҙар араһынан иң беренсе булып үҙ эшен асҡанға күрә, байтаҡтар тәүҙә уның янында бизнес серҙәренә өйрәнде, һуңғараҡ айырым эшләй башланы. Шуларҙың береһе тип уның урынбаҫары булған йәһүдте әйткәйнек инде. Өс йыл

ярым эсендә бик әүҙем, ипле, алдын-артын ҡарап эш итәр булып үҫте ул. Бер көн:

— Сәғит Фәтҡлисламович,— тине. — Һеҙ мине бик күп нәмәгә өйрәттегеҙ. Хәҙер үҙемде үҙаллы эшләрлек итеп тоям. Бер аҙ түл дә йыйҙым. Рөхсәт итһәгеҙ, мин үҙем эшләп ҡарар инем. Рөхсәт итмәһәгеҙ, ҡалам. Һис бер үпкәһеҙ эште “Исмәғил”дә дауам итәм.

Ошолайтып торған кешегә нисек ҡаршы килһен инде Сәғит. Яҡшы урынбаҫарын юғалтһа ла, фатиха бирҙе. Әле лә дуҫ, иптәш улар. Элекке урынбаҫар уңышлы эшләп китте. Бизнесы ыңғай бара.

Сәғит менән “Исмәғил”дә бергә булып, хәҙер үҙаллы эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнгән Иршат Аҫылғужинды, Гүзәл Яубаҫарованы айырып әйтеү кәрәктер. Аҫылғужин да Көйөргәҙе районы егете. Хәҙер Башҡортостандың байтаҡ ҡына төбәктәрендә төҙөлөш эштәре алып бара, Көйөргәҙелә үҙенең кирбес заводы бар. Әйткәндәй, Ермолаево ҡасабаһында төҙөлгән мәсетте һалыуға тулыһынса етерлек кирбесте ул хәйер рәүешендә бирҙе.

Гүзәл Яубаҫарова “Арт студия” исемле проект студияһы асты. Өфөләге бик матур йорттарҙың байтағы ошонда проектланған. “Исмәғил” төҙөгән Александр пассажын да ҡағыҙҙа ул һыҙҙы. Бына тигән йорт килеп сыҡты.

Яңы эшҡыуарҙарҙы үҫтереү, бигерәк тә милләттәштәребеҙҙе шуға өйрәтеүҙе бурысы тип һанай Сәғит. Башҡорт эшҡыуарҙары фондын барлыҡҡа килтереүселәрҙең береһе ул булды. Хәҙер шунда рәйес урынбаҫары.

Сәғит Исмәғилев эшҡыуар булып шөғөлләнгән дәүерҙә 200-ҙән ашыу төрлө йорт һалыуҙың башында торҙо. Һәр объектта эште ойошторғанда ул быға төҙөлөш майҙаны итеп кенә түгел, буласаҡ белгестәрҙең эшкә күнегеү урыны итеп ҡарай. Шуға объекттың хужаһы — прорабтан башлап эштәге һәр кеше үҙебеҙҙекеләрҙән булырға тейеш, тип һанай ул..

Был йәһәттән беҙ бүтән милләтте маҡтарға, ниндәйҙер

дәрәжәлә көнләшеберәк тә ҡарағa күнеккәнбеҙ. Сәғиттең был йәһәттән дә ҡарашы үҙенсә. Күбеһе беҙҙең милләт кешеһе булғанда эш ауыр бара тигән булалар, дөрөҫ түгел. Беҙҙең халыҡ һәр эштә аныҡлыҡты ярата. Уға ни генә ҡушһаң да теүәл итеп бурыс ҡуйырға һәм уны үтәгәндә кешенең ни аласағын, үтәмәгәндә ни буласағын әйтергә кәрәк. Башҡорт — бик борондан хәрби кеше, бойороҡто теүәл башҡарыу уның ҡанына һеңгән. Ә бойороҡ бик ҡыҫҡа әйтелә һәм аныҡ төшөнсәләрҙән тора. Башҡорттоң һүҙгә әүәҫ булмауы, бөҙрәләп хәбәр һөйләмәүе шунан килә. Башҡорттоң сауҙа тирәһендә эшләмәүе, бигерәк тә ваҡлап һатыуға барымының аҙлығы ла шул уҡ хәрбилек менән бәйле. Сөнки сауҙәгәр телгә бөткән, ике һүҙҙең береһендә булмаһа ла, ундың икеһендә ялғанларға, һатып алыусыға ярарға тырышырға тейеш. Хәрбиҙәрҙә был һыҙаттарҙың береһе лә булмай. Хәрби тормош алдашыуҙы ғәфү итмәй һәм унда яраҡлашыуға урын юҡ. Сөнки сардарға ярап йөрөгән һалдат яуҙа дошман алдына баҫҡас, кемдеңдер артына боҫоп ҡала ла, яҡлаусыһы быны һаҡлай ҙа алмай. Шуға ауырлыҡты үҙ күкрәгең менән ярырға, үҙ ҡалҡаның менән ҡылысты ҡаҡлыҡтырырға ҡала. Башҡорттар күп йәшәгән ерҙә бер береһе өҫтөнән ялыу күп яҙыла һәм уғрылыҡ юҡ кимәлендә ҡала. Былары ла әлеге лә баяғы хәрбилектең үҙенсәлектәре. Ғәскәр тормошонда кемдеңдер етешһеҙлеге бар икән, сардарға еткерегеҙ, үҙаллы бөтөрөргә тырышмағыҙ тип өйрәтәләр. Бына ошонда инде ялыуға нигеҙ, ғәскәри тәртипкә өйрәнгән кеше күршеһенең етешһеҙлеген өҫкә әләкләй, ә тегеһеһе сара күрә. Әгәр ҙә етешһеҙлеккә ҡаршы үҙаллы көрәш рөхсәт итһәң, һис шикһеҙ ҡан ҡойоласаҡ. Ҡорал етәрлек, баштар ҡыҙыу бит.

Был һығымталарға Сәғит бик оҙаҡ ҡайта-ҡайта уйлағандан һуң килде. Тормош үҙе этәрҙе ошо һығымталарға.

“Исмәғил” компаниеһын ойошторғас, төҙәлөш менән генә сикләнмәҫкә була автомобилдәр хеҙмәтләндереү һәм төҙәтеү мастерскойы асҡайны. Ҡорамалдар, эш ҡоралдары алды, бина тапты. Директор итеп бер яҡташын ҡуйҙы. Эш рәтен бел-

гән, һере кеше булып сыҡты был. Тиҙ үк күтәреп ебәрҙе мастерскойҙы, табыш та бирә башланы. Әммә Сәғит иртәрәк ҡыуанған булып сыҡты. Ике йыл самаһы эшләгәс, мастерской бер тин дә килем бирмәй башланы.

— Ни булды? Ни эшләп табыш юҡ?— тип һораны Сәғит директорҙан.

— Клиент юҡ. Яҡын тирәлә тағы өс мастерской асылды бит, шуға клиент ныҡ аҙайҙы. Алынған табыш сығымдарҙы ҡапларға ла етмәй. Өҫтәүенә бензинға, электр энергияһына, газға хаҡ артты. Сығымдар күп, килем аҙ.

— Клиенттарҙы күршеләргә ебәрмәҫ кәрәк. Уның юлдары күп бит.

— Шуның өҫтөндә тыршабыҙ инде.

Тик директор эште яҡшыртаһы урынға бүтән менән булған икән. Сәғит автомастерскойға барып хеҙмәтләндереүгә ҡабул ителгән машиналар һандары теркәлгән журналды һораны. Бер айҙа 200-гә яҡын машина үткән. Һәр береһенән иң кәмендә 500 һум ғына алынһа ла күпме аҡса була. Ә был юҡ та юҡ, ти. Күҙгә ҡарап алдаша бит. Ошонда эшләгәне бирле яңы фатир алды, уны мебель, башҡа йыһаз менән тултырҙы, ҡаланан ситтә өй һалды. Ҡайҙан алған ул был аҡсаны? Өндәшмәгәйне Сәғит. Эйҙә инде рәтләһен донъяһын, бөтәбеҙ ҙә шуның өсөн йөрөйбеҙ бит, тине. Ә был саманан тыш шаша түгелме һуң? Компаниеға ла бирмәй, мастерской эшселәренә лә хеҙмәт хаҡын бик түбән ҡуйған. Тимәк күбеһен кеҫәһенә һала.

Сәғит быларҙың барыһын да тегенең күҙенә бәреп әйтте. Директор китте ҡыҙып, йәнәһе уны уғрылыҡта ғәйепләйҙәр, бер нәмәне лә таныманы.

— Ул сағында эштән китәһең,— тине Сәғит

— Ни өсөн?

— Мастерскойҙың иҡтисад хәлен тәьмин итә алмаған өсөн.

— Ә-ә! Һин шулаймы әле? — Директорҙың тауышы йәшелле-күкле булып китте. — Мин һинең үҙеңде бөтөрәм. Бына ҡара,— теге портфелдән бер төргәк ҡағыҙ сығарҙы. — Бына ул һинең шухер-мухерҙарың тураһында документтар. Ҡайҙа

кәрәк шунда илтәм дә бирәм. Теге юлы тәфтишселәргә төртөп төрмәнән ҡотолдоң, был юлы ҡотола алмаҫһың.

Директор енләнеп сығып китте. Сәғит башын тотоп уйланып ултырып ҡалды. Бына һиңә: ит изгелек, көт яуызлыҡ. Үҙе менән бергә эшләгән, үҙе аяҡҡа баҫтырған һәм үҙенең милләттәштәре икенсе тапҡыр ошондай хәл тыуҙыра. Ҡайҙа хата? Сәғит кешеләрҙе һайлай белмәйме, әллә милләттәштәренең үҙенсәлегеме был?

Күп уйланды Сәғит. Ахыр сиктә үҙен ғәйепләне. Беҙҙең халыҡҡа аныҡ эш ҡушырға һәм уның хоҡуҡтарын теп-теүәл билдәләргә, ошонан тегендә тиклем генә ниҙер ҡылырға ярай, ә һыҙыҡ аша сыҡмаҫҡа тип. Шундай сиктәр булмаһа, ул шул тиклем иркенләй, ерҙе лә күрмәй, күкте лә шәйләмәй башлай, закон да юҡ уның өсөн, ҡағиҙәләр ҙә һанға һуғылмай. Ошо хәлгә дусар бит директор. Тимәк миңә баштан уҡ уның хоҡуҡ сиктәрен билдәләргә, контракт төҙөргә кәрәк ине. Компаниеға фәлән тиклем табыш бирһәң, төгәне — һинеке. Эшселәрҙең хеҙмәт хаҡы ошо рәүешкә еткәндә, һинеке былай була, тип. Ә Сәғит быны эшләмәне. Тимәк ул үҙе ғәйепле.

Директор менән артабан эшләп булмаҫын төшөнгәс, ул уны бушатыу әмәлен күрҙе. Директор ҡыуылып сыҡҡан һымаҡ булмаһын, кеше алдында йөҙө яҡты ҡалһын өсөн автомастерскойҙы ҡыҫҡартыу юлын һайланы Сәғит. Шунан һуң директор үҙе китте.

Бына ошонда бая әйткән икенсе һыҙат асылды — ялыу йөрөтөү башланды. Директор Сәғит Исмәғилев өҫтөнән ФСБ-ға ялыу яҙған һәм уға ҡушып теге көндө булғаған ҡағыҙҙарын һалған. Баҡһаң был “Исмәғил” компаниеһының бухгалтер документтарының күсермәһен алған икән. Ҡайһылайтып ҡулына төшөргән уларҙы — Сәғит осона сыға алманы. Әммә был компаниела хәүефһеҙлек сараларын көсәйтергә сәбәп булды.

Директорҙың ялыуы артынан уның яҡындарынан ике кеше ФСБ-ға ошаҡ менән барғандар. Тыңлағандар уларҙы. Тикшерербеҙ, тигәндәр. Әгәр законды боҙған булһа, сараһын күрербеҙ. Тик ФСБ быға нигеҙ тапманы. Директор тапшырған доку-

менттарҙы ҡарағандан һуң Исмәғилевтың үҙен саҡырҙылар. Ҡайһы бер һорауға яуап биргәндән һуң, һеҙҙе яуапҡа тарттырыу өсөн сәбәп күрмәйбеҙ, тинеләр.

## Ҡунаҡтар

Үҙеңдең туғандарыңа, ырыуыңа, халҡыңа изгелек теләһәң, уның етешһеҙлектәренән көл, тиҙәр. Көләү генә түгел тәнҡитләргә лә, кире сифаттарының сәбәптәрен дә асыҡларға була. Тик халыҡтың ыңғай яҡтарын күрмәй һәм шуны иҫәпкә алмай тороп, ҡоро тәнҡит кенә асыуҙан тыш бер нәмә лә тыуҙырмаясаҡ, файҙа килтермәйәсәк. Башҡортто белгән, күргән сит кешеләр быуат-быуаттар буйы уның батырлығын, тоғролоғон, ҡунаҡсыллығын, бер ҡатлылығын маҡтай. Ошо сифаттар уны милләт итеп ойоштороп, йөҙәрләгән һуғышта ла ҡырҙырып бөтөрмәй һаҡлап килтерәлер әле. Башҡорттоң һуғыштағы аяуһыҙлығын һәм тиңһеҙ батырлығын меңәр-меңәр миҫалдар һөйләй. Ҡайһы саҡта бер кешенең батырлығы мең кешене иҫән ҡалдыра бит. Шул арҡала ҡырылып түгелмәгән дә инде ул. Вәғәҙәһенә, биргән һүҙенә тоғролоҡ арҡаһында ул иң ышаныслы ғәскәр даны алған. Рәсәй эсенә ингәне бирле, батшаға йөкләмәһенә тоғро ҡалып, хатта шул уҡ батшаға ҡаршы алып барған эске һуғышты туҡтатып торп, тышҡы дошманға ажарланып ташланған. Рәсәй ғәскәре эсендә шведтарға, поляктарға, төрөктәргә, япондарға, французларға ҡаршы һуғыштарҙа ана шулай булған. Хатта әлеге көндә лә әрмегә егеттәр һайлағанда хеҙмәткә барыусының башҡорт икәнен белһәләр, бар төрлө ғәскәр сардары ла уны үҙенә алыр өсөн тас йәбешә.

Һуғышсы таһыллығы йәһәтенән Ҡаф тауы илдәрендә йәшәүселәрҙең береһе лә, осетиндарҙан тыш, башҡортҡа тиңләшә алмай. Осетин шул уҡ башҡорт бит инде. Тик Уралдан бик борон киткән һәм христиан динен ҡабул иткән. Ни эшләпме? Сөнки башҡорттоң икенсе исеме “истәк” (ҡаҙаҡ уны шулай

ти). Төрки булмаған, “ә” өнөн белмәгән телдәрҙә “истәк” — “остяк” — “осетин” булып яңғырай.

Сәғиттең офисына биш-алты кеше инде. Йөҙҙәре, төҫө беҙҙең яҡ кешеләре түгел икәнлеген күрһәтеп тора.

— Газилян,— тип таныштырҙы үҙен алдағыһы.

— Бик яҡшы. Был кешеләр кем?

— Улар минең менән.

— Һеҙ бер үҙегеҙ киләм тип шылтыраттығыҙ, ә бында отделение эйәрткәнһегеҙ. Мин бит бер үҙем. Бүтән кеше саҡырмағанмын. Һеҙ ҡалығыҙ, бүтәндәр сыҡһын.

— Юҡ. Улар беҙҙең һөйләшкәндә кәрәк.

— Ярар. Ни йомош?

— Беҙҙең бер кеше бик ауыр хәлдә. Шуны дауаларға аҡса кәрәк. Ярҙам итегеҙ. Унан һуң аҙлап ҡына ай һайын бер биреп барырһығыҙ, тип уйлайбыҙ.

Сәғит быларҙың кем икәнлеген аңланы, — рекет. Улар менән тик үҙҙәренсә генә һөйләшергә кәрәк, бүтәнсәне төшөнмәйәсәктәр. Исмәғилев Газилянға өндәште:

— Һин минән ҡурҡаһыңмы?

Теге һикереп торҙо.

— Мин — Газилян, ошо тирәнең уполномоченныйы, һинән ҡурҡаммы?

— Ҡурҡмағас, быларҙы сығар. Тышта торһондар. Үҙең ҡал. Һөйләшербеҙ.

Газилян тегеләргә баш иҙәгәйне, теләр-теләмәҫ, әммә сығып киттеләр. Бүлмәлә икәү генә ҡалғас, Сәғит һораны:

— Һин минең кем икәнде беләһеңме?

— Беләм. Һин Исмәғилев, компание башлығы.

— Дөрөҫ. Тик был ғына аҙ. Мин башҡорт һәм үҙ еремдә йәшәйем. Һин мине ҡурҡытырға, аҡса таларға килдеңме? Мә һиңә аҡса!— Сәғит тегенең яңаҡ аҫтына ҡундырҙы, Газилян осоп китте. Сәғиттең йоҙроғон күргән кеше уның дәүмәлен белә, шуға бокс буйынса еңеүсе булғанлығын да өҫтәһәң, Газиляндың яңағына ниндәй көс төшкәнен самалап була. Теге һынған тештәрен төкөрә-төкөрә тороп килә ине, Сәғит быға

йәнә яманы. Газилян һуҙылды ла ятты. Әллә үлде инде тип хәүефләнгәйне Сәғит, юҡ икән, ҡыбырланы. Был унының елкәһенән эләктереп майҙансыҡҡа һөйрәп сығарҙы ла баҫҡыстан ырғытты, түбәнге ҡатҡа төшкәнсе тәгәрләне.

— Ҡабаттан был йортҡа юлды онот!

Бер аҙҙан имгәкләп тигәндәй ишектән сыҡты Газилян.

Сәғит тәҙрәнән ҡарап торҙо. Ни эшләр бүтәндәре? Күмәкләп мине дөмбәҫләргә ташланырҙармы тип уйлағайны. Ҡайҙа ул? Газилянды ике яҡтан күтәреп алдылар ҙа, боролоп та ҡарамай, тайҙылар. Сәғит тирәһендә ҡабаттан күренмәне былар.

Бер чечен менән дә шундайыраҡ хәл булды. Чечняла һуғыштың ҡыҙған сағы. Шул тиклем ҙур Рәсәй менән һуғышырға баҙнат иткән чечендар батыр ҡиәфәтендә саҡ. Уларға бөтәһе лә һоҡланып та, ҡурҡыбыраҡ та ҡараған мәл. Һаҡаллы кеше килде. Үҙен әллә кем итеп тотоп ишекте шар асып инде был, Сәғиткә ҡулын һондо:

— Чечен Али.

Хужа һонолған ҡулды алды:

— Башҡорт Сәғит.

— Мин һеҙгә тәҡдим менән килдем. Урыҫ һеҙҙең дә дошман, беҙҙең дә дошман. Әйҙә шуға ҡаршы берләшергә егеттәрҙе уҡытыу өсөн мәҙрәсә асайыҡ. Беҙ уҡытыусылар бирәбеҙ, кәрәкһә, Ғәрәбстандан килтерәбеҙ. Ә һеҙ егеттәр йыйаһығыҙ, мәҙрәсә тотаһығыҙ һәм уҡытыусыларға түләйһегеҙ.

— Ваһаб әҙерләргәме? Икенсе төрлө әйткәндә һуғыш ҡорбаны. Шулаймы?

— Ваһабтар ҡорбан түгел, исламдың таҙалығы өсөн һуғышыусылар.

— Беҙҙең мәҙрәсәләребеҙ етерлек һәм унда беҙ хәнәфи мосолмандар әҙерләйбеҙ. Һуғыш түгел уларҙың юлы, ә Аллаһтың тәғлимәтен мөслимдәргә еткереү.

Чечен һаман үҙенекен һөйләй. Быларҙың Татарстанда, Силәбе өлкәһендә һуғыш ҡорбандары әҙерләгәнен ишеткәне бар ине Сәғиттең. Әммә шул тәҡдим менән үҙенә килерҙәр тип һис уйламаны.

— Юҡ,— тине Сәғит.

Теге һаман үҙенекен тылҡый. Исламдың бөтөнлөгө, унын хаҡына мосолман халыҡтары берләшергә һәм кафырҙарға ҡаршы аяуһыҙ көрәш алып барырға тейешлекте һөйләп-һөйләй.

— Али!— тип ҡысҡырҙы Сәғит. — Һин ҡунаҡмы?

— Ҡунаҡ.

— Һин ҡунаҡ икән, мин — хужа. Мин ни әйттем — шул була. Башҡортостанда ваһабтарға урын юҡ. Быны һиңә әлепте таяҡ тип белгән һәр бер башҡорт әйтер. Беҙ Батша Рәсәйенә ҡаршы ҡорал тотоп 350 йыл һуғыштыҡ. Хәҙер ҡорал алмайбыҙ. Хуш, ҡунаҡ. Бүтәнсә килеп йөрөмәһәң дә була.

Ошо хәлдәрҙе бәйнә-бәйнә улы Уралға һөйләне Сәғит. Өндәшмәгән дә булыр ине, сәбәбе сыҡты.

Бынан егермеләгән йыл элек бер әрмән яр араһында ултырған Өфө урамында өй һатып ала ла йәшәй башлай. Ҡайҙалыр уҡығандырмы — юҡмы, милицияға урынлаша. Яр урамында бушаған һәр өйҙө һатып ала, тыуған ырыуын килтерә был. Бер аҙҙан ҡәҙимге милиционер погонына йондоҙҙар таға, шул тирәлә участковыйлыҡҡа етә. Хәҙер тамырҙы нығыраҡ йәйһә лә була. Ҡала ситендә йорттар төҙөй, дөйөм туҡланыу предприятиелары аса былар. Бер кешенән башланған эш диаспора төҙөүгә барып етә. Инде былар үҙҙәрен көс итеп тоя башлай. Һан яғынан ғына түгел, берҙәмлек менән алдыра былар. Ҡытыршылыҡтар сыға ҡалһа, участковый власть менән эште һылапһыйпап ебәрә. Ә майлай белә, матур һөйләп, ҡаҡ таҡтаға ултырта улар.

Шул бәндәләрҙең бер төркөмө Сәғиттең улы Уралды, улар теле менән әйтһәң, стрелкаға саҡырған. Уларҙан бер нисә, быларҙан бер нисә кеше күрешәләр ҙә, һөйләшеү килешеү менән бөтмәһә, йә ҡул һуғышы була, йә атышалар.

— Ни эшләйем икән, атай?— тине Урал.

— Бар, улым, ҡурҡма бар. Улар үҙҙәре ҡурҡаҡ халыҡ. Һинең шөрләмәгәнеңде аңлаһалар, яҡын килмәйәсәктәр. Ҡурҡҡаныңды һиҙһәләр, көн күрһәтмәйәсәктәр. Шуға күрә стрел-

каға сыҡ. Тик шарт ҡуй. Бергә бер, тиең. Тегенән берәү һәм һин бер үҙең. Ризалашалар икән, бар. Һин еңәсәкһең.

Урал әйткән тегеләргә шул турала. Күнгәндәр былар. Осрашыу урыны тип ҡаланың ситендәге бер аулаҡ ер һайланған.

— Үҙең генә бар, ҡорал алма,— тип туҡыны Сәғит.

Китте Урал. Ул барғансы теге килгәйне инде. Ағас күләгәһендә тора. Урал машина менән барып туҡтаны, тегенең аланйолан ҡарауынан бер үҙе түгеллеген төшөндө, әммә һиҙҙермәне. Урал да яңғыҙ булманы. Тик быны ул үҙе лә белмәне. Атаһы уңайлы урын һайлап биноколдән быларҙы күҙәтә ине.

Урал тегенең ҡаршыһына барып баҫты ла:

— Тенте,— тип ике ҡулын күтәрҙе. Ҡаршһындағы бәндә бының кейемен ҡапшап сыҡты, бер ни ҙә тапманы. Урал:

— Хәҙер һин ҡоралыңды ырғыт!— тине. Бойһондо был. Пистолет менән бысағын ситкә ташланы. — Һин минең кемлекте беләһеңме?— тип ҡаты һораны Урал. Теге өндәшмәне. — Мин башҡорт. Ошо ерҙең хужаһы. Теләһәм, мин һине баҫҡан ереңә күмеп китә алам. Шул кәрәкме һиңә?

— Юҡ.— Ҡаршыһындағының күҙе аларып китте.

— Юҡ икән, тай бынан. Ҡабаттан күҙемә күренәһе булма!

Икеһе ике яҡҡа боролоп китте. Урал әйләнеп тә ҡарамай аҡрын ғына машинаһына ултырып ҡалаға йүнәлде. Уҙаҡсыһы һеңгәҙәп тигәндәй бер аҙ торғас, ырғытылған ҡоралын эйелеп алды. Шунда ғына шырлыҡтан өсәү сыҡты һәм машинаға инделәр.

Бының барыһын да Сәғит үҙе күрҙе, ә ни һөйләшкәндәрен Урал әйтте.

Башҡорт кешеләре менән ситтән килгән ҡунаҡтар тураһында һүҙ сыҡһа, Сәғит тағы ла, тағы ла бер нәмәне ҡабатлай: "Ҡурҡмағыҙ уларҙан, кәрәк икән ҡаршы сығығыҙ. Тик бергә бер баҫығыҙ. Күмәкләһәләр бер кешене һәр саҡ еңеп була. Үҙегеҙҙе ныҡ, еңеүсе итеп тотоғоҙ. Тегеләр һеҙҙе көс менән еңә алмаһа, власть органдарын һөскөртәсәк. Һәр ерҙә лә беҙҙең кешеләр бар, уларҙы уятығыҙ. Ялынып, аҡса биреп түгел, ә сәменә тейеп. Башҡортто Ҡаф тауынан килгән ҡунаҡ ҡыҫа, ә

һин ҡарап тораһыңмы?— тип. Бирешмәгеҙ, ныҡ булығыҙ. Юҡҡа ғына йырланмай бит: ...”түккән ҡанын, һис бирмәгән башҡорт Уралын”, тип.

Мосолман булығыҙ. Әммә ваһаб түгел, хәнәфи йүнәлеш тотоғоҙ. Ислам рухты нығыта, кешенең рухын таҙарта, шул уҡ ваҡытта ил башлыҡтарын, властағы кешеләрҙе хөрмәт итергә өйрәтә. Бер беребеҙгә хөрмәт менән ҡарайыҡ, күршеңдән дә, бүтәндән дә дошман эҙләмә, уны яманлап һөйләмә...

— Туҡта, Сәғит, нәсихәт уҡый башланың түгелме һуң? Әллә олоғайып бараһыңмы? Өгөт-нәсихәт биреү ололар сифаты бит.— Ошо рәүешле туҡтатты Сәғит үҙен. Шунан уйлап ҡуйҙы. Бәй, сәс кенә түгел, һаҡал-мыйыҡ салланып килә, һаман үҙеңде йәш кеше һанап йөрөргә ярамайҙыр. Сама белеү кәрәк. Йәшлек һәйбәт дәүер, әммә олоғайыу ҙа насар түгел. Һәр осорҙоң үҙ матурлығы, үҙ ғорурлығы бар. Беҙҙең йәшлек балаларҙа сағыла.

Таңһылыу ҙа йөпләп тора ирен ошо фекрҙә. Ул Сәғит ойошторған компаниела юридик хеҙмәтте етәкләй. Оло ҡыҙҙары Наилә атаһының урынбаҫары булып эшләй. Хоҡуҡ институтын тамалап, юрист дипломы алды. Улдары Урал да юрист. Хәҙер тәфтиш идаралығында тәфтишсе. Таңсулпан мәктәптә уҡый, быйыл унынсы синыфта. Кем булыр киләсәктә, уныһын хоҙай белә. Инглиз, немец телдәрендә һин дә мин һөйләшә, ҡытайса әҙерәк һупалай. Әсәһе менән бергә ғәрәп телен өйрәнәләр. Шул уҡ ваҡытта математика, физикаға шәп. “Минең ҡан бит”,— тип ғорурланып ҡуя Сәғит, әммә быны тыштан һиҙҙермәй. Йә күҙ тейеп ҡуйыр.

Кешенең холҡо, фиғеле күп йәһәттән тәрбиә емеше түгел, ә ҡандан бирелгән, быуындан быуынға күсә барған сифаттар. Әммә минең атай-әсәйем күрнекле нәҫелдән, тимәк миңә лә улар кеүек ҙур булыу яҙған тип, ҡул ҡаушырып ултырһаң, йә шайтан ҡотҡоһона бирелеп, яҙыҡ юлға баҫһаң, ҡан йоғонтоһо ғына оло юлға сығара алмаҫ. Нәҫел — башланғыс, башҡаһы кешенең үҙ тырышлығы һәм тәрбиәнән тора. Аллаһ тәғәлә бирәүгә лә ҙур кеше булыуҙы тыймай, тик ошоға үҙең илтифат ит, ти.

Был һүҙҙәрҙе Сәғит балаларына ла, туғандарына ла, яҡын ҡәрҙәш булмаған кешегә лә әйтә. Ошо хәҡиҡәт һәр кешенең күңеленә һеңһен өсөн уларҙы дингә ылыҡтырырға тырыша ул. Ислам ғына ҡотҡара аласаҡ боҙолорға өлгөргән беҙҙең халҡыбыҙҙы, тип һанай ул. Һәр кем ислам юлын тотһа, хәл ҡәҙәренсә уны бүтәндәргә һеңдерергә тырышһа, илебеҙҙе көрсөктән алып сығасаҡбыҙ.

Сәғиттең бүтәндәрҙе дингә әйҙәүе ҡайһы бер махсус хеҙмәттәрҙе һағайтты. Йәнәһе, Чечня һәм унының тирәһендә ҡуйырған ҡанлы ваҡиғаларҙа ислам үҙе ярылып ята. Шуға күрә Башҡортостанда кешеләрҙе исламға өндәү яҡшымы икән? Сәғит уларға һәр саҡ бер нәмәне хәтерләтә: “Һеҙ Чечнялағы ваһһаб мосолмандар менән хәнәфи исламсыларҙы бутамағыҙ. Икеһе ике төрлө маҡсат, икеһе ике төрлө юл тота. Тыштан ғына бер һымаҡ улар. Бисмиллаһ тип эште башлау, Аллаһ әкбәр тип бөтөрөү бер үк. Әммә башҡарғандың йөкмәткеһе бүтән”. Төшөнәме — юҡмылыр ислам тураһында яҙа-йоҙа ғына ишеткән бәндәләр, әммә унының менән артабан һүҙ ҡуйыртмайҙар.

## Дин юлы

Совет дәүерендә кешеләрҙең күңеленә дин үтеп кермәһен өсөн КПСС нимә генә эшләмәне. Мәктәптәрҙә, урта, юғары уҡыу йорттарында ике һүҙҙең береһендә атеизмдың өҫтөнлөгө һөйләнелде, “дин — ул халыҡ өсөн сығарылған опиум” тигәндән башлап мәсет, храмдарҙы емереп, яндырып бөтөүгә тиклем барыһын да эшләнеләр. Совет осоронда тыуған балалар күңеленә дин яҡынламаһын өсөн һәр яҡтан да кәртә ҡуйып бөттөләр.

Әммә элегерәк тыуған кешеләр телдән бер нәмә һөйләһә лә күңеленән барыбер элеккесә ҡалды, тип тә әйтә был турала Сәғит. Унының бабаһы Сәләхетдин ВКП(б), Баш ЦИК ағзаһы булһа ла ғүмер буйы намаҙ уҡыуҙан баш тартманы. Аллағамы, КПСС-ҡамы — ҡайһыһына ныгыраҡ ышанғандыр инде, әммә

тегенеһенән дә, быныһынан да үҙенә, ауылдаштарына кәрәген ала белде.

Сәғиттең дин менән яҡшылап танышыуы Ҡөрьән хаҡында хәҙистәр уҡыуҙан башланды. Бер мәртәбә эшҡыуарлыҡ тураһында китаптар хаҡында һүҙ сыҡты. Карнеги, Маркс китаптары тураһында һөйләшкән саҡта берәү:

— Иң яҡшыһы "Хәҙис"тәрҙең икенсе томында ул,— тине.

Сәғит эҙләп алды шул китапты. Уҡый башланы һәм хайран итте. Эшҡыуарлыҡ тураһында бында бөтәһе лә әйтелгәйне. Ҡайһылайтып уңышлы эшләргә, нисек итеп конкуренттар араһында отолмаҫҡа, ни рәүешле бурыс алырға һәм кәтәсәккә бирергә — барыһы ла бар. Карнегиҙың китабы "Хәҙис"тәргә ҡарағанда ҡатмарлыраҡ һәм урыҡ-һурыҡ яҙылған икән.

Шунан һуң Сәғит "Ҡөрьән Кәримде" ҡулына алды. Ул мәлдә исламдың бөйөк китабы башҡортсаға ла, урыҫсаға ла тәржемә ителеп, баҫылғайны инде. Сәғит үҙенең һорауҙарына ошонда яуап таба, күңеленә ышаныс ала башланы. Эшҡыуарлыҡта Ҡөрьән юлы иң мөбәрәк эштәрҙең береһе икән дә баһа. Эшҡыуарлыҡ кешенең күңеленә ләззәт, бүтәндәргә изгелек килтерһә генә Аллаһ уны хуп күрер һәм мосолмандың ҡылғаны сауаплы булыр, Аллаһ тәғәлә был кешене бәлә-ҡазаларҙан арындырыр, ғүмерен оҙон ҡылыр, йәшәүе ҡыл өҫтөндә ҡалғанда Аллаһ уны үҙе ҡотҡарыр, тиелә ислам тәғлимәттәрендә.

Күрәһең, Аллаһ кешене ҡайһы берҙә ҡылдан нәҙек, ҡылыстан үткер тамуҡ күпере кеүек ерҙән дә үткәреп ала һәм Аллаһ тарафынан бирелгән ғүмерҙең ҡәҙерен нығыраҡ белергә өйрәтә торғандыр.

Аллаһтың ярҙамы менән генә ғазраил ҡулына төшмәй ҡалған мәлдәре булды Сәғиттең.

* * *

Кис, эңер. Сәғит апаһы Зәлифә менән һыйыр эҙләй. Мөстән мал көтөүҙән айырылып ҡалып ашамаһа, тамағы туймай инде. Көн һайын булмаһа ла аҙнаға бер-ике тапҡыр ошолайтып үҙен эҙләтеп теңкәне ҡорота бит. Бүтән һыйыр көтөү менән

бергә ҡайта, ваҡытында һауҙыра, мәшәҡәт тә сығармай, ә был... Ошолай һуҡрана-һуҡрана туғайҙың бер аҡланынан икенсеһенә ыңғайлағап баралар ине, ҡапыл ямғыр яуа башланы. Сәғит башын күтәреп күккә ҡараны. Ҡараңғыланып барған күк йөҙөндә бәләкәс кенә болот бар. Шунан яуа. Ни ике арала ҡалҡҡандыр был болот, яңы ғына аяҙ ине. Шулай уйлап та өлгөрмәне, тирә-йүн сатыр-сотор итеп ҡалды һәм балаларҙың аяҡ осона ғына ҡуш йоҙроҡ дәүмәле утлы шар килеп төштө һәм әкрен генә тәгәрләп китте. Үҙенең артынан ҡара юл һәм төтөн ҡалдырып бара. Шаҡ ҡатҡан балалар урындарынан ҡыбырлау түгел, бер-береһенә ҡарарға ла ҡурҡып, туптан күҙ айырмай тора. Ҡыҙғылт-зәңгәр шар яй ғына тәгәрләп Көйөргәҙе йылғаһына барып төштө һәм һыуҙан боҫ күтәрелде.

Зәлифә алданыраҡ аңына килде.

— Әйҙә,— тине лә йүгерҙе. Сәғит уның артынан ҡалманы. Саҡ ҡына барғайнылар, аяҡ аҫтындағы еүеш бөттө. Бәләкәс болот ямғыры бында ҡағылмаған. Балалар туҙан борҡотоп ҡайтып инһә, һарай янында һыйыр көйшәп тора.

Атай менән әсәйгә апай менән ҡусты ашыҡ-бошоҡ ни булғанын һөйләп бирҙе.

— Алла үҙе һаҡлаған инде һеҙҙе,— тип ҡуйҙы Фәтҡлислам. — Ут йомғағын һеҙгә тигеҙмәгән.

* * *

Йәйҙең аҙағы. Кешеләр бесән эшләп бөтөп бара. Кемдең мөмкинлеге бар сапҡанын арбаға тейәп бер юлы ауылға ташый. Фәтҡлислам улы менән көнө буйы бесән күбәләне лә, кис бер йөк булһа ла ҡайта торһон тип, ат арбаһына тейәнеләр. Мул ғына йөк сыҡты. Юлда бесән таралып китмәһен тип баҫырау баҫтырҙылар. Фәтҡлислам йөк башында, Сәғит ерҙә арҡандың осон арбаға бәйләй. Шул саҡ күҙ ҡойроғо менән генә бейек үлән араһынан нимәнеңдер килеп сыҡҡанын шәйләне был. Абайлабыраҡ ҡараһа, бүреме, этме баҫып тора. Сәғит өндәшә һалды:

— Атай, ана бүре.

Теге ишетмәне шикелле, һаңғырау бит. Һуғыш контузияһынан ҡалған ҡолаҡ ҡатылығы. Сәғит ҡабатлап торманы, ялт итеп йөк башына менеп ултырҙы, ҡулына һәнәк тотто. Теге һөжүм итә ҡалһа тип инде. Атаһы атты ҡыуҙы. Бер аҙ барғас, Фәтҡлислам:

— Киләме?— тип боролоп һораны. Тимәк бая Сәғитте ишеткәнме, әллә үҙе күрҙеме икән януарҙы?

— Эйәреп килә,— тине Сәғит.

Бер аҙ барғас, Фәтҡлислам атты туҡтатты. Шәп-шәп атлаған мал ҡолаҡтарын ҡайсылап, бышҡырып саҡ тора. Сит кейек барлығын ул да һиҙә. Ат туҡтау менән эйәреп килеүсе лә шып ултырып алды.

— Бигерәк ҙур,— тип ҡуйҙы Фәтҡлислам. — Әллә бүре, әллә эт... На!

Ҡабаттан туҡтамайынса ҡайттылар, теге кейек ҡалманы ла, ситкә лә китмәне, атты ла уҙманы. Өҫтәүенә эйәреп ихатаға инде, һарай мөйөшөндә аулаҡ урынға ятты. Бесәнде бушатып бөткәс, Сәғит тегеңә икмәк киҫәге ташлағайны, ашаны.

Хужалар уны ҡыуманы ла, бик үк саҡырманы ла. Әммә иртәгәһенә иртәнсәк ҡараһалар, теге шунда уҡ ята. Фәтҡлислам менән Сәғит йәнә бесәнгә йыйынды. Китер алдынан Сәғит быға ҡалған ашты сығарып биргәйне, ашаны. Атты егеп, ҡапҡаны асҡайнылар, януар ҙа торҙо, быларҙың артынан эйәрҙе. Көнө буйы бесәнселәр янында йөрөнө кейек, кис йөк артынан йәнә эйәреп ҡайтты.

Бесәнде бушатҡас, Фәтҡлислам Сәғиткә:

— Бар әле, фәлән ағайыңды алып кил,— тип ебәрҙе. Килде теге ағай.

— Һин бит һунарсы кеше, бүрене лә күп алдың. Ҡара әле,— тип өндәште быға Фәтҡлислам, — нимә ул бынау януар?

Теге кеше оҙаҡ ҡына текләшеп торҙо һорғолт ҡара кейеккә. Шунан:

— Эт тиер инең, башы ҙур, кәүҙәһе лә эттекенән ҡалҡыураҡ. Бүренән тәпәш, өҫтәүенә ҡойроғо бүренекенән оҙонораҡ. Күҙҙәрендә кешенән ятһыныу бар. Тимәк был эт бүреһе йә

бүре эте. Эт менән бүренең ҡушылдығы. Бындай хәл булғылай. Бүрет бүре һымаҡ аҡыллы, сыҙам, эт кеүек кешенән ҡурҡмай, шул уҡ ваҡытта бүре һымаҡ ҡомһоҙ була. Малыңа ташланһа, барыһын да тамаҡлап бөтмәйенсә туҡтамай. Ә малға ул тейә, бүре бит,— тине. — Айҙа, атайыҡ. Бәләһенән — баш аяҡ.

— Юҡ.— Фәтҡлислам ризалашманы. — Йөрөһөн әле, күҙ күрер.

Сәғит бүретте тамам ҡулға эйәләштерҙе. Бешкән ризыҡ ҡына биреп сей иттән арындырырға тырышты, яйлап сынйырға ла ултыртты. Бүрет яҙмышына күнде булһа кәрәк. Сынйырҙы өҙөп ҡасырға ла маташманы, малға ла теймәне. Эт сифаттары өҫтөнлөк алды шикелле. Тик берәрһенең һыйыр-һарығын ҡыуырға тип һөскөртһәң, ҡыуып ебәрәһе урынға, өйөрөп һиңә килтерер ине. Быныһы инде бүре һыҙаты.

Оҙаҡ йәшәне бүрет Фәтҡлислам менән. Сәғит уға Мөхтәр тип ҡушамат ҡуйҙы. Үҙе Өфөгә киткәс, Мөхтәр хужа менән дуҫлашты. Тегенең менән почтаға ла йөрөнө, ауыл араһында ла артынан эйәрҙе. Үҙ малы бүреткә күнегеп бөтһә лә, бүтәндәрҙеке унан ҡурҡа ине. Күрәһең бүре еҫе һаман сығып торғандыр...

* * *

Хажда Мина тауында шайтан ҡыуғандан һуң шунда уҡ махсус ҡоролған ҡыуышта ятып йоҡланылар. Төндә Сәғит ниндәйҙер хәүефтән уянды. Төш тә күрмәне, шикелле. Һаташманы ла. Тик хәүеф күңелендә торҙо. Тора бара шул тойғо яңыһын уятты, тиҙерәк Мәккәгә ҡайтырға кәрәк.

Сәғит тышҡа сығып йөрөп килде. Күк ап-аяҙ. Ана Етегән, тегендәрәк Кесе етегән. Беҙҙәге һымаҡ шул уҡ йондоҙҙар, тик улар бында байтаҡҡа эре күренә һәм шаҡырайышып, сағыуыраҡ яналар. Ҡайҙа ҡарама, ап-аҡтан ҡыуыштар, улар тирәһендә усаҡтар емелдәшә. Күрәһең, кешеләрҙең ҡайһы береһе йоҡламай, ут янында ултыра...

Хәүефләнерлек бер ни ҙә юҡ һымаҡ. Әммә шул тойғо

китмәй. Сәғит кире ятып ҡараны, йоҡлай алманы. Яҡтыра башлағас, муллалар янына барып, иртәнсәк ҡасан Мәккәгә автобус буласағын белеште.

— Туғыҙҙа,— тинеләр.

Шул ваҡытҡа самалап Сәғит, Таңһылыу менән Таңсулпанды эйәртеп, туҡталышҡа барҙы. Әммә автобус килмәне.

— Автобустың ваҡытын 12-гә күсергәндәр,— тинеләр муллалар.

— Ярар, шунда сығырбыҙ,— тип кире китте Сәғиттәр.

— Ни эшләп ашығаһығыҙ?— Башҡортостандан килгән хажиҙар аптырашты быларға. Яҡын таныштарҙан Гүзәл Ситдиҡовалар бар ине. — Мина тауында тағы бер кис ҡунайыҡ. Башҡа яҡтан килеүселәр менән аралашайыҡ,— тине. Әммә Сәғит тынғы тапманы, күңелдән хәүеф китмәне.

Сәғәт ун икелә лә автобус килмәне.

— Әйҙәгеҙ, оло юлға сығайыҡ. Берәр нәмәгә ултырып китербеҙ әле,— тине Сәғит һәм шул яҡҡа атланы. Уның артынан Әлмәт, Ульяновскийҙан килгән хажиҙар, ә Таңһылыуға 20-ләгән ҡатын-ҡыҙ эйәрҙе. Оло юлда бер автобус туҡтаттылар. Мәккәгә алып барырға булды был, хаҡын әйтте. Килештеләр.

Мәккәгә инер алдынан автобусты һаҡсылар туҡтатты. Ҡалаға керергә махсус рөхсәт кәрәк икән. Автобус шоферының рөхсәте юҡ ине. "Ярар,— тине был. — Ҡаланың икенсе яғынан кереп була. Шунан барайыҡ". Әммә бында ла һаҡ ҡуйылғайны. Тегеләр автобусты индермәү генә түгел, шоферҙы туҡмарға тотондолар. Баҡһаң, рөхсәтһеҙ хажға килеүселәрҙе йөрөтөп, аҡса йыйыу ярамай һәм был ҙур гонаһ һанала, икән. Сәфәрселәр автобустан төштөләр.

— Ярар,— тине Сәғит, ирекһеҙҙән был төркөмгә баш булып алғайны бит инде. — Ҡалаға инәйек тә, бәләкәй машиналарға ултырышып ҡунаҡханаларға таралышырбыҙ.

Сәғит юлсыларҙың икешәр-өсәрен бер машинаға ултыртып оҙатырға тотондо. Бер мәл әйләнеп ҡараһа, ҡатыны, ҡыҙы менән ул ғына ҡалған. Сираттағы машинала үҙҙәре китте. Ҡунаҡханаға урынлашып күп тә үтмәне, уйламаҫтан ямғыр

яуырға тотондо. Эй, яуа икән дә баһа ул бында, беҙҙең яҡта бындай ямғыр булмай. Күнәкләп яуа тип әйтеү генә аҙ, мискәләп түгә. Күктән ауҙарылған һыу ергә һеңеп өлгөрмәйенсә, китте күтәрелеп, бая ғына ҡоп-ҡоро урында тубыҡтан, соҡорсаҡырҙа билдән булды ул. Ҡунаҡхананың беренсе ҡатында иҙән өҫтәнә һыу сыҡты.

Мина тауында ҡалған бүтән хажиҙар бер тәүлектән һуң ғына ҡайта алған. Унда ямғыр касафатҡа әүерелгән. Тауҙан төшкән ямғыр йылғалары әллә күпме таш тәгәрләткән, ҡыуыштарҙы ҡырған, емергән, күмгән. Кемдәр сығып өлгөрмәгән, ҡыуышта мәрхүм булған. Юлдағы күперҙе емергән һәм машиналар хәрәкәте туҡталған. Ишелгән ҡомло һыу кешеләрҙе лә ҡуша йыуған, кемдер шунда мәрхүм ҡалған, икенселәренең тәндәре йәрәхәтләнеп бөткән...

Шуларҙы ишеткәс, Сәғит менән ҡайтыусылар уға рәхмәт уҡыны.

— Һинең һиҙгерлегең ҡотҡарҙы беҙҙе,— тиештеләр.

Сәғиттең хәүефләнеүе бушҡа булмаған икән. Күрәһең, Аллаһ тәғәлә иҫкәрткән уны.

* * *

Себерҙә булды был хәл. Бик ҡаты һыуыҡ ине, өҫтәүенә буранлай. Шул саҡта хәбәр иттеләр:

— Сәғит Фәтклислам улы, нефть ҡыуҙырыу станцияһына һинең килеү кәрәк. Егеттәр турбинаны һүтеүен һүтте, әммә көйләй алмайҙар. Тиҙ арала турбинаны ебәрмәһәк, эш туҡтаясаҡ.

Барырға икән, барырға кәрәк. Сәғит вертолет һорап шылтыратты. "Оса алмайбыҙ, көн насар",— тинеләр. Ул машина менән китергә булды. Себер ҡағиҙәһе буйынса алыҫ юлға ҡаты һыуыҡта бер машинала ғына сығырға ярамай, кәмендә ике машина булырға тейеш. Ял көнө бит. Бер машина ла юҡ. Үҙен йөрөткән шоферҙы эҙләп тапты. Бүтән машинаға кеше юҡ.

— Ярар, әйҙә, барып етербеҙ әле,— тип тәүәкәлләне Сәғит.

КРАЗ автобусы менән киттеләр. Тәүҙә ыңғай ғына барҙылар. Тышта һыуыҡ, машинала йылы. 30-40 саҡрым самаһы үткәс, двигатель шатыр-шотор килде лә һүнде. Сәғит шунда уҡ аңланы. Харап бит: уны юлда төҙәтеү тураһында уйларға ла ярамай. Бер аҙ һүҙһеҙ ултырҙылар. Шофер Сәғиткә ҡарай. “Ни эшләйбеҙ, уйла, шеф”,— ти ине бының ҡарашы.

— Хәҙер тамаҡ туйҙырып алайыҡ та, берәр нәмә уйлап сығарырбыҙ.

Себерҙәге тәртип буйынса шофер машинала һәр саҡ бер нисә консерва, икмәк, боҙолмай торған бүтән ризыҡ йөрөтөргә тейеш.

— Ә минең бер нәмә лә юҡ,— ти был шофер.

— Ярар, юҡ икән юҡ, хәҙер уны яһап алып булмай. Оҙаҡламай ҡараңғы төшәсәк. Ағас ҡырҡып әҙерләп ҡуяйыҡ, ут яғырбыҙ. Бүтәнсә йылынып булмаҫ. Көтөргә ҡала беҙгә, берәр машинаның килеп сығыуын көтөргә ҡала.

— Утын ҡырҡырға минең балта юҡ.

— Эй...— Сәғиткә ҡоро һүгенергә ҡалды. — Әйҙә кедр һындырабыҙ.

Ярар урман эргәлә генә. Әммә ҡоро ҡул менән күпме һындыраһың инде. Ҡосаҡ тултырып килтереп ут төртәләр, уныһы дары кеүек, шунда уҡ гөлтләп яна ла һүнә. Йылыны тойоп та өлгөрөп булмай. Ә һалҡын артҡандан арта, 60 градус тирәһе барҙыр.

Ҡышҡы оҙон төн ағастан ағасҡа йөрөп ботаҡ һындырып, усаҡҡа ташып үтте. Яҡтыра башлағас, Сәғит:

— Әйҙә, запас баллонды яндырайыҡ. Йылыһы ла күберәк, төтөнө лә нығыраҡ сыға,— тип һыуыҡ кабинаны асты. Күҙ алды ҡараңғыланып торҙо ла яҡтырып китте. Ян-яҡтағы ҡар ireп, ер йәшелләнә һымаҡ булды. Сытырлатып йомдо ла күҙҙәрен йәнә асты Сәғит. Тирә яҡ ап-аҡ ҡар. Күҙгә күренә башланы, харап икән минең хәл, тип уйланы. Туңып үлер алдынан кешенең күҙ алдына йәй күренә, тиҙәр. Шул башлана ахырыһы, тип уйлай-уйлай, запас баллонды алыр өсөн автобус ишеген асып өҫкә күтәрелде.

Шул саҡ юлда машина күренде. Быларға табан килә. Сәғит йәнә күҙемә күренәлер, тип уйланы һәм уға ҡаршы йүгермәне. Шофер моғайын машинаны күрмәгәндер, ул да ҡаршы сыҡманы. Әммә юлдан килеүсе ысын машина ине. Артынан икенсеһе, өсөнсөһө пәйҙә булды. Алдағыһы Сәғиттәргә килеп тиңләшкәс, туҡтаны.

— Ни эшләйһегеҙ, ярҙам кәрәкмәйме?— тип һөрәнләгәс кенә Сәғит быларҙың ысын икәнлегенә ышанды.

Килеүселәр аҙаҡтан һөйләне:

— Юлда машинаһы ҡыйрап ултырғандар ғәҙәттә үткенсе машинаға йүгереп сыға. Ә һеҙ урынығыҙҙан да ҡуҙғалманығыҙ. Шуға артабан китергә лә булғайныҡ, хәл белешергә генә туҡтаныҡ.

* * *

Ә был хәл Сәғит әрмелә хеҙмәт иткәндә булды. Ике йылдың бер ярымы үткәйне инде. Сәғиттәрҙе “тревога” буйынса алып сығып киттеләр. Машинала барғанда аңлаттылар эштең асылын. Кушка ҡалаһынан ситтәрәк урынлашҡан частә бер һалдат хеҙмәттәшен атҡан һәм ике магазин патрон менән автомат алып сығып ҡасҡан. Шуны табып, ҡоралһыҙландырырға кәрәк.

Ҡасҡалаҡты тиҙ үк таптылар. Теге ышыҡ ергә боҫҡан да ята.

— Ҡоралыңды ташла! Бирел! Юғиһә юҡ итәсәкбеҙ!— тип ҡысҡырҙылар. Ә был автоматтан атып яуап бирҙе.

— Хәлдәр хөрт,— тине һалдаттарҙың етәксеһе старшина. — Сәғит, һин анауында боҫ. Унда йәшеренергә лә, атырға ла уңайлы. Һин мәргән атаһың бит. Егеттәр, автомат патрондарын Сәғиткә бирегеҙ. Сәғит, һин тегенең иғтибарын үҙеңә ал.

Сәғит ҡушҡанды эшләне. Урынды йәтешләне лә ҡыҫҡа-ҡыҫҡа ғына итеп ҡасҡалаҡҡа ата башланы. Бер магазин бөттө, икенсеһе, өсөнсөһө атылды. Сәғиттең атыуына ҡасҡалаҡ та шундай уҡ яуап ҡайтара. Пулялар һыҙғырып оса, туҙан

борхотоп эргәгә генә ҡаҙала. Бүтән һалдаттар ышыҡҡа йәшенде. Курскиҙан килгән берәү генә Сәғит янында ҡалды.

— Бар, кит. Ни эшләп ятаһың бында!— тип ҡысҡырҙы уға Сәғит.

Теге ҡымшанманы ла.

Оҙаҡламай ҡасҡалаҡ яғынан старшинаның тауышы яңғыраны.

— Сәғит, туҡта! Был әҙер!— Шунан үҙе күренде.

Барып ҡараһалар, ҡасҡалаҡтың сикәһенә генә пуля тейгән. Сәғит бының иғтибарын үҙенә алған арала старшина, йәшеренеп барып, ситтән генә пистолеттан атҡан икән.

Аҙаҡтан уйланы Сәғит. Ҡасҡалаҡ бит уны ла үлтерә ала ине. Ул атҡан пулялар яндан ғына осто бит. Ә тейеп ҡуйһа береһе? Тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте. Өҫтәүенә Курск егете һаңҡылдай:

— Сәғит мине ҡыуалай. Ә мин ята бирәм. Һине ата ҡалһа ҡасҡалаҡ, автоматыңды мин алырмын тип ятам. Мин дә мәргән атам бит. Тик атышырға насип булманы.

— Ах, ҡәһәрең,— тип Сәғит тегеңә ташланды. — Һин минең үлемде теләп яттыңмы?

— Юҡ та инде. Төрлө хәл булыуы ихтимал тип ҡурсалап торҙом. Аллаң һаҡланы бит һине.

Эйе, ана күпме осраҡта Аллаһ ҡотҡарып ҡалды уны үлемесле хәүефтән. Тимәк, ул Аллаһ яратҡан бәндәләрҙең береһе. Ғүмер һораған саҡта Аллаһтан үҙең шуға сәбәп ит, ти бит китап. Тимәк Аллаһ үҙе йәшәргә тырышҡандарҙы йәшәтә. Дөрөҫтөр был. Һәммәһен дә Хоҙайҙан ғына һорап, үҙеңдең йәшәү, яҡшы йәшәүең өсөн һис бер тырышлығың юҡ икән, әрәмтамаҡ итеп ниңә тотһон ерҙә һине Аллаһ? Кешеләрҙе бар иткәндә генә тигеҙ күрә бит Хоҙай, йәшәйештә һәм йәнен ғазраилгә биргәндә түгел. Кеше ер йөҙөнә эш башҡарыу өсөн яратылған. Уйлап, ижад итеп эшләр өсөн. Хеҙмәт өсөн генә булдырылған йән эйәләре бар ул. Әйтәйек, эт, йә ат. Улар кешегә хеҙмәт итә ғүмере буйы. Әҙәм ашатһа, ашай, эшләтһә, эшләй. Әммә уйларға, эште ижади башҡарырға һәләтле түгел. Аллаһ

уларҙың һәммәһен дә: йәнле һәм йәнһеҙ донъяны кешегә хеҙмәткә ҡуйған. Ә кеше Алланың хеҙмәтендә булырға бурыслы. Аллаға ниндәйҙер матди байлыҡ яһап түгел, күңел байлығы, күңел сафлығы, йән ихласлығы менән. Матди байлыҡ кешенең үҙе өсөн кәрәк. Әммә байлыҡ рухты иҙеп, тапап китмәһен. Байлыҡ рухты еңһә, әҙәмдең бар булмышы тәндең ихтыяжын ҡәнәғәтләндереүгә китә. Ә уның сиге юҡ һәм кеше нәфсе ҡолона әүерелә. Шундайҙарҙы тыйыу, иҫкәртеү өсөн Аллаһ кешеләргә әлдән-әле киҫәтеү яһап тора. Ул саҡта ла ҡайһы берәү төшөнмәһә, йәнен ғазраилгә ебәрә.

Кеше оҙаҡ һәм бәхетле йәшәйем тиһә, Аллаһҡа һығынырға һәм ислам ҡанундарын үтәргә бурыслы. Боронғо атай-бабайҙарыбыҙ ҙа бер-береһенә: мосолман булығыҙ, тип өйрәткән.

Исламға дәртләндереү өгөт-нәсихәттән генә тора алмай бит. Бының өсөн матди сығымдар ҙа талап ителә. Сәғит тыуған ауылы Таймаҫта бына тигән мәсет һалдырҙы. Проектын үҙе эшләне, урынын һайланы, һәр ташын, кирбесен тигәндәй ҡулынан үткәрҙе. Тышҡы, эске биҙәленеше ҡайһылай булырға тейешлекте өйрәнеп, шуны тормошҡа ашырҙы. Имамды ла ул үҙе иҫәбенә тота. Исмәғил мәсетенән хәҙер ауыл өҫтөнә аҙан яңғырай. Изге мәлдә изге намаҙға өндәй ул. Мәсет һалырға ауылдашы Байрас Айытбаев менән дәртләнгәйнеләр. Байрас ауыл уҡытыусыһы Миңлеғужаның улы. Нәҫел ебе үрәтник Хәйбуллаға барып тоташа. Тик бергәләп мәсет төҙөү насип булманы. Байрас мәрхүм булып ҡуйҙы. Башлаған эште Сәғит үҙе дауам итте. Ауыл кешеләре, бигерәк тә ҡарттар дәртләндереп торҙо уны быға. Мәсетте һалып бөткәс, уға боронғо олатаһының исемен бирҙе. Исмәғил мәсете тип рәсми йөрөтөлә ул.

Борон борондан Аллаһ йортон мосолмандар үҙ иҫәбенә берәүҙең дә ҡушыуын, хатта дәртләндереүен көтөп тормай, күңел зауығы, намыҫ эше тип аҡыл өлгөрөүе еткәс башҡарған. Мәккәләге иң билдәле мәсеттәр, Мәҙинәләге мәҙрәсәләр, Ер шарының бар ҡитғаһына ла һибелгән Аллаһ йорттары шулай барлыҡҡа килгән. Хоҙайға шөкөр, Башҡортостаныбыҙҙа ла исламдың асылына ҡайтыу йылдан-йыл көсәйә. Яңыраҡ

ҡына Көйөргәҙе районының үҙәге Ермолаев (элекке Ҡурғаҙы) ҡасабаһында тәүге мәсет төҙөлөп бөттө. Шуны асыу тантанаһында булып, шатланып ҡайтты Өфөгә Сәғит. "Көйөргәҙе, Мәләүез, Күгәрсен, Йылайыр яҡтарында иң ҙур, иң мөһабәт, иң матур ҡуш манаралы мәсет булды. Уны һалған Әхәт Ҡотлоәхмәтов, Иршат Аҫылғужин, Шамил Әминов һәм башҡа күп егеттәргә рәхмәт. Улар Аллаһтың рәхмәтен алыу ғына түгел, үҙҙәренең исемен дә мәңгеләштерҙеләр. Хәҙер мин уларға Хажға барып ҡайтыуҙарын теләйем". Хаж юлын үтеү һәм бөйөк Аллаһтың ерҙәге илсеһе Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең эҙҙәренән үтеү, Ҡәғбә ташты күреү, Мәккә менән Мәҙинәләге изге урындарға ғибәҙәт ҡыла алыу — үҙе ҙур бәхет. Сәғит, ҡатыны Таңһылыу һәм ҡыҙы Таңсулпан — өсәүләп 2005 йылда Хажға сәфәр ҡылдылар, сауап йыйҙылар.

## Аҡыл һандығы

Бер телефондан һөйләшкәндә Сәғит хажи шатлығын тыя алмайынса:

— "Таймаҫ ауылы" китабы сыҡты, — тип ҡысҡырып ебәрҙе. Уның ярһыуы миңә лә күсте һәм тиҙерәк китапты ҡулға алғы килде. Китаптың авторы ошо Таймаҫ егете Өлфәт Миңлеәхмәт улы Ҡобағошов. Бик күләмле, ҙур форматлы, зауыҡ менән биҙәлгән, яҡшы ҡағыҙҙа баҫылған бына тигән китап. Эстәлеге тышҡы биҙәлешенә, һис шикһеҙ, торош.

Тышлыҡтың эске яғы:

Ырыуым – Бөрйән,
Ағасым – Имән,
Ҡошом – Бөркөт,
Ораным – Тоҡсаба,
Тамғам – Яғылбай,
Ауылым – Таймаҫ,
Һыуым – Ҡурғаҙы

тип ете әйтем менән асыла. Борон юлда ике кеше осрашһа, ошо әйтемдәрҙе әйтеп танышҡан.

Бына Таймаҫ бөрйәндәре менән беҙ ҙә күрештек. Артабанғы танышыу уларҙың тамғаһының һүрәтләнешен ҡарау һәм: “Боронғо олатайҙарыбыҙ – Бөрйән бей, Бикән бей, Урал бей, Түнәп бей, кенәз Бурансы бей, Башҡортҡа бей, Тимер Ҡорбоға бей, Аллаяр бей, Байһары бей, Йәнһары бей...” тип һанау менән дауам итә. Былары Сәғит һәм бүтән ҡан ҡәрҙәштәренең бик боронғо быуындары. Яҡындары, алда әйткәнебеҙсә, 1812-1814 йылғы Ватан һуғышында йөрөгән Исмәғил (1763 йылда тыуып, 1840 йылда мәрхүм), унан ҡала Сәлимйән (1813 йылғы), Сәлимйәндең улы Фәхретдин (1848 йылда тыуған). Фәхретдиндең 5 балаһы була: Фәхрислам (1895 — 1918), Фәрхиҙа, Ибраһим, Хисаметдин, Сәләхетдин. Алда әйтелгәнсә, Фәтҡлислам менән Хәтифәнән тыуған балалар: Раил, Миңнури, Зәлифә, Рәдифә, Сәғит, Әлмирә.

Раил йәшләй вафат булып ҡуя. Миңнури ҙа оҙаҡ йәшәй алмай.

Зәлифә 1949 йылдың 5 августында донъяға килә. Тәүҙә Күмертауҙа, һуңынан Өфөлә интернат-мәктәптә белем ала. Шунан Таймаҫҡа ҡайта һәм ныҡлап төпләнә. Таймаҫ ауыл советында, “Таймаҫ” совхоҙында ғүмер буйы бухгалтер, баш бухгалтер булып 2004 йылда рәсми ялға сыҡты. Әммә тик кенә ултыра аламы ни инде Зәлифә? Әлеге көндә шәхси эшҡыуар булып, Таймаҫтағы магазиндарҙың эшен етәкләй. Зәлифәнең ире Тунасов Фәрит Ғилметдин улы совхозда ҡорт ҡараны. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы мәрхүм инде ул.

Зәлифә менән Фәриттең улы Фәнил Өфөлә уҡыны, Башҡорт дәүләт университетын бөткәс, Көйөргәҙе районында мәғәриф бүлегендә эшләне, хәҙер ошондағы “Исмәғил” ойшмаһын етәкләй. Фәнилдең ҡатыны Сания махсус урта белем алғандан һуң БДПУ-ла ситтән тороп уҡыуын дауам итә, Таймаҫ КФХ-да икмәк бешереү эштәренә етәкселек итә. Уларҙың ике ҡыҙы бар: Сәриә менән Гөлфиә матур булып үҫеп киләләр.

Фәтҡлислам менән Хәтифәнең дүртенсе балаһы Рәдифә Әлшәйҙә һөнәрселек училищеһында уҡый һәм Федор районындағы Юлдаш ауылы егете Ғиниәт улы Әлим Юлдашбаевҡа

кейәүгә сыға, шул ауылда клуб мөдире, бухгалтер, страховкалаусы булып эшләй. Әлим — зоотехник, ферма мөдире. Уларҙың 1 ҡыҙы, 4 улдары бар. Атай менән әсәй уларҙың барыһына ла яҡшы тәрбиә менән ҡуша һәйбәт белем дә бирергә тырышты.

Рәсимә БДУ-ны тамамланы, хәҙер Әмир улы Ринат Бикҡоловта кейәүҙә.

Заһир — офицер, БДУ-ны тамамлғас Шамил ҡыҙы Албинаны алғайны. Албина ла юғары белемле, Өфөлә Ш. Хоҙайбирҙиндың йорт-музейы директоры. Улар Алһыу исемле ҡыҙ һәм Рәмил тигән ул үҫтерә.

Замир Әлим улы ла офицер. Уның ҡатыны Гүзәл уҡытыусы-логопед. Илгиз тигән улдары үҫеп килә. Салауат ҡалаһында йәшәйҙәр.

Рәдифә менән Әлимдең ҡалған ике улы Фәрит (БДУ-ны тамамлағас) менән Раил Рәсәй армияһында хеҙмәт итәләр.

Сәғит Исмәғилев менән Таңһылыуҙың өс балаһы бар тип әйткәйнек инде. Наилә Башҡорт дәүләт университетының хоҡуҡ институтын тамаланы, хәҙер “Урал” компаниеһында – директор урынбаҫары. Сәғит менән Таңһылыуҙың улдары Урал да юридик белем алды, шул һөнәр буйынса тәфтишселәрҙең баш идаралығында эшләй. Таңсулпан 2008 йылда урта мәктәпте тамамлаясаҡ. Балаларҙың юрист һөнәрен һайлауында, һис шикһеҙ, атай-әсәйҙең йоғонтоһо көслө булды. Хоҡуҡ акттарын яҡшы белгән һәм тормошта ҡуллана алған белгестәргә ни ҡәҙәр ҡытлыҡ икәнен улар күреп йөрөй бит. Өҫтәүенә әсәләре Таңһылыу, Бөрө фармацевтика училищеһын тамамлап, Башфармацияла эшләгәндән һуң, баяғы фекергә инанғас, Башҡорт дәүләт университетының юридик факультетында уҡып сыҡты.

Фәтҡлислам менән Хәтифәнең һуңғы балаһы — Әлмирә тыуған ауылында төпләнеүҙе хуп күрҙе. Ул Таймаҫта “Аҡбуҙат” балалар баҡсаһында тәрбиәсе. Яҡшы хеҙмәте өсөн Башҡортостан Республикаһының мәғәриф алдынғыһы исемен алды. Ире Фәрит улы Хөрмәт Исҡужин балалар баҡсаһында му-

зыкаль тәрбиә бирә. Әлмирә менән Хөрмәттең өс ҡыҙы бар: Лира БДУ-ла уҡый, Элвира, Рәми Ғарипов исемендәге республика башҡорт гимназияһын алтын миҙалға тамамлғас, Өфө дәүләт сәнғәт академияһына уҡырға инде. Ә бәләкәй Сөмбөл әле мәктәптә уҡый. Район һәм төбәк конкурстарында йырсылар араһында еңеүсе булып сыҡты ла инде.

Сәғит Исмәғилевтың ҡатыны Таңһылыуҙың да нәҫеле бөрйәндәр араһында танылған ҡалын нәҫел.

Әлеге Баймаҡ районындағы Ярат ауылын башлап ебәреүсе була уның ете быуын олатаһы. Яраттың улы Әхмәр, Әхмәрҙең улы Юлмөхәммәт, Юлмөхәммәттың улы Ғәйнулла, Ғәйнулланың улы Мөхәмәҙиә, Мөхәмәҙиәнең улы Абдулхалиҡ, Абдулхалиҡтың улы Исмәғил.

Исмәғил 1911 йылда Яратта тыуған. Бөйөк Ватан һуғышының уртаһында ҡатнаша, иҫән-һау еңеү менән ҡайта, алтын йыуыуҙа эшләй. 1959 йылда Йылайыр районының Юлдыбай ауылына күсеп төпләнәләр. Балаларының күбеһе ошонда донъяға килә. Күп йылдар Юлдыбай урман хужалығында эшләй.

Исмәғилдең ҡатыны Зәйнәп Шаһисолтан ҡыҙы Вәлиева ла 1911 йылда тыуған. Ауылы әлеге Баймаҡ районының Ҡыуат ауылы. Ул да Юлдыбай урман хужалығында пенсияға сыҡҡансы эшләй. Әле ул иҫән-һау, хоҙай ғүмерен бирһен.

Исмәғил менән Зәйнәп 6 балаға ғүмер бирә. Шуларҙың олоһо Миңәиш 1947 йылда тыуа, унан ҡала Мөхәммәт 1950 йылғы. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, икеһе лә мәрхүм инде. Миңәиштең 3 ҡыҙынан хәҙер 9 ейән, ейәнсәре бар. Улар Баймаҡ һәм Иглин районында торалар. Мөхәмәммәттең ике ҡыҙы Гөлнара менән Регина — икеһе лә медицина институтын тамамланылар. Гөлнара 9 һәм 1 йәшлек ике ул үҫтерә.

Исмәғил менән Зәйнәптең өлкән ҡыҙҙары Көнһылыу — врач, күп йылдар участка докторы булды. Хәҙер пенсияла. Ире Хисмәтулла Йәнәкәев Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры оркестрында эшләне. Өфө дәүләт сәнғәт академияһын тамамлағас, улдары Вадим атаһының юлын дауам иттерә — ор-

кестрҙа уйнай. Уның ҡатыны Лилиә Өфө иҡтисад һәм сервис академияһында уҡыны, хәҙер иҡтисадсы булып эшләй.

Таңһылыуҙың өсөнсө бер туған ағаһы Ғәли 1955 йылғы, ҡатыны Рәйсә менән Юлдыбайҙа йәшәйҙәр.

Исмәғил менән Зәйнәптең төпсөк балаһы Рауза 1962 йылда тыуған. Апаһына эйәреп Бөрө фармацевтика училищеһында уҡығайны, яҙмышын да шул ҡала менән бәйләне. Рауզаның уҡыған һайын уҡығыһы килде. Мәскәү иҡтисад институтын тамамлап, иҡтисадсы һөнәрен алды, Бөрө социаль-педагогия академияһында психолог серҙәрен өйрәнде, Рәсәй дәүләт социаль университетын бөтөп, юрист булды. Әле Бөрө ҡалаһында Рәсәй пенсия фондының идаралыҡ начальнигы. Ире Заһит Зөфәр улы Шәйхелисламов Өфө нефть институтын тамамлағайны. Күп йылдар Яғыулыҡ келәте директоры булды. Хәҙер Силантьев ауыл советында хакимиәт башлығы. Рауза менән Зөфәрҙең ике балаһы бар. Марат Санкт-Петербург университетын бөтөп, шунда эшләп йөрөй. Бәләкәй улдары Ринат ошо университетта белем ала.

## Ғилемдең сиге юҡ

“Таймаҫ ауылы” китабына баш һүҙҙә: “Бисмиллаһир рахманир рахим! Хөрмәтле уҡыусы! Ата-бабаларыбыҙ беҙгә ерен, иман, тел, йолаларын һаҡлап ҡалдырған. Беҙҙән һуң килгәндәр ҙә иманлы булып, ошо ерҙе, телде, йолаларыбыҙҙы һаҡларҙар, иншалла. Был китаптағы күпселек документтар, эҙләнеүҙәр, тарихи факттар Өлфәт Миңлеәхмәт улы Ҡобағошовтың тырышлығы емеше. Материалдар туплауға, китап сығарыу сығымдарын ҡаплауға мин ҙур теләк менән ҡушылдым. Быға тиклем мин 30-ҙан ашыу башҡорт мәктәптәре өсөн дәреслек, башҡорт халҡының тарихи китаптарын сығарыуға ярҙам иткәйнем. Ә был китап минең өсөн иң ҡәҙерлеһе... Ошо китап ғилемгә өйрәнеү нигеҙенең бер ташы булһа ине. Аҡ бәхеттәр һиңә, иманлы уҡыусы!”— тип яҙған Сәғит хажи Исмәғилев.

Китап ошо яҡта йәшәгән Бөрйән кешеләренең тарихын бик борондан башлап һөйләй һәм бөгөнгө көнгә тиклем килеп етә. Уның тағы бер ҙур әһәмиәте шунда: китап Таймаҫ менән генә сикләнмәй Көйөргәҙе, Юшатыр һыуын һыулаған һәм бөгөнгө Көйөргәҙе районына ҡараған башҡорт ауылдары хаҡында мәғлүмәт бирә. Уларҙың байтағы быҒаса ташҡа баҫылмаған.

Һәр китаптың үҙ урыны, үҙ әһәмиәте, үҙ дәрәжәһе бар. Ә барыһын бергә туплаһаң, бик ҙур аҡыл һандығы хасил булыр ине. Сәғит хажи Исмәғилев сығарышҡан 36 китапты уҡып сыҡһа, башҡорт тарихына, башҡорттоң бөгөнгөһөнә бөтөнләй икенсе күҙлек аша өр яңы ҡараш ташлаясаҡ кеше. Ана шуға өлгәшергә тырыша ла инде Исмәғилев.

Ул сығарған беренсе китап баҙар иҡтисады буйынса аңлатмалы һүҙлек 90-сы йылдарҙың иң башында сыҡҡан. Маҡсат — баҙар һәм уның шарттары хаҡында бер ни ҙә белмәгән халыҡҡа тәүге төшөнсәләрҙе аңлатыу. Унан һуң 20-се гимназия янында ойошторолған ғилми үҙәк әҙерләгән китаптар. Тарих, география, тәбиғәт, математика, физика, астрономия буйынса башҡорттар өсөн өҫтәлмә әсбаптар.

Башҡорттоң боронғо тарихына ҡағылышлы Морат Аджиҙың “Полынь половецкого поля”, Америка Ҡушма Штаттары ғалимы Данеллиҙың “Завоевание Башкирии Россией” кеүек монументаль хеҙмәттәр. “Ошо китаптарҙы халыҡҡа еткереп, беҙ Рәсәйҙең тарихы Мәскәү кенәзлегенән генә башланмай, уға тиклем дә был яҡта күп кешеләр йәшәгән һәм уларҙың бөйөк үткәне, ҡаҙанышлы юлы бар, тимәксе булдыҡ.— ти был хаҡта Сәғит хажи. — Европала нисектер, белмәйем, һәр хәлдә бөгөнгө Көнбайыш Рәсәй, Урал өлкәләрендә беренсе булып ҡорос ҡойоусы, май шәмен уйлап табыусы — башҡорт кешеһе булған. Ә был турала мәктәптәрҙә, вузда уҡытылған “Рәсәй тарихы” өндәшмәй. Әллә белмәй, әллә юрый әйтмәй. Шуға сығарабыҙ беҙ тарих китаптарын. Халыҡ үҙ үткәнен белергә һәм уның дөрөҫөн белергә тейеш”.

Исмәғилевтың ярҙамы менән донъя күргән китаптар араһында Салауат Ғәлләмовтың хеҙмәттәре. Байтаҡ улар: “Баш-

корды", "Башкорды от Гильгамыша до Заратустры", "Башкордская философия" I, II, III тома" һәм башҡалар. Яңыраҡ ҡына ул "Математика у башкордов и индогерманцев" тигән ҡулъяҙмаһын тамамлаған. Сәғит Исмәғилев уны сығарыу хәстәрен күреп тә йөрөй. "Салауат Ғәлләмов — башҡорттоң бөйөк ғалимы. Харезми, Вәлиди кеүектәр рәтендә ул. Бөгөн уның дәрәжәһендәгеләр юҡ. Шуға ғалимдың китаптарын сығарыу ғына түгел, уға махсус стипендия булдырасаҡбыҙ әле беҙ",— ти Сәғит хажи.

## Тормош мәғәнәһе

Башҡортостандың Президенты М.Рәхимов менән әңгәмәләрҙең береһендә ошо юлдарҙың авторы унан үҙ ауылына газ үткәреүҙе һорап:

— Зинһар, яңылыш аңламағыҙ. Үҙ ауылына ярҙамлашып, туған-тыумасаһына башҡаларҙан еңелерәк шарт тыуҙырырға йөрөй икән, тип уйламағыҙ,— тине.

— Әгәр ауылыңа ярҙам итергә уйламаһаң, мин һине эшһеҙлектә ғәйепләр инем,— тине Президент. — Үҙ ауылыңды ла ҡайғырта алмаһаң, республика тураһында хәстәрләй алаһыңмы ни һин? Әйҙә үткәрегеҙ газ,— тип документҡа ҡул ҡуйҙы.

Президенттың ошо һүҙе беҙҙең бөтәбеҙгә лә оло һабаҡ һәм өлгө. Һәр ауылдың үҙенең күҙ терәп торған, юғары даирәлә йөрөгән кешеһе бар. Улар үҙенең бәләкәй тыуған иле тураһында хәстәрлек күрһә, бар ауыл да тын алып ебәрер, киренән аяҡҡа баҫыр ине, моғайын. Бөгөн ауыл ерендә йәшәгәндәргә бик ҡыйын. Айырыуса башҡорт кешеләренә ауыр. Алдараҡ әйтелгәнсә, улар меңәр йыл хәрби булғанлыҡтары арҡаһында капитализм шарттарында йәшәүгә яраҡһыҙҙар. Илдә иғлан ителгән баҙар шарттарының инеүенә егерме йыл үтһә лә, беҙҙең ауыл кешеләре заман иҡтисадына саҡ аҙмы-күпме күнегә башланы. Ошо ваҡытта ярҙам кәрәк тә инде уларға. Сәғит Исмәғилев ауылдаштарына үҙенсә ярҙам итә. Таймаҫта ул эш

урындары булдыра. Тәүҙә бында икмәк бешереүҙе яйға һалдылар. Бик тәмле икмәк бешерәләр Таймаҫта. Ауыл халҡы өсөн генә түгел, күршеләргә лә етә. Етештереүҙе тағы ла арттырырға ниәтләнәләр әле.

Таймаҫ өсөн икенсе яңылыҡ — ауылдан Өфөгә эсәр һыу оҙатыу булды. "Гәлсәр һыу " тип исемләнгән ризыҡ бик күптәрҙең күңеленә хуш килде.

Хәҙер Сәғит хажи Таймаҫҡа Һарытау өлкәһенән ит, йөн тоҡомло һарыҡтар килтереү эше менән йөрөй. Элекке ташландыҡ ҡураларҙы файҙаланып һарыҡ үрсетеүҙе юлға һалырға ниәтләй. Беҙ күреп өйрәнгән һарыҡ түгел икән былар. Һуғым ите 50-70 килограмға етә, ти. Өҫтәүенә йөндө лә мул бирә. Көйөргәҙе яҡтарында борон-борондан һарыҡты күп аҫырағандар. Был яҡтың тәбиғәте ҡулай уға.

Ошо хәстәрлекте күргән ауыл кешеләре, әлбиттә, рәхмәтле уға. Көйөргәҙе районының башлығы Әхәт Ҡотлоәхмәтов та, Таймаҫ етәкселәре лә Сәғит хажиҙың һүҙенә ҡолаҡ һалып, әйткәнен тыңлап, ҡулға-ҡул тотошоп донъя көтәләр.

Нимә ул эшҡыуарлыҡ? Быны һәр төрлө аңлатырға була. Иң киң мәғәнәһе, моғайын, йәшәү рәүешелер. Эшҡыуарлыҡҡа тотонған кеше, күҙе тоноп, тик аҡса артынан ғына йүгерһә, хәле уның харап. Күп аҡса ла йыйыуы ихтимал, сикһеҙ байлығы ла булыр, балда, майҙа йөҙөр, бәлки. Тик уның күңеле буш, ә күҙ урынында талир (доллар башҡортса шулай әйтелә) тәңкә торор.

Сәғит хажи ҙа бер тинде икәү итергә тырыша. Әммә килемде ҡормап алып, ҡосаҡлап ултырмай. Уны эште артабан йәйелдереүгә, кешеләргә хеҙмәт урыны яһарға, эш хаҡы алыуға мөмкинлеккә йүнәлтә. Уның компаниеһында эшләгән кешеләр һәр яҡтан башҡаларҙан өҫтөн торһон, тип ҡуя мәсьәләне. Тик ошолай ғына үҙеңде, тирә-яҡтағы кешеләрҙе, ауылыңды, республиканы күтәреп була. Байлыҡ байлыҡты тыуҙыра, фәҡирлек фәҡирлеккә илтә, тиҙәр. Башҡортостан бай булһа, уның кешеләре лә иркен йәшәр, белемле, күтәренке күңелле булыр. Байлыҡты бит гүргә алып китмәйҙәр, барыһы

ла ерҙә ҡала. Тик берәүҙәр уны халыҡты миктәндереү өсөн, икенселәр — бөгөлгән билен яҙыу өсөн тотона. Кеше хеҙмәте менән тыуған муллыҡ кешенең тормошон матурлау өсөн тотонолорға тейеш, тип һанай Сәғит хажи.

## Йомғаҡлау урынына

Ишек асылды, бүлмәгә ике кеше инде. Сәсенә лә, килешле генә һаҡал-мыйығына ла сал төшкән оҙон буйлы Сәғит хажи аяғүрә баҫып ҡаршы алды уларҙы. Инеүселәр зауыҡ менән кейенгән, әммә хәҙер бик күптәрҙә күренгән галстук таҡмаған. Шуға ҡарап, дини кешеләр икән, тип һығымталаны хужа. Ҡуш услап күрешергә ҡулдарын һонған берәүһе:

— Төркиәнәнмен. Ямырҙа бей исемем. Ямырҙа хәлфә,— тине.

Икенсеһе:

— Мәскәүҙән мин, Рәсәй мосолмандары өсөн сығарылған журнал мөхәрриремен,— тип таныштырҙы.

Иҫәнлек-һаулыҡ алышҡас, ҡунаҡтар төп һүҙгә күсте:

— Мосолмандар йәшәгән Рәсәй төбәктәрендә, шул иҫәптән Башҡортостанда, мөслимдәр өсөн динебеҙ хаҡында мәғлүмәт сығанаҡтары етешмәүен беләбеҙ. Һеҙ ҙә быны инҡар итмәçһегеҙ.

— Дөрөç әйтәһегеҙ, әммә был эш менән туранан-тура шөғөлләнгән ике диниә назараты, ике мөфти бар бит Өфөлә. Уларҙы күрергә кәрәккәндер һеҙгә. Мин бит, хажи булһам да, бары эшҡыуар ғына.

— Үҙегеҙҙе кәмһетергә тырышмағыҙ. Быны Аллаһ хуп күрмәç. Беҙ кемгә килгәнебеҙҙе беләбеҙ. Башҡортостан мөслимдәре генә түгел, бүтән заттар араһында ла дәрәжәгеҙ бик юғары икәнде белеп килдек,— тине төрөк мосафиры.

— Сәғит хажи,— тип өндәште Мәскәү ҡунағы. — Был китапты һеҙ сығарҙығыҙмы?— Ул “Намаҙ тәртиптәре” тигән китапты күрһәтте .

— Эйе. Ҡатыным Таңһылыу хажиә менән икәү яҙҙыҡ.

— Бик хуп. Былдай китапты яҙған кеше беҙгә кинәнеп ярҙам итер тибеҙ. Беҙ дөп-дөрөҫ килгәнбеҙ.

Әңгәмәселәрҙең һүҙе беректе.

## Халыҡ әйтһә, хаҡ әйтә

Сәғит хажи Фәтҡлислам улы Исмәғилевтың эшләгән эше артҡан һайын исеме лә йыраҡ-йыраҡтарға яңғырай һәм билдәлелек ала бара. Үҙенең быға бер ҙә иҫе китмәй, шан-шөһрәткә һалҡын ҡарай ул. Изгелек эшлә лә һыуға һал, халыҡ белер, халыҡ белмәһә, балыҡ белер тигәндән сығып ҡора ул үҙ тәртибен.

Уның үҙен күреп-белгән, үҙен булмаһа эшен белгән кешеләр йәмәғәтселек алдында рәхмәт әйтә, иҫән-һаулыҡ, уңыштар теләй. Ошонан да ҙурыраҡ баһаны күтәреү лә ҡыйын. Бер рәхмәт мең бәләнән ҡотҡарыр тигән боронғоларҙың һүҙе бар. Рәхмәт киң мәғлүмәт саралары аша яңғырай икән, йәмәғәтселек фекере була ул. Гәзит, журнал биттәрендә, телевидение һәм радиола Сәғит хажи тураһында тиҫтәләгән мәҡәлә, интервью, тапшырыу донъя күрҙе. Уларҙың һәр береһендә лә эшҡыуарҙың донъяға ҡарашы, башҡарған эшен баһалау һәм киләсәккә уй-хыялдары сағыла.

Сәғит хажи Исмәғилевтың хеҙмәтен бүтән төрлө баһалау ҙа бар. Былары дәүләт наградалары, Рәсәй, Башҡортостан хужалыҡтарының ведомстволар етәкселәре биргән бүләктәр. Икенсе төрлө әйткәндә, уның хеҙмәтен рәсми таныу.

Халыҡ әйтһә, хаҡ әйтә, тиҙәр. Йәмәғәтселек һәм рәсми баһаларҙы бергә халыҡ ҡуйған билдә тип атарға тулы хоҡуҡ бар. Түбәндә төрлө йылдарҙа төрлө телдәрҙә сыҡҡан матбуғат биттәренән өҙөмтәләр килтерәбеҙ һәм ҡайһы бер наградаларҙың документарын тәҡдим итәбеҙ (143, 144-се биттәрҙә).

## Иманға юл

*изгелек һәм мәрхәмәтлек менән уны һәр кем үҙе һала*

«Бөтәһе лә Алла ихтыярында!» — тине Яңы һәм Иҫке Таймаҫ ауылдары аҡһаҡалдары уҙған шәмбелә тау битләүендә ҡалҡып сыҡҡан күркәм мәсеткә йыйылғас.

Ошо мәсетте асыу район әһәмиәтендәге байрамға әүерелде. Тантанала ҡатнашыусыларҙың күпселеге билдәләгәнсә, был байрам да, шул уҡ ваҡытта Аллаһы тәғәләбеҙҙең теләк-ҡөҙрәтен сағылдырған изге билдә, хәйерле эш тә ул.

— Беҙҙең республикала бөгөн боронғо рухи ғөрөф-ғәҙәттәрҙе һаҡлап ҡалыу, аяҡҡа баҫтырыу, мосолман һәм христиан дине әһелдәренең гуманистик идеалдарын нығытыу өсөн етәкселек ҙур тырышлыҡ һала, — тине А. Й. Ҡотлоәхмәтов ҡотлау телмәрендә. Ул мәсет төҙөүҙә башлап йөрөүсегә һәм унда туранан-тура ҡатнашыусыларға, шулай уҡ район хакимиәтенән яңы мәсеткә бүләк тапшырыусыларға рәхмәт белдерҙе.

— Яҡташтарымдың мәсеткә йөрөүе, күптәрҙең дингә мөнәсәбәтен ыңғай яҡҡа үҙгәртер, уларҙы ыңғай эштәргә әйҙәр, гонаһтарҙан һаҡлар, тип уйлайым, — тине Сәғит Фәтхелислам улы, таймаҫтарға мөрәжәғәт итеп. Мәсет төҙөшкән өсөн рәхмәт йөҙөнән яҡташтары уға аҡ елән һәм изге «Ҡөрьән» китабын бүләк итте.

**Г. НИКИТИН.**

*(“Көйөргәҙе” гәзите, №78, 6 июль, 2004 й.)*

## Иман йорто — изге урын

Ауылдың уртаһында ҡалҡып сыҡҡан күркәм мәсет әллә ҡайҙан күренеп, манараһы менән балҡып ултыра. Хәҙер унһыҙ Таймаҫты күҙ алдына ла килтереп булмай.

һуңғы йылдарҙа ауылдарға иман ҡайта. Элек емереп ташланған мәсеттәр яңынан тергеҙелә. Көйөргәҙе районының Таймаҫ ауылында ла төҙөлдө Иман йорто. Ҡарап торһаң, был ваҡиғаның шаҡ ҡатырлыҡ бер нәмәһе лә юҡ кеүек. Тик уның район йәки ауыл ҡаҙнаһы иҫәбенә төҙөлмәүен, ә Таймаҫтың күренекле эшҡыуары "Исмәғил" акционерҙар йәмғиәте генераль директоры Сәғит Фәтклислам улы Исмәғилевтең тырышлығы һәм көсө менән башҡарылыуын әйткәндә, һис шикһеҙ, һоҡланыуға һәм маҡтауға лайыҡ. Һәр эшҡыуар, хатта шундай изге эш өсөн булһа ла, үҙ кеҫәһенән был тиклем аҡсаны сығарып бара һалмай. Ә Сәғит Исмәғилев үҙенең изге ғәмәлен мәсет тышына яҙылған таҡтаташта асыҡ сағылдырған. Унда шундай һүҙҙәр бар: "Ата-бабаларыбыҙ, олатай-атайҙарыбыҙ, өләсәйҙәребеҙ, әхирәткә киткән барлыҡ ауылдаштарымдың яҡты иҫтәлегенә, ауылыбыҙға иман ҡайтһын, халҡыбыҙҙың рухы күтәрелһен, тигән изге ниәттә һалдырҙым был Алла йортон".

Мәсет асыу тантанаһына Башҡортостан Диниә назараты рәйесе Нурмөхәмәт хәҙрәт Ниғмәтуллин, Сөләймән хәҙрәт, Күмертауҙан Салауат хәҙрәт, Көйөргәҙе районы хакимиәте башлығы Әхәт Ҡотлоәхмәтов, һуғыш һәм хеҙмәт, матбуғат ветераны Мостафа Солтанов һәм башҡа ҡунаҡтар килгәйне. Өфөнән шулай уҡ Сәғит Исмәғилевтең дуҫтары, "Башҡортостан" киностудияһы директоры Рәйес Исмәғилев, матбуғат, нәшриәт һәм полиграфия эштәре буйынса идаралыҡ начальнигы урынбаҫары Фәнил Ҡоҙаҡаев, Көйөргәҙенән сыҡҡан йәнә бер күренекле эшҡыуар, төҙөлөш компанияһы директоры Иршат Аҫылғужин, мәсетте төҙөү эшен етәкләүсе Көйөргәҙе эшҡыуары Рафаэль Ҡужаҡаевтар мөһим ваҡиғаның шатлығын уртаҡлашыуҙа ҡатнашты. Таймаҫтың күренекле кешеләре, фән докторы Илдус Ибраһимов, скульптор Өлфәт Ҡобағошов, ошо ауыл мәктәбен тамамлаған шағирә һәм журналист Зөһрә Ҡотлогилдина, шағир Нияз Мәһәҙиев был тамашаның ҡунаҡтары булды.

Ҡунаҡтар тиһәк тә, мәсет асыу тантанаһына йыйылған һәр кем уны йыһазлау буйынса булдыра алғанса бүләк, хәйер-са-

ҙаҡа тотоп килгәйне. Ете-һигеҙ келәм шунда уҡ мәсет иҙәненә түшәлде. Нурмөхәмәт хәҙрәт, халыҡ алдындағы фәһемле вәғәзенән һуң, ауыл халҡын өйлә намаҙына саҡырҙы, намаҙ уҡыу тәртибен төшөндөрҙө. Киностудия вәкилдәре лә был иҫтәлекле ваҡиға тураһында фильм төшөрҙө.

— Етмеш йәшкә етеп, беренсе тапҡыр күреп торабыҙ мәсетте. Иман йортона йөрөй башлаһа, бәлки ҡайһы бер кешеләр хәмер эсеүен ташлар, — тине Шәһүрә Мәһәҙиева инәй һәм мәсет тәҙрәләренә ҡорған өсөн 16 метр селтәр бүләк итте.

— Егерме өс йыл Таймаҫта йәшәйбеҙ, — тине Хәмит Назаров, — милләтебеҙ ҡаҙаҡ булһа ла, динебеҙ бер. Минең бөтә балаларым ошонда уҡып кеше булды. — Хәмит ағай ҙа ғаиләһе исеменән келәм тапшырҙы.

Халыҡ араһынан һәр кемдең сығыш яһарға, әйтер һүҙен еткерергә теләүенән кешеләрҙең иманға һыуһағанын күрергә мөмкин ине. Уҡытыусы Гөлләрә Әлмөхәмәтова, уның Өфөнән килгән ҡоҙағыйы Кәүсәриә Байбурина, Ғариф Уразбаев, ҡыуанæыслы хәбәрҙе ишетеп, Күмертауҙан килгән Зөбәржәт Бикмаева һәм башҡалар сығыш яһап, Сәғит Исмәғилевкә рәхмәттәрен еткерҙе, мөнәжәттәр, ҡобайырҙар әйтте.

Тағы ла шуны билдәләп китергә кәрәк: Сәғит Исмәғилевтең ғаиләһе лә иман юлына баҫҡан. Ҡатыны Таңһылыу ханым менән ун бер йәшлек ҡыҙы Таңсулпан мәктәптә уҡыусы балалар өсөн үҙ өйҙәрендә дин дәрестәре ойоштарған. Бәләкәс кенә ҡала ҡыҙыҡайының ауыл халҡы алдында сүрәләрҙе ишеттереүенә оло йәштәге күп кенә кешеләр ҙә һоҡланып ҡараны. Ул быйыл Ҡөрьән уҡыусылар конкурсында ҡатнашып, призлы урын да алған.

— Ҡөрьәнде өйрәнергә беҙҙең өйгә хатта рус ҡыҙҙары ла ихлас йөрөй, — ти ҡыҙыҡай, әхирәттәре хаҡында һөйләп. Киләсәктә Исмәғилевтәр хажға барырға ла ниәтләй.

— Иншалла, киләсәктә был изге йортта ауыл халҡы яңы тыуған сабыйҙарына исем ҡушыу тантаналарын да үткәрер, өйләнешкән йәштәргә никах уҡытылыр, армияға китер алды-

нан егеттәр ошонда фатиха алыр, юлға сыҡҡандар сәфәре уңышлы булһын өсөн хәйер-саҙаҡа бирер. Мәсет күңелебеҙҙең изге урынына әйләнер, — тине Нурмөхәмәт хәҙрәт.

Амин, шулай булһын!

Артабан инде мәсеттең яҙмышы, уны ҡарау, тәрбиәләп тотоу — ауыл йәмғиәтенең бурысы. Газ, электр, һыу һәм башҡа коммуналь мәсьәләләрҙе хәл итеү, мәктәп уҡыусылары, ауыл халҡы ярҙамында мәсеттең тирә-яғына ағастар ултыртыу, сәскәләр үҫтереү кеүек эштәрҙе лә атҡарып сығаһы бар. Иң мөһиме мәсет төҙөлгән, ҡалганы үҙ сираты менән башҡарылыр, тигән өмөттәбеҙ.

Һәйбәт эш бүтәндәргә лә өлгө булып тора. Сәғит Исмәғилевтең изге ғәмәлен күреп, Көйөргәҙенең икенсе эшҡыуары Иршат Аҫылғужин да мәсет төҙөргә ҡарар итә.

Афариндан башҡа ни әйтәһең. Кемдәрҙер үҙ кеҫәләрен ҡайғыртып, ҡаланан ситтә хан һарайҙары төҙөп ятҡанда был эшҡыуарҙарҙың изге ниәттәренә рәхмәт уҡырға ғына ҡала.

**З. МӘҺӘҘИЕВА.**

*(“Башҡортостан” гәзите, №171, 4 сентябрь, 2004 й.)*

## Изгелектә — ҡот, бәрәкәт

Ирмен тигән ир уҙамандары фани донъялыҡта ул үҫтерергә, ағас ултыртырға, өй һалырға тейеш, тиҙәр. Борон-борондан хәллерәктәре мәсет тә һалдырған.

Ошо йолаларға әле лә тоғро ир аҫылдары бар. Шуларҙың береһе — күренекле эшҡыуар Сәғит Фәтклислам улы Исмәғилев. Исмәғил мәсете — Көйөргәҙе районындағы (Күмертауҙағын иҫәпкә алмағанда) тәүге мәсет — хәҙер ауыл халҡы өсөн изге урынға әйләнде. Ә бит заманында Диҡҡәт Бураҡаев тыуып үҫкән бәләкәй генә күрше Үрге Мотал ауылында бер түгел, өс мәсет булған, тиҙәр.

Иман йорто асылғас, иман юлына баҫыусылар ҙа ишәйгән. Йома намаҙына килеүселәр араһында оло йәштәге инәй-бабайҙар менән бер рәттән мәктәп уҡыусылары ла күренә. Мәҫәлән, X кластан Илдар Ишмөхәмәтов сүрәләрҙе моңло итеп көйләп уҡыуы, ғәрәп һүҙҙәрен дөрөҫ әйтеүе менән өлкәндәрҙе лә һоҡландыра. Ун бер йәшендә "Мосолман календары"нан ғәрәпсә яҙмаларҙың аҫтына бирелгән башҡортса ауҙармаларын бер-береһе менән сағыштырып үҙаллы өйрәнә башлаған малай, мәктәптә ғәрәп теле түңәрәге асылғас, шунда яҙыла. Хәҙер өсөнсө йыл инде шөғөлләнеп, күп сүрәләрҙе, аяттарҙы яттан белә. Ауылда мәсет төҙөлә башлағас, изге ғәмәлгә үҙ өлөшөн индерергә тырышып, ҡулынан килгәнсә ярҙам итә. Әле бына изге йортҡа намаҙға йөрөй.

Шулай итеп, ауылда быға тиклем һәр кем үҙ алдына, үҙенсә генә өйөндә дин ғәмәлдәрен башҡарған инәйҙәр, бабайҙар мәсеткә бергәләшеп йыйылыша, ил-йортҡа именлек-татыулыҡ теләп, доғалар ҡыла.

Әлбиттә, мәсет һалдырыу бер ғәмәл булһа, уның артабан һәйбәт эшләүен тәьмин итеү, мулла табыу, әгәр ситтән саҡырылһалар, йәшәү шарттарын булдырыу — урындағы кешеләрҙең хәстәрлектәре. Бындай ойоштороу эштәре — улар ҡарамағында.

— Бөтәһе лә бер көндә генә хәл ителәһе мәсьәлә түгел. Яйлап барыһы ла үҙ урынына ултырыр, ваҡ мәшәҡәттәр яйға һалыныр. Бөгөн мәсет асылыу менән, бөтә ауыл халҡы эркелешеп йома намаҙына йөрөр, тип уйлау ҙа бер ҡатлылыҡ булыр,— ти Сәғит Исмәғилев. — Йылдар буйына дингә ҡаршы алып барылған эш үҙенең эҙемтәләрен бирмәй ҡалманы. Әммә тотош ауылда бер иманлы кеше мәсеткә йөрөһә лә, мин, маҡсатыма өлгәштем, тип әйтә алыр инем. Шөкөр, Таймаҫта 40-50 кеше, иман юлына баҫып, мәсеткә йөрөй башлаған.

Дин тотҡан кешенең өйөндә, ғаиләһендә тәртип тә, әҙәп тә, тәрбиә лә булыр. Мосолманды һуңғы юлға оҙатҡанда, сабыйға

исем ҡушҡанда, яңы өйләнешкән йәштәргә никах уҡығанда рәт-сиратын белеүселәр өлкән быуын араһында ла бөтөп барған саҡта мәсеттең төҙөлөүе һәйбәт, әлбиттә.

Исмәғилевтарҙың ғаиләһе лә иман юлында. Ҡатыны Таңһылыу ханым ҡыҙы Таңсулпандың йәштәштәре өсөн өйҙәрендә дин дәрестәре ойошторған. Унда башҡорт, татар ҡыҙҙары ғына түгел, рус милләтле үҫмерҙәр ҙә йөрөй. Таңсулпан, Ҡөрьән уҡыусылар конкурсында ҡатнашып, призлы урын алған. Атаһының ауылында мәсет асыу тантанаһында моңло тауышы менән "Фәтиха" сүрәһен көйләп ишеттереп, барыһын да һоҡландырҙы. Ғаилә башлығы Сәғит Фәтҡлислам улы — "Исмәғил" ябыҡ акционерҙар йәмғиәтенең генераль директоры. Таңһылыу ханым да шунда эшләй, юридик бүлек мөдире. Өлкән ҡыҙҙары Наилә менән улдары Урал, БДУ-ның юридик факультетын тамамлап, үҙ һөнәрҙәре буйынса уңышлы эшләп йөрөй. Бәләкәс Таңсулпан иһә Мәскәү дәүләт халыҡ-ара мөнәсәбәттәр институтына уҡырға инергә, ғәрәп илдәренең береһендә илсе булырға хыяллана.

Исмәғилевтар донъяның күп мосолман илдәрендә сәйәхәттә булған. Киләсәктә хаж ҡылырға ла ниәттәре бар. Таңһылыу ханым 92 йәшлек әсәһе Зәйнәп инәйҙе лә тәрбиәләй. Мохтаждарға ла ярҙам итергә тырышалар. Сәғит Фәтҡлислам улы Көйөргәҙе, Йылайыр райондарының балалар баҡсаларындағы, Өфөләге балалар йорттарындағы бәләкәстәрҙе уйынсыҡтар менән ҡыуандырған, кемдәргәлер китаптарын сығарышырға ярҙам иткән.

Изгелек юлында йөрөгән ир уҙаманын, уның ғаиләһен ҡотбәрәкәт, именлек ташламаһын.

**Зөһрә ҠОТЛОГИЛДИНА.**

*(“Башҡортосан ҡыҙы” журналы, №11, ноябрь 2004 й.)*

## Как местные родники питают патриотов края

***Прошедший в понедельник праздник Ураза-байрам в Таймасово был ознаменован не только воздаянием слов молитвы Аллаху в часы утреннего праздничного намаза. Ровно в полдень состоялось приуроченное к празднику открытие в центре села производственно-торгового комплекса ЗАО «Компания «Исмагил». Это на первый взгляд мирское событие, пожалуй, стоит отнести также к богоугодному делу, так как сама идея и ее воплощение — проявление доброй воли земляка сельчан Сагита Исмагилова, сегодня проживающего в Уфе.***

Два года назад Сагит Фатклисламович позаботился о душах односельчан, построив красивую мечеть «Исмагил». А с началом работы «Компании «Исмагил» на селе появляется возможность создать рабочие места и зарабатывать таймасовцам на хлеб насущный.

Вот как сам Сагит Исмагилов представляет реализацию трехлетней программы своей компании в родном селе:

— Мы видим, что жизнь на селе пока нелегкая. По просьбе главы администрации района Ахата Явдатовича Кутлуахметова мы решили открыть производство по розливу питьевой воды. Сегодня пущена первая линия, а всего их будет четыре, с общей производительностью до 40 тонн в сутки, с последующей реализацией продукции в Уфе, Стерлитамаке, Салавате и Ишимбае. Кроме здания бывшей совхозной столовой, где после реконструкции размещены цех розлива и магазин, мы намерены разместить в двухэтажном здании бывшей конторы совхоза кондитерский и мясной цеха, хлебопекарню, а также смонтировать заправочную станцию нефтепродуктов из оборудования Алтайского завода. Для башкирской авиакомпании начнем упаковьвать в мелкую тару куюргазинский мед. Все это потребует общих капитальных вложений более 30 миллио-

нов рублей и обеспечит для жителей села около 150 рабочих мест. Надеемся таким образом повысить материальный уровень и благосостояние людей, сделать жизнь на селе привлекательной и удобной.

Фанилю Тунасову, как директору открывшегося комплекса, в эти дни предстоит сформировать штат из 20 человек, поставить на поток реализацию продукции.

Глава администрации муниципального района Ахат Кутлуахметов, принявший участие в торжественной церемонии открытия цеха, так прокомментировал это событие:

— В район пришел еще одни инвестор. Отрадно, что Сагит Фатклисламович Исмагилов наш земляк. Родник Шатран за околицей села — достояние местной земли, он помогал расти и быть патриотами родной земли не одному поколению таймасовцев. На территории бывшего совхоза сейчас действуют четыре СПК, люди занимаются привычным делом, выращивают хлеб, ухаживают за животными. Переработка продукции, доведение ее до товарного вида в местных условиях дает новый толчок инициативе и поиску деятельности. Для района работа компании — это еще один налогоплательщик, для таймасовцев — это рабочие места, для жителей республики — экологически чистая питьевая вода. Подобные начинания инвесторов в районе мы стараемся всемерно поддерживать.

Более 6 миллионов рублей инвестиций «Компания «Исмагил» уже вложила в покупку зданий, их реконструкцию, бурение скважин и пуск первой линии разлива питьевой воды. Доброе движение души успешного бизнесмена-земляка, его начинания должны быть, наверное, поддержаны таймасовцами себе во благо.

**Геннадий БАСОВ.**

*(Газета «Куюргаза», №124, 26 ноября, 2006 г.)*

4 - 2.0047.08

## Слово и дело Сагита-хаджи

***Накануне празднования 450-летнего юбилея добровольного вхождения Башкирии в состав России в Уфимском издательстве «ДизайнПолиграфСервис» была выпущена книга под названием «Село Таймас. «Особый удел Бурзянской волости». Автор книги — известный скульптор и краевед Ульфат Кубагушев, имя которого известно в нашей республике и в соседних регионах.***

Творчество Ульфата Кубагушева многогранно, он автор более пятидесяти научно-популярных публикаций по истории, этнографии, духовной культуре родного края. Новую роскошно изданную работу, посвящённую малой родине автора, смело можно назвать монументальным историко-этнографическим трудом. По насыщенности архивными документами и фотоматериалами, по богатству содержания и необычной форме подачи материалов сияющее глянцем новое издание, пожалуй, не имеет себе равных среди книг аналогичной тематики, изданных в Уфе в последние десятилетия.

Более четверти века Сагит Исмагилов ведёт свой бизнес в столице республики.

Как и Ульфата Кубагушева, его издавна привлекает история родного края, его родного села Таймас и всех близлежащих деревень, он небезразличен к судьбам своих земляков, их предков и потомков. В башкирском народе о таких говорят: «изгелекле кеше», что означает «человек, творящий добро». В середине 80-х прошлого столетия он принял важное для себя решение: часть заработанных средств, так называемую по законам ислама «сороковую долю от годового дохода» отдавать на благо нуждающихся, на благо общества. Первыми в списке таковых у Сагита Исмагилова значились дети и сельчане. С 80-х годов, когда бездумная, бездарная и не подготовленная ни по форме, ни по содержанию «демократизация» прокатилась по

стране, он понял: простому народу в этой мутной воде кроме нужды ловить нечего. Хорошо представлял он и другое: если в такие переломные моменты истории людей захватывает азарт борьбы, когда неважно, с кем или с чем бороться, лишь бы бороться, жди более страшной напасти — эпидемии невежества и бездуховности. Вот тогда-то Сагит Фатклисламович, большой любитель литературы и завзятый книгочей, решил, что в создавшихся условиях он сможет достойно служить своему народу, новым поколениям республики, помогая издавать для них книги. За последние двадцать лет предприниматель Сагит Исмагилов финансировал издание более тридцати книг. Кто учебники и учебные пособия для школ с преподаванием на башкирском языке, учебные пособия для студентов вузов республики на башкирском и русском языках, различные публицистические и научно-популярные издания по истории, этнографии и культуре народов Башкортостана.

В числе друзей и добрых знакомых Исмагилова писатели, десятки учёных, представляющих разные области науки, деятели культуры и искусства. Многим Сагит Фатклисламович помог издать их труды, а они, в свою очередь, приняли самое деятельное участие в подготовке к печати книги о селе Таймас. Вышедшая накануне юбилея она стала тридцать пятой по счёту в «обойме» мецената Исмагилова.

В позапрошлом году, ровно через год после завершения строительства и открытия в селе Таймас мечети, Сагит Исмагилов совершил хадж в Мекку, к самому священному для каждого магометанина месту на земле — могиле пророка Мухаммеда. По возвращении в Башкортостан он стал зваться Сагитом-хаджи...

**Салават ЮЛБАРИСОВ.**

(Журнал «Сельские узоры», №5-6,2007 г.)

4*

## Вера укрепляет человека

В те годы, когда всё вокруг начало рушиться: социально-политический и экономический строй, промышленность, наука, образование, а больше всех пострадало село, Сагит Исмагилов уже был видным предпринимателем в Уфе и республике. У него вызывало душевную боль то, что его родное село Таймас Куюргазинского района, центральная усадьба хозяйства, стабильно получавшего в советскую эпоху ежегодные миллионные прибыли, пришло в упадок. Однако бессилие чем-либо помочь землякам, в недалёком прошлом знаменитым хлеборобам и животноводам, угнетало его, а мозг лихорадочно работал над вопросами: чем помочь им, с чего начать?

— Подсознание подсказало мне: поставь в селе мечеть! -Рассказывает Сагит-хаджи. — Это вселит веру в старожилов, закалённых жизнью людей. Те, в свою очередь, окажут воздействие на остальных. У нас на селе, слава Аллаху, ещё почитают мнение старших.

— Вот так в середине девяностых, — блеснул глазами Исмагилов, — и пришла мне мысль: начинать надо с возрождения веры. Открытием в селе мечети мне хотелось затронуть струны душ среднего и молодого поколений и тех, в ком ещё не угасли желание трудиться и созидать. По моему мнению, вера в себя — одно из самых сильных чувств человека, способных подвигнуть его на немыслимые дела. Только большинству людей нужен толчок, импульс, чтобы в них пробудилось это чувство. Всё это мной было пережито и прочувствовано. Вот по-этому и решил я построить мечеть...

О том, что село Таймас было когда-то центром мощного коллективного хозяйства, в начале 2000-х говорили пустующие, начинающие приходить в ветхость производственные постройки и помещения контор, а о существовании на планете цивилизации напоминали небольшое почтовое отделение и здание сельского совета. Генеральный директор компании «Исмагил»

Сагит Исмагилов решил в первую очередь открыть в селе торговую точку. Не ездить же его землякам за товарами первой необходимости и продуктами в Кумертау или Мелеуз, которые от села в 30-50 километрах.

В самом центре Таймаса выбрали помещение, отремонтировали его по европейским стандартам, завезли полный склад товара и начали торговать. Как рассказывает продавец магазина Зиля Яппарова, огромная вывеска на здании — «Компания «Исмагил» — поначалу многих селян удивляла. Со временем люди привыкли к ней.

А смысл этой видной издалека детали, как я понял, в следующем: в каком бы конце села вы не жили, с какой бы стороны не шли к административно-бытовому центру села, вы всё равно придёте к «Исмагилу»! В последующем эта деталь, похоже, на самом деле определила судьбу многих. Постепенно жители села и некоторые наезжающие сюда гости, в основном дети старожилов, стали связывать своё будущее именно с компанией «Исмагил». Надежды людей были небеспочвенны — в селе Таймас затевались серьёзные дела.

## Райская вода таймасовского разлива

«До чего же в нашем селе вода сладкая!» — эта фраза старожилов всегда гвоздём сидела в мозгу Сагита Исмагилова. Особого секрета в качестве таймасовской воды, можно сказать, и нет. Всё дело в том, что под нынешним Куюргазинским районом на небольшой глубине уже многие тысячелетия залегают колоссальные массы древесины, теперь уже в виде бурого угля. Толщина этого слоя от 40 до 100 метров и более.

Под пластами угля располагаются природные «резервуары» пресной воды. Оказывается, проходя через естественный природный фильтр — бурый уголь — она очищается от примесей, в ней остаются только полезные и необходимые человеку микроэлементы. Оттого и сладка в этих местах вода.

Два года назад, когда Сагит-хаджи, приехав в Таймас, начал делиться планами переустройства жизни села с сестрой, мамой Фаниля, парень горячо поддержал дядю. Открытый и очень простой в общении обо всем этом Фаниль высказался без обиняков: «Я вернулся, чтобы не погибло наше родное село. Город не для меня. А глядеть как разрушается некогда процветающее село... Не так нас воспитывали».

Пекарня разместилась в отреставрированном двухэтажном здании бывшей конторы совхоза. При входе переобуваюсь в сланцы и попадаю в мир, где витает духмяный аромат хлеба.

Всеми делами в пекарне заправляет коренная куюргазинская жительница Зухра-апай Абзалилова. В советское время она 17 лет трудилась в совхозной столовой. С 85-го по 95 год руководила и столовой и пекарней. Последующие семь лет, когда совхоз «успешно развалился» и в столовую некому стало ходить, Зухра-апай, можно сказать, безвылазно провела в пекарне. Охраняла, по её словам, оборудование, чтобы ушлые мужички да приезжие жулики не увели «нержавейку» для сдачи в утиль. В день до шести-семи замесов теста делала на двести буханок каждый, выпекала хлеб и отправляла в магазины — люди-то при любой власти хлебушек едят.

Трём помощницам Зухры-апай нет и 30. Все замужем, они невестки из соседних деревень, растят детей. Муж Фании Рыскуловой Ильдус, работает в водоразливочном цехе. И Алида Кильметова, и Гульнара Бикмухаметова до выхода на работу хлеб пекли только для своих семей. Общественное производство — дело иное, здесь объёмы побольше, и ответственность повыше. Однако у молодых женщин — надёжный наставник тётушка Зухра, которая Сагиту-хаджи дала слово, что хлеб из Таймаса по качеству будет самым вкусным в Башкортостане.

Когда мы закончили беседу, заведующая пекарней Абзалилова распорядилась: всем пекарям переодеться — коллектив отправляется на сбор хмеля. Хлеб с добавлением хмельных дрожжей хранится до двух недель и по качеству не уступает домашнему. Главная цель Зухры-апай — выпекать хлеб, превосходящий по вкусу ермолаевский и выйти с ним на рынок столицы республики.

## Бизнес-план для Таймаса

— Моя главная цель — создать в Кургазах (все географические и топонимические названия Сагит-хаджи всегда произносит на старинный манер) наибольшее число рабочих мест, — так обозначает свои ближайшие планы Сагит Исмагилов. — Надо, чтобы местные жители занимались исконным для этих мест делом. Лет пять назад, пользуясь историческими справками, я выяснил, что для юга Башкирии — это овцеводство. Обратился в Российскую Академию наук. Сделал заявку на селекционную разработку породы овец, которая была бы максимально адаптирована к условиям республики. За дело взялся заведующий кафедрой Московской академии ветеринарии и биотехнологий имени Скрябина, доктор биологии, профессор Шайдуллин, который проводил работы на Саратовской научно-производственной базе. Я просил, чтобы порода овец, которую мы сразу же стали звать «Таймасовская», была не только шерстяной направленности, но и мясной -молодая баранина сейчас очень востребованный продукт не только на селе, но и в городе, особенно у любителей национальной кухни, а таких гурманов становится всё больше.

Сагит Фатклисламович исходит прежде всего из экономических интересов жителей бывшего особого удела Бурзянской волости. В селе Таймас в двухэтажном здании бывшей конторы совхоза пекарня занимает только половину первого этажа. Во второй половине планируется открыть цех по производству мясных деликатесов, которые пойдут на прилавки городов и столицы республики. Что будут делать с овечьей шерстью и шкурой животных — подскажет время.

Судя по бизнес-плану по разведению овец в фермерских хозяйствах с учётом конъюнктуры рынка в условиях нашей республики, в Таймасово будет гурт овец в пять тысяч голов. Для начала. А пока здесь содержат 80 дойных коз, к весне их будет 200. Кумыс из их молока может соперничать с кобыльим. Займутся в Таймасе и производством кумыса из кобыльего моло-

ка. Основа для этого заложена. И ещё много чего в перспективе у руководителя компании «Исмагил» Сагита-хаджи Исмагилова. Благодаря ему, на сегодняшний день десятки людей в Таймасе имеют стабильную работу. Пройдёт ещё немного времени — таких будет сотни...

***Салават ЮЛБАРИСОВ.***

PS: глядя, как успешно стало возрождаться село Таймас, администрация Куюргазинского района приняла решение о реставрации здесь средней школы и интерната. Все работы качественно провела фирма Иршата Асылгужина — уфимского предпринимателя, земляка Сагита-хаджи. Летом в селе Якуп открыли мечеть, построенную на средства кумертауского предпринимателя Зиннура Исхакова. В ноябре 2007 года в райцентре селе Ермолаево была открыта соборная мечеть, на строительство которой госбюджет не затратил ни одной копейки, все нужные средства по своей инициативе собрал с предпринимателей и жертвователей глава района Ахат Явдатович Кутлуахметов.

*(Журнал «СЕЛЬСКИЕ УЗОРЫ», №1,2008.)*

## Үтескә аҡса һораусыға...

**«Аҡсаны һәр ваҡыт тик ғәҙел юл менән генә табып булмай. Шуға күрә эшҡыуар булыр өсөн әхлаҡи нормаларға һыймаған сифаттарға ла эйә булырға кәрәк», тигән яҙылмаған аңлау йәшәй. Беҙҙең милләт кешеләренең эшҡыуарлыҡ өлкәһендә сағыштырмаса аҙ булыуын юғарыла килтерелгән дәлил менән аңлатыусылар ҙа бар.**

С. ИСМӘҒИЛЕВ: Мөхәммәт бәйғәмбәргә берәү үтескә аҡса һорап килгән. Бәйғәмбәр уға балта тотторған да: «Минең утыным бөттө, мә, һиңә балта, ҡырҡып алып кил әле», — тигән. Тегеһе утын ҡырҡып алып килгәс, Мөхәммәт уға эше өсөн

аҡса биргән, ә балтаны биреп торған, утын ҡырҡып һатырға ҡушҡан. Шулай итеп, тәүҙә аҡса һорап килеүсе утын ҡырҡып һатып, үҙе балта һатып алған, бәйғәмбәрҙең балтаһын кире ҡайтарып, аҙаҡ үҙаллы эшләй башлаған. Ошо фәһемле тарихта ғына ла уңышлы кеше булыуҙа тәрбиәнең ғәйәт ҙур әһәмиәте булыуы хаҡындағы фәһем ята. Башҡортта шундай әйтем бар: «Balaңа оҙон ғүмер теләмә, иманлы булыуын telә».

Башҡорттар араһында эшҡыуарҙар аҙ тип әйтеү ысынбарлыҡҡа бөтөнләй тура килмәй. 90-сы йылдар менән сағыштырғанда, әйтәйек, Өфөлә йәшәүсе башҡорттарҙың һаны 3-4 тапҡырға артты. Эшҡыуарҙарҙың да һаны шунсамаға күбәйҙе. Эшҡыуарлыҡ ул милләткә бәйле түгел. Эшҡыуарҙар араһында «беҙҙекеләр әҙерәк» тип әйтеү, ғөмүмән, эшҡыуарлыҡҡа мөнәсәбәттән дә килә. Егерме йыл элек ситтән тауар алып килеп һатыусыларҙы социалистик лөғәттә «спекулянт» тип атай инеләр. Бигерәк тә гуманитар йүнәлештә хеҙмәт итеүселәр эшҡыуарҙарға «беҙ халыҡ өсөн эшләйбеҙ, һеҙ үҙегеҙҙе генә ҡайғыртаһығыҙ» тип, үҙ эшен асыусыларҙы битәрләй торғайны. Быңдай ҡараш әле лә йәшәй. Ә асылда гуманитарҙар бюджет аҡсаһына, эшҡыуарҙар килтергән аҡсаға йәшәй. Ҡыҫҡаһы, быңдай ҡараштa көнләшеү ҙә, мәсьәләнең асылын аңламау ҙа үҙен ныҡ һиҙҙерә.

Ауылдарға хөкүмәт тарафынан дотация бүлеү бик алама ғәмәл. Әле һаман да хөкүмәттән нимәлер там итеп, көтөп ятыусы ауылдар бар. Әммә һуңғы ваҡытта ла ауылдарҙан ныҡ ҡына егеттәр үҫеп сыға башланы. Әгәр ҙә объектив шарттар (эш урыны булмау, аҡсаһыҙлыҡ, социаль бөлгөнлөк) кешене шыттырып сығармаһа, уны агитация юлы менән генә эшҡыуарлыҡҡа алып килеп булмай. Мөхәммәт бәйғәмбәр: «Әгәр ҙә һеҙҙең өммәтегеҙҙә ил етәкселәре, эшҡыуарҙар булмаһа, ул өммәт юҡҡа сығасаҡ»,— тигән бит. Беҙҙең халыҡтың тәбиғәттән һалынған һаҡлыҡ функцияһы, физик һәм интеллектуаль потенциалы ғәйәт ҙур, унан ил ағалары ла, эшҡыуарҙар ҙа үҫеп сығасаҡ.

Әлбиттә, бөтөн кешенән дә эшҡыуар сыҡмай. Эшҡыуар-

лыҡҡа эшкинмәҫтәй кешене нимәлер эшләргә мәжбүр итергә маташыу тәбиғәттән йыръсы булырға һәләте, тауышы булмағанды сәхнәгә сығарып йырлатып маташыуға тиң. Мин теләге булған егеттәрҙең һәр ҡайһыһын алып, өйрәтеп ҡараным. Бары тик ун кешенән 1-2 кеше генә уңышлы итеп эшләп китә алды.

Мин 1987 йылдан бирле ошо өлкәлә эшләйем. Тәүге осорҙағы «ҡырағай баҙар» шарттарында эшҡыуарлыҡҡа, асылда, «бер юлы сумырып алыусылар» килде. Уларҙың күбеһе бер сделка «менән бер юлы миллиондар эшләп алды ла, аҡсаларын артабан ҡайҙа ҡуйырға, ни эшләтергә белмәй, теләһә нисек туҙҙырып, юҡҡа ла сыҡтылар. Минең менән бергә эшләй башлағандарҙың береһе лә ҡалманы. Әле һуңғы ун йылда башлағандарҙың араһынан алдан күрә белеүселәре генә уңышлы эшләй. Эшҡыуарлыҡ бер туҡтауһыҙ үҙ өҫтөңдә эшләүҙе, иҡтисади һәм финанс мәсьәләләре буйынса белемеңде камиллаштырыуҙы, баҙарҙы өйрәнеүҙе талап итә.

**Һеҙ танылған эшҡыуар. Төрлө мәрхәмәтлек акцияларын бағыусылар араһында ла исемегеҙ йыш күренә. Һеҙҙең эшҡыуарлыҡ өлкәһендә уңышлы кеше булып китеүегеҙҙең сере нимәлә?**

С. ИСМӘҒИЛЕВ: Эшҡыуарлыҡ — ул башҡалар юлы менән, әҙер юлдан барыу түгел, һәр кем унда үҙ юлын һалырға тейеш. Һин әгәр ҙә икенсе кеше артынан бара икәнһең, эшҡыуар түгелһең, бары тик уны тиражлаусы, ҡабатлаусы ғынаһың. Беҙгә бит атай-олатайҙарыбыҙ бер ниндәй ҙә матди мираҫ, аҡса биреп ҡалдырманы. Юҡтан, бер тинһеҙ эш башлауы иң ҡыйыны. Хәҙерге эшҡыуарҙарға был тәңгәлдә еңелерәк. Банктарҙы ышандырырлыҡ проекттар төҙөй алһаң, кредитҡа аҡса алып була. Иң мөһиме — һиңә кешеләр ышанырға тейеш. Ошондай ышаныс булмаһа, бәрәү менән дә уңышлы килешеү төҙөп булмай. Һиңә кешеләр ышанмаһа, хатта фирмаңа эшкә лә килмәйҙәр. Эш башлар алдынан иң тәүҙә башҡалар әле тотонмаған үҙ шөғөлөңдө, «үҙ ояңды» табыу мөһим. Йәки булмаһа, бығаса кемдер башлаған эште унан да яҡшыраҡ

башҡарырға ышанысың бар икән, параллель рәүештә шул эшкә тотонорға ғына кәрәк.

Уңыштың беренсе шарты: башлаған эшенде еренә еткереп атҡарыу. Әгәр ҙә шулай итһәң, һин намыҫлы хеҙмәтең менән үҙ-үҙеңә реклама яһайһың, тигән һүҙ. Һинең эшеңә риза булып ҡалған заказсы был хаҡта икенсегә һөйләй, уныһы — өсөнсөһөнә... Бына беҙ күпме эшләйбеҙ, әммә бер вакытта ла реклама биргәнебеҙ юк. Кешеләр беҙҙе үҙҙәре эҙләп килә. Уңышлы булыуҙың икенсе шарты — кешене алдарға ярамай. Эшҡыуарҙың биргән һүҙе революцияға тиклем Рәсәйҙә яҙылмаған ҡанун һаналған «купец һүҙе» кеүек тайпылышһыҙ булыуы мотлаҡ. Миңә былтыр бер егет килде. Үтенеп һорағас, 300 мең һум аванс биреп, Ленин урамындағы алты блоклы торлаҡ йортоноң проектын эшләүҙе йөкмәттем. Тәүҙә үҙе ауырыны, аҙаҡ бергә эшләгән иптәштәре. Шулай итеп, өс айға иҫәпләнгән эш һигеҙ айға һуҙылды. Мин үҙемә шундай һығымта яһаным: мин ул егет менән бүтән эшләмәйәсәкмен. Кешене алдарға ярамай. Нимәлер эшләргә хәлеңдән килмәһә, тураһын әйтергә кәрәк.

**Билдәле эшҡыуар Риф Иҫәнов «Киске Өфө»ләге бер сығышында («Боронғонан боронғораҡ башҡорт, бөгөнгөнән бөгөнгөрәк башҡорт...» 2007 йыл, 28-се һан) «үҙ көсө менән йәшәргә ынтылған кеше өҫтөнән ун ете надзор органы, ун ете әрәмтамаҡ булғанда, беҙҙең илдә прогресс тиҙ арала күтәлмәйәсәк...» тип борсолоу белдерә. Был фекергә ҡарашығыҙ нисек? Ғөмүмән, дәүләттең бындай органдары менән һеҙ нисек эшләйһегеҙ?**

С. ИСМӘҒИЛЕВ: Ун ете түгел улар, күберәк. Миңә, мәҫәлән, үҙ эшемдә егерме ете орган менән эш итергә тура килә. Улар асылда дәүләт тарафынан законлаштырылған талау менән шөғөлләнә. Мәҫәлән, һыу мәсьәләһе буйынса ғына тәүҙә райондағы, артабан — территориаль, шунан региональ, аҙаҡ республика надзорына киләһең. Уларҙың һәр береһендә экология буйынса урынбаҫарҙар ултыра. Уларҙың һәр береһенә түләргә кәрәк. Бына мин һыуға ризалыҡ алыу өсөн генә мини-

маль хаҡтар буйынса 150 мең һум түләнем. Ҡулланыусыларҙың хоҡуғын һаҡлау өсөн «Роспотребнадзор» тигән федераль хеҙмәт, уның эргәһендә шул ук атамалағы ижтимағи ойошма бар. Үҙҙәренең мәсьәләһен хәл итергә килеүселәрҙе был ике хеҙмәт уртаҡлап «талай». Әйтәйек, һине магазинда алданылар икән, ти. Һин «Роспотребнадзор» федераль хеҙмәткә бараһың, улар һине шул уҡ исемдәге ижтимағи ойошмаға — ООО-ға ебәрә. Улар һинең ҡулыңа күпмелер сумма яҙылған иҫәп ҡағыҙы тоттора. Был системаны бөтә федераль идаралыҡҡа йәйелдерҙеләр. Бөтә урындарҙа ла түлә генә, ҡағыҙыңа нимә генә тип яҙма, хатта «ошо ойошмала эшләүселәр ахмаҡтар» тип яҙ, үткәрәләр, ҡултамға ла һалалар, мисәт тә һуғып бирәләр. Федераль идаралыҡтар эшҡыуарлыҡты тотҡарлай торған бик ҙур тормоз. Беҙҙә федераль власты көсәйтеү һылтауы менән бюрократизымды түҙеп торғоһоҙ сиккә алып барып еткерҙеләр.

Иң ауыры — ҡағыҙ эше. Мин һыуҙың цехын ике айҙа төҙөп ултырттым, рөхсәт ҡағыҙын һигеҙ ай буйына юлланым. Ошо эш менән шөғөлләнеүсе ҡайһы берәүҙәр рөхсәт ҡағыҙын өсәр йыл буйына ала алмай.

**Табылған аҡсаң һинең хеҙмәтең, интеллектың менән нығытылмаһа, ул тиҙ арала юҡҡа сыға, яна тиҙәр.**

С. ИСМӘҒИЛЕВ: Мин эш башлаған саҡта бер таныш егетем килде лә үҙенә егермеләп «КамАЗ» машинаһы кәрәклеге хаҡында белдерҙе. Ул сығып киткәс, тағы ла бер егет килеп, «КамАЗ» машиналарын һатып алыусыны эҙләүе хаҡында әйтте. Табып бирһәм, 5 процент түләргә вәғәҙә итте. Теге егетте ҡыуып еттек. Шулай итеп, мин бер нәмә лә эшләмәйенсә, тик ултырып ҡына 10-15 минут эсендә ике миллион аҡса эшләнем. Хәләл көс һалмайынса табылған был аҡсаны мин спонсор ярҙамы итеп, милли ойошмаға бирҙем.

Мин һыуҙы һаман да 80 һумға һатам. «Кристалл» уның хаҡын 240 һумға тиклем күтәргәйне, әммә һыуҙары үтмәй башлағас, хаҡын 110 һумға тиклем төшөрөргә мәжбүр булды. Башҡалар ҙа төшөрҙө. Мин быны менән Өфөлә һыу һатыусы-

ларҙы һыу хаҡын төшөрөргә мәжбүр иттем. Әгәр ҙә эшҡыуарҙар араһында ошондай юлдарға барыусылар күберәк булһа, тауарҙарға хаҡты бик тиҙ төшөрөп була.

**Кешегә процентҡа аҡса биреү менән шөғөлләнеүсе коммерция банктары эшмәкәрлеге дингә, әхлаҡ нормаларына ҡаршы килә, тиҙәр. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ?**

С.ИСМӘҒИЛЕВ: Проценттарҙы самаһыҙ арттырған банктарҙың эшмәкәрлеге хаҡында улай тип әйтеп булмаҫ ине. Халыҡты талаусы банктар бар. Ә бына мосолман банкы аҡса һораусыға шул сумманы процентҡа бирмәй, ә уның эшмәкәрлегендә өлөшөнә инә. Йәғни һораған аҡсаһын биреп тора ла, кирегә биреп торған суммаһын һәм аҡса алып тороусы алған табышының ҡап яртыһын үҙенә ала. Минеңсә аҡса менән манипуляция яһап аҡса эшләү — барыбер буштан аҡса эшләү була. Әйтәйек Американың доллар менән эшләүсе валюта системаһы юҡҡа сыҡһын, бик күп илдәрҙәге, шул иҫәптән беҙҙең илдәге барлыҡ аҡсалар ҡағыҙ ғына булып ҡалыуы бар. Ул сағында тау-тау аҡса тотҡан кешегә ҡарағанда өйөм-өйөм тиреҫе булғаны байыраҡҡа сығасаҡ. Сөнки беҙҙең банктарҙағы аҡса актив менән нығытылмаған.

**Эшҡыуарлыҡта, ғөмүмән, уңышлы кеше булыуҙа тәрбиәнең роле һәм әһәмиәте хаҡында ни әйтерһегеҙ? Әйтәйек, ғаилә, мәктәп тәрбиәһендә нимәләргә айырым иғтибар кәрәк? Ата-әсәләрҙең үҙҙәрен тәрбиәләргә кәрәк булғанда тәрбиәнең элекке формаларын кире тергеҙеү мөмкинме икән? Ғөмүмән, эшҡыуарҙарҙы борсоймо икән йәмғиәтебеҙҙәге тәрбиә мәсьәләләре?**

С. ИСМӘҒИЛЕВ: Боронғо ғилемде, тарихты белгән төплө ҡарттар 70-75-се йылдарға тиклем йәшәне. Беҙ бала саҡта уларҙың «Атайыңа әйтәм» тигән һүҙе теләһә ниндәй язанан да ҡурҡынысыраҡ ине. Йәки булмаһа, «Бар, атайыңа ана шулай тип әйт», тигән һүҙ иң оло йомош һаналыр булды. Әйтмәй ҡара. Әле килеп, һуңғы егерме йыл эсендә ана шул мәктәп юғалды ла ҡуйҙы. Ул ҡарттар үлеп бөтһә лә, был мәктәпте күреп үҫеүсе быуын вәкилдәре әле иҫән. Тимәк, тәрбиәнең был

төрөн тергеҙеү мөмкинлеге бар. Алтмышынсы йылдарҙа дин тотоусылар бөтөнләй юҡ ине. Хәҙер күптәр дин юлында. Әле бына иллеләп эшҡыуар «Ғофран» мәсетенә йөрөй.

**Киләсәк өсөн беҙҙең ауылдар, ҡалалар, хеҙмәт мөнәсәбәттәре яраҡһыҙ, тиҙәр. Әгәр ҙә киләсәгебеҙҙе проектлау мөмкинлеге һеҙгә бирелһә, уны камилыраҡ күреү өсөн нимәләр эшләр инегеҙ?**

С. ИСМӘҒИЛЕВ: Минеңсә, эшҡыуарлыҡ стратегик йүнәлештәрҙән китәсәк. «Газпром»ды күрҙек бит, ана шуның кеүек, нефть, төҫлө металдар менән дә һатыу итеү өлкәһенән эшҡыуарлыҡты ҡыуып сығарасаҡтар. Эшҡыуарлыҡ асылда хеҙмәтләндереү өлкәһенә күсер, тип уйлайым. Ул сағында хеҙмәтләндереү, төҙөлөш һәм ауыл хужалығы өлкәләрендә эшҡыуарлыҡ киң йәйелдереләсәк. Башҡортостанда ауыл хужалығының рентабелле эшләүе өсөн административ үҙгәреш кәрәк. Беренсенән, ауыл советтары ҙурайырға, элекке волостар кимәлендә, райондар берләштерелеп, элекке кантон һымағыраҡ кимәлдә бер ҡалаға бер нисә район беркетелергә тейешле. Әйтәйек, беҙҙең республика ошондай бүленештә 10-12 региондан (кантондан) торһа, уларҙың һәр ҡайһыһы рентабелле эшләй һәм йәшәй алыуы мотлаҡ. Республиканың һәр төбәге етештереү йәһәтенән тигеҙ үҫешмәгәнгә күрә, һалымдарҙы билдәләгәндә лә дифференциялы ҡараш талап ителәсәк. Әлегә беҙҙең административ-территориаль система камил түгел.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ әңгәмә ҡорҙо.**
*(“Киске Өфө” гәзите,№43, 27октябрь 2007 й.)*



1966 й. Фәхрислам һәләк булған Дедово-Исаево ауылында (хәҙер Ырымбур өлкәһенең Октябрьск ҡасабаһы) граждандар һуғышында һәләк булғандар хөрмәтенә ҡуйылған һәйкәл янында Таймаҫ мәктәбе уҡыусылары һәм Фәтҡлислам Исмәғилев (уртала), алдында ҡыҙы Әлмирә, унан һулда пионер ойошмаһы етәксеһе Миңьямал Солтангәрәева, Хәтифә Исмәғилева, Таймаҫтың аҡһаҡалы, граждандар һуғышы ваҡиғалары шаһиты Шәмсетдин Араптанов. Баҫып тороусы балалар араһында беренсе рәттә һулдан өсөнсө, шаҡмаҡлы күлдәк кейгән Сәғит Исмәғилев.



1937 й. 16 июль. Алыҫ көсыҒыштағы Башҡорт полкы яугирҙәре. Арттағы рәттә уртала Фәтҡлислам Исмәғилев, янында (уңда) ауылдашы Миңлеәхмәт Ҡобағошов. Ҡалғандары — Көйөргәҙе районының төрлө ауылдарынан.



1982 й. Мәскәү. Кремлдең Колонналы залы. Ветерандар Башҡорт атлы дивизияһының ойошторолоуына 40 йыл тулыу уңайынан йыйылған. Икенсе рәттә уңдан икенсе Фәтклислам Исмәғилев.



1982 й. Таймаҫтың һуғыш ветерандары байрам көнөндә. Беренсе рәттә (ултыра) уңдан икенсе Фәтклислам Исмәғилев.



1927 й. Сәғиттең бабаһы, 1921-1923 йылдарҙа Таймаҫ ауыл советы рәйесе, 1927-1929 йылдарҙа БашЦИК ағзаһы Сәләхетдин Исмәғилев ҡатыны Сафия менән.



1929 й.Сәғиттең атаһы Фәтклислам Исмәғилев Йылайыр фабрика-завод училещеһын бөткәс төшкән.



1938-1939 й. Сәғиттең әсәһе Хәтифә (уңда), һеңлеһе Маһира менән ликбезда уҡыған саҡтарында.



1952 й. Фәтклислам Исмәғилев – Свобода почта бүлексәһенең Таймаҫ ауылында хат ташыусы, 1-се төркөм инвалиды, алдында Зәлифә, балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе, ауыл советы депутаты Хәтифә Исмәғилева, алдында Рәдифә.



Фәтклислам Исмәғилевтең һеңлеһе Һәҙиә Исмәғилева, уның ире Хөсәйен, балалары Фуат (уңда), Миңзәлә, Фәрзәнә.



1954 й. Фәтклислам менән Хәтифә Исмәғилевтарҙың балалары (һулдан уңға) Зәлифә, Сәғит, Рәдифә.



1954 й. Сәғиткә 1 йәш.



1958 й.Балалар баҡсаһы тәрбиәселәре (һулдан уңға): Көнһылыу Яматова, Фәүзиә Ғайсарова, Хәтифә Исмәғилева.



Сәғиткә 11 йәш.



Өфөләге беренсе интернат-мәктәптең 8 А синыфы уҡыусылары. Арттағы рәттә һулда Сәғит.



1970 й. Өфөләге беренсе интернат-мәктәптең 10 А синыфы уҡыусылары уҡытыусылары менән. Арттағы рәттә һулдан беренсе Сәғит.



1972 й. Өфөлә уҡыусы Таймаҫ талиптары. Сәғит икенсе рәттә һулдан беренсе.



1973 й. Сәғит Исмәғилев әрме хеҙмәтендә.



1981 й. Сәғит Исмәғилев атаһы, әсәһе һәм апаһы Зәлифәнең улы Фәнил менән Мәскәүҙең Ҡыҙыл майҙанында.



2000 й. Интернат-мәктәпте тамамлауға 30 йыл тулғас осрашыу. Сәғит Исмәғилев урталағы рәттә уңдан беренсе.



1993 й. Сәғит әсәһе Хәтифәгә һалып биргән өйҙә. Сәғиттең ҡатыны (һулда) Таңһылыу, Нурмөхәмәт хәҙрәт, Хәтифә.



1996 й. Сәғит, Таңһылыу, Таңсулпан Өфөләге Якутов исемендәге паркта.



1999 й. Исмәғилевтар Төркиәлә.



2001 й.
Сәғит, Таңсулпан, Таңһылыу Египетта.



2004 й. Исмәғилевтар Өфөләге Еңеү паркында: Наилә (уңда), Таңсулпан, Сәғит, Урал, Таңһылыу.



1997 й. Таңһылыуҙың атаһы Исмәғил һәм әсәһе Зәйнәб.



2003 й. Таңсулпан уҡыусы балалар бәйгеһендә башҡорттоң оҙон көйөн йырлап Гран-при алған көндә.



2004 й. Таймаҫтағы Исмәғил мәсете алдында
Таңһылыу, Сәғит, Таңсулпан.



2005 й. Дуҫтар намаҙ ашында:
Сәғит (уңда), Таңһылыу, Әминә һәм Рәйес Абдрахмановтар.



2005 й. Мәккәлә хаж ҡылыу: Сәғит, Таңһылыу, Таңсулпан хажиҙар.



2005 й. Таймаҫ ауылында:
Сәғит (алда уңда) , Сөмбөл (Әлмирәнең ҡыҙы), Хөрмәт кейәү, Урал,
Зәлифә, Әлмирә, Лира, Эльвира (Әлмирәнең ҡыҙы) һәм Таңсулпан.



2005 й. Мәҙинәлә ике ҡәғбәтуллалы мәсет алдында Сәғит менән Таңсулпан хажиҙар.



2005 й. Таңһылыу менән Таңсулпан Таймаҫтағы Исмәғил мәсете янында.



2006 й. Бойондороҡһоҙ илдәр берлегенән Казанға съезға килгән мөфтиҙәр араһында Сәғит хажи уңдан өсөнсө.



2006 й. Ихлас мәсетендә ғәрәп мөғәллимдәре менән Нурмөхәмәт хәҙрәт, Сәғит хажи (уртала).



2006 й. Ҡытай. Пекин.
Таңһылыу менән Таңсулпан.



2007 й. Көйөргәҙе районы һабантуйында Сәғит, Таңһылыу, Таңсулпан.



2006 й. Бөйөк Ҡытай стенаһы. Таңһылыу менән Жамшид Сөләймәнов – Сәғиттең өс туған ҡустыһы, Ҡытай Республикаһы Хөкүмәтендә сауҙа буйынса кәңәшсе, Ҡытай гражданины.



2007 й. Ихлас мәсетендә Райман Ишбаев концертында. Уңдан: Өфө сәнғәт академияһы ректоры Ишмөхәмәт Ғәләүетдинов, Хәмзә хажи, Сәғит хажи.



2007 й. Якташ академик М. Аҙнабаев (уртала) менән.



2007 й.
Таңһылыу менән Таңсулпан Кремль янында.



2007 й. Сәғит хажи Исмәғилев эш урынында



Таймаҫтағы "Исмәғил" компанияһында икмәк беште.




Таймаҫтағы магазин янында.
Алда – Сәғит Исмәғилев.



"Исмәғил" компаниеһының күп эшен Таймаҫта Сәғиттең бер туған апаһы Зәлифә башҡара.



Таймаҫта “Гәлсәр” һыу ҡала кешеләренә оҙатыр өсөн бына ошолай әҙерләнә.






Исмәғил мәсетенә ҡуйылған таҡтаташ.

2004 й. Сәғит Исмәғилев үҙе һалдырған мәсет янында.



Зәлифә Исмәғилева ире Фәрит Тунасов менән.



Зәлифә менән Фәриттең улы Фәнил, ҡатыны Сания
һәм балалары Сәриә, Гөлфиә менән.



Әлмирә Искужина (Исмәғилева) ире Хөрмәт һәм ҡыҙы Сөмбөл менән.



Әлмирә һәм Хөрмәт Искужиндарҙың ҡыҙҙары Эльвира менән Лира.



Юлдашбаевтар ғаиләһе (уңдан һулға): Рәдифә, Әлим, улы Заһир, ҡыҙы Рәсилә, кейәүе Ринат, улдары Фәрит менән Замир һәм Гүзәл килен.



Замир менән Албина балалары Алһыу менән Рәмилде күтәргәндәр.




2007 й. Фәрит хеҙмәттә.



Зәйнәп Ғәзиз ҡыҙы Әхмәрова – Таңһылыуҙың атаһы яклап өләсәһе



1961 й. Зәйнәп Әхмәрова балалары менән (һулдан): Көнһылыу, Таңһылыу, Мөхәммәт һәм әсәһенең ҡулында Рауза.



Замир ҡатыны һәм балаһы менән.




2007 й. Раил ошондай хәрби машиналарҙа хеҙмәт итә.



1971 й.
Таңһылыу Исмәғилеваның өләсәһе
Мәймүнә Мәжит ҡыҙы Вәлиева.



Таңһылыуҙың атаһы Исмәғил Абдулхалиҡ улы менән
Зәйнәп Шаһисолтан ҡыҙы Әхмәровтар.



Сағиттең әсәһе
Хәтифә Исмәғилева.



1988 й. Таңһылыуҙың әсәһе
Зәйнәп Әхмәрова.



Әхмәровтар ғаиләһе (һулдан уңға): беренсе рәт – Зәйнәп, Гөлнара, Зәйнәптең әсәһе Мәймүнә, икенсе рәт – Рауза, Ғәли, Таңһылыу.



1951 й. Зәйнәп балалары Миңәиш һәм Мөхәммәт менән.



Исмәғил һәм Зәйнәп балалары менән: Рауза (әсәһенең алдында), Таңһылыу (һулда), Көнһылыу, Ғәли, Мөхәммәт, Миңәиш, Зильда (килен), уның ҡулында Рузалиә.



Таңһылыу әсәһе Зәйнәп менән.



Зәйнәп һәм Исмәғил Әхмәровтар, янында кейәүе Хисмәтулла Йәнекәев, уның улы Вадим; арттағы рәттә: Ғәли Әхмәров, Көнһылыу Йәнекәева, Рауза, Заһит (кейәү) Шәйхелисламовтар, уларҙың балалары Ринат менән Марат.



Таңһылыуҙың ике туған апаһы Менәүәрә Абдулхалиҡ ҡыҙы Әхмәрова.



Сәғит менән Таңһылыуҙың ҡыҙы бәләкәй Таңсулпан.



2005 й. Ринат Шәйхелисламов.



2005 й. Таңһылыу менән Таңсулпан Ҡазандағы Ҡолшәриф мәсете янында.



Сәғит менән Таңһылыуҙың балалары Наилә менән Урал.



Атай йортонан балалар өҙөлмәй. Йылайыр районы Юлдыбай ауылында.
Һулдан уңға: 1-се рәт — Fәли Әхмәров, әсәләре Зәйнәп;
2-се рәт — Вадим Йәнекәев, Наилә һәм Урал менән Таңһылыу Исмәғилева;
3-сө рәт – Көнһылыу Йәнекәева, Рауза Шәйхлисламова.



2005 й. Заһит, Рауза, Морат Шәйхелисламовтар Санкт-Петербургта.



Таймаҫта һабантуйҙа –
Сәриә, Сөмбөл, Хөрмәт, Әлмира, Зәлифә һәм Таңһылыу.



Сәғит Исмәғилев әсәһе Хәтифә менән Таймаҫ ауылындағы өйҙәрендә мөфтөй Нурмөхәммәт хажи Ниғмәтуллинды ҡунаҡ итә.



Таңһылыу менән Таңсулпан Өфөләге Хәмзә мәсетен асҡан тантана мәлендә.



2004 й. Наилә, Таңсулпан һәм Урал Исмәғилевтар Өфөләге өйҙәрендә.



2008 й. Сәғит менән Таңһылыу Исмәғилевтарҙа (арткы рәттә) бөгөн хөрмәтле кешеләр йыйылған: Мәйсәрә менән Мөхтәр Әхтәмовтар, уларҙың килене Нурыя, Зәрә менән Нуриман Ҡыуандыҡовтар.

**МЕДАЛЬ ЖУКОВА**



А № 0879853

Исмагилов
Сагит
Фатхисламович

НАГРАЖДЕН(А)

МЕДАЛЬЮ ЖУКОВА

Президент Российской Федерации

Указ от ......."..................19..... года

**ЛАГОДАРСТВЕННОЕ ПИСЬМО**

[illegible]

Глава администрации [illegible] района А.Н. [illegible]

[illegible] года

**ГРАМОТ**

ГВАРДИИ СЕРЖАНТ
ИСМАГИЛОВ
САГИТ ФАТХИСЛАМОВИЧ

За отличные успехи в боевой и политической подг
примерную дисциплину и безупречную службу в рядах
женных Сил Союза ССР награждаю Вас Грамотой.

Выражаю уверенность, что Вы и впредь будете с
примером добросовестного исполнения своего патриоти
долга перед нашей великой Родиной — Союзом Со
Социалистических Республик.

КОМАНДИР ВОЙСКОВОЙ ЧАСТИ 73860
ГВАРДИИ ПОДПОЛКОВНИК

7 мая 1975 года

**УДОСТОВЕРЕНИЕ**

**на рационализаторское предложение**

№ 56/1 5.1.76 г. (дата подачи)

В соответствии с пунктом 76 Положения об открытиях, изобретениях и рационализаторских предложениях, утвержденного постановлением Совета Министров СССР от 21 августа 1973 г. № 584, настоящее удостоверение выдано

Исмагилову Сагиту Фатхисламовичу
(фамилия, имя, отчество)
Сергееву К.Н.

на предложение, признанное рационализаторским и принятое
Уфимским
(наименование предприятия,
моторостроительным
организации, когда)
заводом к использованию

под наименованием:
Изменение конструкции
приспособления

Руководитель предприятия
(организации)

М.П. 19 77 г.

**Медалью**
**«За трудовые заслуги»**
награждаются лица, добросовестно относящиеся к своей работе, квалифицированные специалисты, настойчиво повышающие свой профессиональный уровень, проработавшие на предприятии (или в отрасли) не менее 5-ти лет.



Удостоверение №1682
Исмагилов
(Фамилия)
Сагит
(Имя)
Фатклисламович
(Отчество)
В соответствии с Решением Межотраслевого объединенного комитета по наградам
От «04» августа 20 06 г.
награжден(а) медалью
"За трудовые заслуги"
04. 08. 2006г.
председатель МОКН
М.П.
Н.П. Милоченко

Администрация Куюргазинского района
Республики Башкортостан

**НАГРАЖДАЕТ**

**ИСМАГИЛОВА САГИТА ФАТХИСЛАМОВИЧА**

